ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 декабрь (аҡъюлай) 2020

№50 (936)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## ИҒТИБАР!

Матбуғат баҫмаларына 3 декабрҙән иғлан ителгән ташламалы хаҡ менән яҙылыу декадаһы **20 декабргә** тиклем оҙайтылды. ПР905 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **635 һум 82 тингә** яҙылыуҙы дауам итә алаһығыҙ. Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, был иғланды күҙҙән ысҡындырмағыҙ, шулай уҡ таныш-тоноштарығыҙға ла еткереһегеҙ, рух, фекер, бай мәғлүмәт сығанағы булған **"Киске Өфө"** менән дуҫлыҡты дауам итһәгеҙ ине.

**Мөхәрририйәт.**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Дәүләт статусында икән...**
уны ғәмәлгә ашырыу ҙа фарыҙ
3

**Сит милләт вәкиленең...**
башҡорт телен яратҡаны
6-7

**Башҡорт теленең...**
ғаилә теле статусын да нығытайыҡ!
8-10

**ТВ-программа** 14







"Киске Өфө" гәзитенең махсус һаны 7

# Туған телем!




ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә туған тел һаҡланамы, балаларығыҙ нәҫелегеҙҙе дауам итәме?

***Риф ИҪӘНОВ, Өфө калаһы Калинин районы башҡорттары королтайы башҡарма комитеты рәйесе:*** Туған тел бишеге ғаиләлә, тиһәм, бер ниндәй яңылыҡ та асмам, моғайын. Әсә телебеҙгә, тимәк, үҙ асылыбыҙға тоғролоҡ фәҡәт ғаиләнән башлана. Был турала һуңғы ваҡыт күп һөйләйбеҙ, яҙабыҙ, шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер башҡорт ғаиләләрендә балалар үҙ теленән мәхрүм үҫә һәм был уларҙың ғәйебе түгел, ә ата-әсәләрҙең, олатай-өләсәйҙәрҙең битарафлығы, уйлап еткермәүенән килеп сыҡҡан бәлә. Мин ундайҙарға оҙон-оҙаҡ итеп өгөт-нәсихәт уҡырға йыйынмайым, бары тик әсә телеңә тоғролоҡ һаҡлау өсөн көс етkеһеҙ әллә ниҙәр ҙә эшләргә кәрәкмәүен, бары тик үҙ өйөңдә үҙ яҡындарың менән рәхәтләнеп үҙ телеңдә һөйләшеү-аңлашыуың да етә икәнен генә иҫтәренә төшөрөп киткем килә. Эйе, өйҙә, үҙ мөхитеңдә кеше үҙ телен тәүге урынға ҡуйырға тейеш, сөнки үҙ телеңде беләгүрә танырға, һанларға теләмәү - йомшаҡ итеп әйткәндә, асылыңа, ата-бабаларың рухына хыянат һәм ике йөҙлөлөк ул. Ниндәй генә милләт вәкиле булһаң да, үҙ алдыңда шундай бурыс торғанын аңларға тейешһең: һин, тимәк, киләсәк быуын - балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең алдында нәҫелеңдең милли рух бөтөнлөгө һәм әсә телебеҙҙең һаҡланыуы өсөн яуаплыһың. Тимәк, уларҙа туған тел һәм шуға бәйле ғаилә ҡиммәттәренә ихтирам, һөйөү тәрбиәләргә бурыслыһың, тигән һүҙ.

Ошо йәһәттән үҙемдең ғаилә тәжрибәһенә килгәндә, Дим буйын һыулап үҫкән Дәүләкән башҡорто - ҡатыным Рәйлә менән өс ул тәрбиәләп үҫтерҙек. Улар үҙебеҙҙең милли ерлектә, милли ғаилә мөхитендә тәрбиәләнеп, өсөһө лә башҡорт мәктәптәрен тамамлаһа ла, бер ҙә хур булманылар, киреһенсә, өсөһө лә юғары уҡыу йорттарын уңышлы тамамлап, республикабыҙҙың милли кадрҙар сафын тулыландырҙылар һәм бәхет эҙләп, ситкә сығып китмәнеләр, ә әлеге ваҡытта Башҡортостаныбыҙ ҡеүәтен арттырыу мәнфәғәтендә ең һыҙғанып эшләп йөрөйҙәр: иң оло улыбыҙ Рөстәм - "Шәреҡ-сити" фирмаһының генераль директоры, уртансыһы Рәфис менән кинйәбеҙ Айҙар ҙур фермер хужалыҡтары етәкселәре. Шөкөр, килендәребеҙҙең дә бөтәһе лә илһөйәр һәм телһөйәрҙәр нәҫелдәренән. Туғыҙ ейән һәм ейәнсәребеҙ үҫә: 5 ҡыҙ, 4 малай. Бөтәһе лә матур итеп башҡортса һөйләшә, ҙурҙары башҡорт мәктәптәрендә уҡый. Беҙ, ҡартатай менән өләсәй, Шаҡша биҫтәһендә үҙебеҙҙең шәхси йортобоҙҙа йәшәйбеҙ һәм ял, байрам, каникулдар һайын ошо иркен йортобоҙ ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең шат тауыштарынан гөрләп тора. Улар бында гаджеттарын бөтөнләй онота. Бергәләшеп уйнарға ла, йорт-хужалыҡ эштәрендә ярҙамлашырға ла, БСТ-ның "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр тапшырыуҙарын ҡарарға ла өлгөрәләр. Ҡурайҙа уйнап, мин уларҙы бейетеп тә алам. Ейәндәрем үҙҙәре лә ҡурай уйнарға ынтылып тора. Бер ейәнебеҙ Өфөләге Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге музыка мәктәбендә уҡый, ҡурайҙа апаруҡ һыҙҙыра. Каникул ваҡыттарында ейәндәр менән бергәләшеп уҡ-һаҙаҡтар эшләп алдыҡ. Ҡул менән ниҙәр генә эшләһәң дә уны балаларға тел менән һөйләп, күрһәтеп, аңлатып башҡараһың бит инде. Шулай төрлө тема буйынса уларҙың һүҙлек запасы арта, яңы һүҙ, төшөнсә тап булғанда, төпсөнөп, үҙҙәре лә күберәк белеп ҡалырға ынтылып тороуҙарынан ҡыуаныс кисерәм: тимәк, туған тел уларға һөйләшә белеү өсөн генә кәрәк түгел, ә күңел байлығы, зауыҡ үҫтереү сараһы булараҡ та йәшәп итә. Балалар ихатала уйнағанда күберәк мал-тыуар янында булырға ярата. "Безәүкәй, бәрәскәй, себешкәй", тип һәр береһен наҙлап-яратып, улар менән уйнап туя алмайҙар. Был да бит улар күңеленә үҙенә күрә изгелек, мәрхәмәтлелек тойғоһо һала, "йортауай" булырға өйрәтә. Ҡыҫҡаһы, ата-әсәләргә, ҡартатай-өләсәйҙәргә шундай теләк еткерер инем: балаларығыҙҙы туған тел мөхитенән айырмағыҙ, уларҙың киләсәктә үҙ асылынан , йөҙөнән яҙып, "юғалған быуын"ға әүерелеүенә сәбәпсе булмағыҙ, улар бының өсөн һеҙгә рәхмәтле булмаҫтар...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## МИРАҪ

*Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр.*
*Башҡорт халыҡ мәҡәле.*

***Тыуғанымдан киткәнемә тиклем -***
***Ғүмер буйы йыйған милкемде,***
***Улым, ҡыҙым, һеҙгә ҡалдырамын***
***Иң ҙур мираҫ - туған телемде.***

***Ул да миңә әсәй-атайымдың***
***Иң берҙән-бер ғәзиз мираҫы,***
***Ул да һеҙгә ғүмер буйы ерҙә***
***Һулар һауа кеүек булһасы.***

***Мең йыл буйы халыҡ аҡылының***
***Мең тылсымын йыйған хазина,***
***Юҡ, һатылмай, сөнки мөмкин түгел***
***Баһа ҡуйыу уның хаҡына.***

***Күкрәк һөтө, бишек йыры менән***
***Ингән дә ул йәнде имләгән.***
***Юҡҡамы ни кеше туған телен***
***Тыуған иле менән тиңләгән.***

***Яратҡанда - бал-май булып тамған,***
***Нәфрәттәрҙә - уҡтай ҡаҙалған.***
***Быуаттарҙың гөлө һәм теленән -***
***Халыҡ яҙмышынан яралған.***

***Халҡым барҙа туған телем булыр,***
***Тик һеҙ уға ғәмһеҙ булмағыҙ.***
***Яҙыҡ булыр әгәр үҙегеҙҙә***
***Аманаттан өҫтөн ҡуйһағыҙ.***

***Тынғы белмәҫ йәнем...***
***Ошо ерҙән***
***Мин киткәс тә уйҙа ятырмын.***
***Ейәндәрем туған телен белһә,***
***Һөйләшергә кире ҡайтырмын.***

***Олатайҙарҙан, әсәйемдән алған -***
***Ғүмер буйы йыйған милкемде,***
***Улым, ҡыҙым, һеҙгә ҡалдырамын***
***Бөйөк мираҫ - туған телемде.***




12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙҙең ғаиләлә туған тел һаҡланамы, балаларығыҙ нәҫелегеҙҙе дауам итәме?



(Башы 1-се биттә).

***Хаят ЙОСОПОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре:*** Минеңсә, баланың туған телгә һөйөүе тыуғас та ишеткән өндәргә, моңдарға үрелеп башлана. Сәңгелдәктә сағында уҡ сабый телебеҙҙең оло байлығы булған Һ, Ҫ, Ҙ, Ҡ һәм башҡа, башҡорт күңеле өсөн генә үтә яҡын, үҙенсәлекле һәм ҡәҙерле өндәрҙе ишетергә тейеш, тигән фекерҙәмен. Һәр саҡ янында булған ата-әсәһе, туғандары баланы бер илаһи көмбәҙ менән уратып, сорнап ала. Мәҫәлән, мин өләсәйемдең: "Хоҙай һиңә ике донъя рәхәтен бирһен", - тип тупылдатып һөйөүен, Камила һәм Фатима инәйҙәремдең мине етәкләп төрлө ҡунаҡтарға эйәртеп алып йөрөүҙәрен әле лә онотмайым. Бына шулай итеп улар мине башҡорттоң күркәм байрам мөхитенә индергән икән, тип уйлайым хәҙер. Өләсәйем, инәйҙәрем теленән гелән генә мәҡәл, әйтемдәр яуып торор булды. "Боронғолар шулай тигән", "Ололар әйткәнсә...", тип йомғаҡларҙар ине һүҙҙәрен. Камила инәйем һөйләгән әкиәттәрҙе, төрлө ауырыуҙы һамаҡлап дауалауын әле булһа тоям кеүек.

Тормош иптәшем Мөхәммәт Рәшит улы менән балаларҙы тәрбиәләүҙә бер төрлө ҡараштა булдыҡ. Беҙҙең ҡунаҡ табындарында уның башҡарыуында халыҡ йырҙары, ҡурай моңдары яңғырар ине. Балаларыбыҙ өсөн тыуған көн байрамдары үткәреү ғаилә йолаһына әүерелде. Яңы йыл иртәлектәренә, 70-80-се йылдар өсөн бик үк хас булмағанса, башҡорт Ҡыш бабайын саҡыра инек. Балалар шатланып, туған телдә шиғыр, йыр, бейеүҙәр башҡарыуҙарын әле лә хәтерләй. 70-80-се йылдарҙа ҡала шарттарында туған телебеҙҙең ҡулланылышы сикләнгән ине бит инде. Шуға, балалар менән ҡала урамдарында, уйын майҙансыҡтарында йөрөгәндә, хатта дауаханала ятҡанда ла гел туған телдә аралаштыҡ. Балаларыбыҙ йәш ярымдан ясле, балалар баҡсаларына йөрөһәләр ҙә өйөбөҙҙә туған тел, ҡурай моңо яңғырап торҙо. Бәләкәйерәк саҡтарында эштән ҡайтып инеүгә өсәүләшеп ҡаршыға йүгереп сығып: "Әсәй, атай, нимә алып ҡайттығыҙ?" - тип һорауҙарын әле лә һағынып иҫкә алабыҙ. Артабан 10-сы һәм 3-сө рус мәктәптәрендә уҡынылар, әммә иптәштәре алдында беҙҙең менән башҡортса һөйләшерҙәр ине.

Бер танышыбыҙ аталары Мөхәммәттән: "Башҡа балалар "папа, мама" тип йөрөгәндә, һеҙҙең балалар иптәштәре алдында "атай, әсәй" тип өндәшергә, башҡортса һөйләшергә оялмайҙармы ул?"- тип һораған. "Ни эшләп оялһындар? Атай, әсәһенең дә кеше араһында бер ҙә тартынмай башҡортса һөйләшеүен күреп үҫә бит улар", - тигән ул.

Ысынлап та, туған телебеҙҙең өйөбөҙгә илаһи бер нур индереүен, өшөгән, ауырыған саҡта йылытып, күңелебеҙҙе имләүен балаларыбыҙға аңлата алғанбыҙ. Мәҫәлән, өлкән улыбыҙ балалары менән бер ҡыҙыҡ уйын уйнай ине: һөйләшкәндә рус һүҙе ҡулланғанға мәрәйҙәр ҡуйыла, кемдең мәрәйе аҙ, йәки бөтөнләй юҡ, шул еңеүсе. Хатта үҙ-ара күберәк һөйләшеп, еңеүсе булырға тырыша улар. Аллаға шөкөр, улдарыбыҙ, ҡыҙыбыҙ кеүек үк, килендәребеҙ, кейәүебеҙ ҙә ғаилә традицияларына беҙҙең кеүек ҡарай. Өфөлә йәшәһәләр ҙә ейән-ейәнсәрҙәребеҙ башҡортса һөйләшә, аралаша. Әле улар Мостай Кәрим исемендәге һәм Фатима Мостафина исемендәге башҡорт гимназияларында белем ала. Алтын-Мәргәнебеҙ үҙҙәре йәшәгән ҡасаба мәктәбендә башҡорт класында уҡый. Диләфрүз байтаҡ йылдар башҡорт бейеү түңәрәгенә йөрөнө, ә Рамаҙан ҡурай уйнарға өйрәнеп алды.

Әммә сетерекле хәлдәр ҙә булып алғылай: Мәҫәлән, 6 йәше тулғас, башҡорт төркөмөнә йөрөгән улыбыҙҙы әҙерлек төркөмөнә күсерҙеләр, тик ул татар телле төркөм булып сыҡты. Улыбыҙҙы башҡортса иҫәнләшкәне өсөн тәрбиәсе шелтәләп тә алған. Әлбиттә, төрлө кимәлдәге ағайҙар мәсьәләне тиҙ арала юлға һалды. Ләкин мине башҡа ата-әсәйҙәрҙең өндәшмәүе һиҫкәндерҙе. "Балабыҙға һүҙ теймәһен" тигәндәрҙер. Ә телебеҙҙең, милләтебеҙҙең кәмһетелеүе тураһында уйлап та ҡарамағандар. Кәмһетелгән милләттең балаһы ла үҙен кәмһетелгән кеше итеп тойоуын аңламаған ата-әсәләрҙең әле лә булыуы үкенесле.

Һүҙемде яҡташыбыҙ шағир Риф Мифтаховтың "Мираҫ" шиғырында әйтелгәнсә, туған телебеҙ балаларыбыҙға, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә "һулар һауа кеүек булһасы", тигән теләк менән тамамлағым килә. Туған телебеҙ - ул милләтебеҙҙең арҡа һөйәге булыуын балаларыбыҙ һәм уларҙан һуң киләсәк быуын да һәр саҡ хәтерҙәрендә тотор, тип ышанам, сөнки шәжәрә тамырҙарыбыҙ быуаттар төпкөлөнә барып тоташҡан аҫабалар нәҫеле бит әле беҙ.

***Рөстәм ХӘСӘНОВ, техник фәндәр кандидаты, Өфө дәүләт нефть университеты доценты:*** Кәләшем Нурзиә менән икебеҙ ҙә ике телле мөхиттә үҫкәнбеҙ. Мин Күгәрсен районының Сапыҡ ауылынан. Мәктәптә күршеләге рус, татар, мордва ауылдары балалары менән бергә уҡыныҡ. Нурзиә Баймаҡ ҡалаһынан, унда ла урыҫ теллеләр байтаҡ. Ләкин заманында атай-әсәйҙәребеҙ, йәмғиәттең йоғонтоһона бирелмәйенсә, беҙҙе туған тел мөхитендә үҫтереүгә күп көс һалды. Шул уҡ ваҡытта күпме башҡорт ғаиләһе үҙ балаларын рус класында уҡытты, йәнәһе, урыҫса белмәй ҡалмаһындар, юғары уҡыу йортона инмәй ҡуймаһындар.Шул уҡ ваҡытта улар тыуған йорттары түрендә лә туған телгә урын ҡалдырманылар. Башҡортса уҡып, балам наҙан ҡалып ҡуйыр, тип ҡурҡҡан ана шундай ҡайһы бер маңҡорт ата-әсәләр ғәйебе менән бөгөн хатта тыуған ауылымда ла үҙ телен аңламаған балалар үҫеп килә.Уларға әйтер һүҙем шул: үҙ телеңде белеү донъяға ҡарашты киңәйтә, башҡа телдәрҙе өйрәнгәндә мейене эшләтергә, уйларға, теге йәки был төшөнсәнең варианттарын эҙләргә һәм табырға булышлыҡ итә, фекерләү ҡеүәһен үҫтерә, сөнки артабан ике теллелек шарттарында уҡыу һәм эшләү барышында телмәреңде генә түгел, фекерләүеңде лә даими рәүештә руссанан - башҡортсаға, башҡортсанан руссаға тиҙ генә ауҙарып өйрәнеү үҙенә күрә логик күнекмә булараҡ, мейе нейрондары тарафынан гимнастика һымаҡ ҡабул ителә, тип уҡығаным да бар. Үҙ телебеҙҙә һөйләшеп, башҡортса уҡыһаҡ та, бер ҙә хур булманыҡ: Нурзиә БДУ-ның журналистика факультетын тамамлап, республика матбуғатында әүҙем хеҙмәттәшлек итә, ә үҙем Өфө дәүләт нефть техник университетын тамамлап, шунда уҡытам, фән менән шөғөлләнәм. Үҙем атай булғас, шуны аңланым: ҡала шарттарында балаңды туған телдә һөйләшергә өйрәтеү - ул ҙур хеҙмәт һәм түҙемлек талап итә. Улыбыҙ Нурсолтан менән ҡыҙыбыҙ Сәлимә, береһе - мәктәптә, икенсеһе - баҡсала, үҙебеҙ эштә көнө буйы рус телендә аралашып ҡайтабыҙ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, кис өйҙә мотлаҡ башҡорт теленә күсәбеҙ, балаларға төрлө һорауҙар яуҙырып, көндәре нисек үткәнен һөйләтәбеҙ һәм уларҙың да башҡортса тулы, матур итеп яуап биреүенә өлгәшергә тырышабыҙ.Балалар башҡортса шиғырҙар ятларға, әкиәттәр уҡырға һәм тыңларға ярата, БСТ-нан балалар өсөн башҡортса тапшырыуҙар ҡарайҙар.

Атай-әсәйҙәребеҙ ейәндәренең әсә телен белеүенә һөйөнөп бөтә алмай. Эргәләренә ҡайтһаҡ, балалар менән рәхәтләнеп һөйләшәләр. Был улар өсөн бәхет тә, ғорурлыҡ та. Ҡайҙа йөрөһәк тә, үҙ-ара туған телдә аралашабыҙ. Йыш ҡына башҡа милләт вәкилдәренән маҡтау, хуплау һүҙҙәре лә ишетәбеҙ. "Мин ошо йәшемә етеп, бер генә телде беләм, ә һеҙҙең балалар хәҙерҙән үк ике телдә аралаша", - тип һоҡлана ҡайһы берәүҙәр. Балаларыбыҙҙа тыуған төйәгебеҙ - гүзәл Башҡортостаныбыҙ матурлығын күңелдәренә һеңдерергә тырышабыҙ: йәй көндәре ғаилә менән республикабыҙ буйлап сәйәхәткә сығып китәбеҙ. Нурсолтан менән Сәлимәгә Шүлгәнташ менән Мораҙым мәмерйәләре бик оҡшаны, Торатауға сәйәхәтебеҙҙе лә йыш ҡына иҫкә төшөрөп, һөйләшеп алабыҙ. Яңыраҡ Өфө күләмендә йыл һайын үткәрелеп килгән "Йәш ғаилә - 2020" конкурсында ҡатнаштыҡ. Унда беҙ мегаполис шарттарында ла туған телде һаҡлап ҡалырға мөмкин булыуын күрһәтергә тырыштыҡ - балалар менән башҡортса йырланыҡ, шиғырҙар һөйләнек. Баш ҡала ярышында еңеүсе булырға ла беҙгә туған телебеҙ ярҙам итте.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**әҙерләне.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 11 декабргә ҡарата рәсми мәғлүмәттәре буйынса, уҙған тәүлектә республикала 149 кеше COVID-19 йоҡторған, 410-ында дауаханан тыш пневмония асыҡланған. Пандемия башланғандан алып бөтәһе 15 859 кешегә яңы коронавирус инфекцияһы диагнозы ҡуйылған. Коронавирустан тағы ике үлем осрағы теркәлгән. Шулай итеп, республикала 97 сирле вирустан вафат булған. Әле стационарҙа 681 пациент дауалана, уларҙың 48-е - ауыр хәлдә, 13-ө - үпкәне яһалма елләтеү аппаратында. 2 170 кеше амбулатор шарттарҙа дауалана.

✓Башҡортостанда 31 декабрҙә эшләү тураһында ҡарар ҡабул ителде, быйыл ул кесаҙнаға тап килә. Мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәйҙең 14 төбәгендә 31 декабрь ял тип иғлан ителде. Ҡырым, Сыуаш Республикаһы, Татарстан, Владимир, Кострома, Белгород, Орел, Рязань, Тула өлкәләрендә һәм ҡайһы бер төбәктәрҙә йәшәүселәр Яңы йыл алдынан ял итә.

✓Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында барған Дөйөм Рәсәй юридик форумында илдәге тәүге QR-Конституция менән таныштырҙылар. QR-кодлы стелалар Башҡорт дәүләт университетында, Күп функциялы үҙәктә, автобус туҡталыштарында һәм башҡа социаль әһәмиәтле урындарҙа ҡуйыла. Беренсеһе Башҡортостандың Конституция судында урынлаштырыла. QR-кодтар ҡала халҡын аныҡ учреждениеның эш йүнәлешенә тап килгән Конституция статьялары менән таныштыра.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров Әбйәлил районында теркәлгән үлемесле авария тураһында әйтеп үтте. Машина менән ҡолонло бейәгә бәрелгәндән һуң, өс үҫмер ҙә йән биргән. Республика етәксеһе автоһәләкәтте "ауыр фажиғә" тип атаны һәм аттарҙы контролһеҙ көтөүгә бәйле һорауҙы өйрәнергә, сара күрергә ҡушты.

✓Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында төрлө илдәрҙән 600-ҙән ашыу спикерҙы һәм бер нисә мең онлайн-ҡатнашыусыны берләштергән Халыҡ-ара бизнес аҙналығы-2020 асылды. Дүрт көнлөк эшлекле программа ШОС һәм БРИКС илдәре төбәктәренең бәләкәй һәм урта бизнес, Рәсәйҙә эшҡыуарлыҡ, туризм, иҡтисад һәм экспорт темаһына арналды. Бынан тыш, Бөтә донъя фольклориадаһының презентацияһы булды.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...



# ДӘҮЛӘТ СТАТУСЫНДА ИКӘН...

## уны ғәмәлгә ашырыу ҙа фарыз

**Мин совет осоронда тыуып үҫкәнмен. Ул ваҡыттағы Советтар Союзын тәшкил иткән күп республикаларҙа булырға тура килде. Урындағы халыҡтың үҙ телендә иркенләп, кинәнеп һөйләшкәнен күреп шатлана ла, бер аҙ көнләшеп тә ҡарай торғайным.**

Шулай бер Ташкентта саҡта магазинда урыҫсалап таҫтамал һораным. Үзбәк һатыусыһы асыуланып: "Һин - ҡара кеше, үҙ телендә һорай алмайһыңмы ни?"- тине. Мин башҡортса "таҫтамал" тигәс, һатыусы: "Таҫтамал сөлге була", - тине лә мин һорағанды ҡулыма тотторҙо. Шунан Ташкентта булғанда аҙна буйы башҡортса һөйләшеп йөрөнөм.

Бер йылдан Литвала командировкала булдыҡ. Петров фамилиялы иптәш менән магазинға инһәк, минең размерҙан бәләкәйерәк иҫ китмәле матур тегелешле арзан ғына костюм эләгә тора. "Ҙурырағы юҡмы?" тип һорағайным, мине ишетеүсе булманы. Шул саҡ хеҙмәттәшем сыуашса ниҙер өндәште. Мин башҡортса яуап бирҙем. Һатыусы йүгереп килеп беҙҙән ниндәй костюм кәрәген һорашты, кейеп ҡарашырға ярҙам итте, һуңынан матур итеп төрөп бирҙе.

**Бының менән шуны әйтергә теләйем: телебеҙҙең зарурлығын һәр ерҙә раҫлай йөрөһәк, уны башҡорттар ғына түгел, ә башҡа милләт вәкилдәре лә теләп өйрәнәсәк.**

Күптән түгел республикабыҙ Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеүҙең 30 йыллығын билдәләне. Ул осорҙа әүҙем йәмәғәт тормошо алып барғандар яҡшы хәтерләй. Документ ҡабул иткәндә башҡорт теленә лә дәүләт статусы биреүгә депутаттарҙың 70 проценты ҡаршы сыҡты. Тик туғыҙ йылдан һуң ғына был хыял тормошҡа ашты.

Закон булыу менән генә мәсьәлә хәл ителмәй әле ул. Уны тормошҡа ашырыу механизмы ла булырға тейеш. Ә беҙҙең телде белмәгән технократ депутаттар был проблеманы белмәй йә белмәмешкә һалыша. Республикала дәүләт телдәрен ғәмәлгә ашырыуҙы күҙәтеп барыусы орган юҡ. Ниңә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йылына бер генә тапҡыр булһа ла үҙе ҡабул иткән закон үтәлешен ҡарамай? Мин заманында прокуратура органдарына ошо турала мөрәжәғәт итеп ҡараным. Яуап бер булды: беҙ федераль ойошма, шуға күрә федераль закондар үтәлешен генә күҙәтеп барабыҙ. Тимәк, Башҡортостан прокуратураһын булдырырға кәрәк. Ә быныһы инде Дәүләт Йыйылышы депутаттары бурысы.

Йәки бына икенсе юл. 2000 йылдар башында Өфөлә дәүләт телдәре буйынса ҙур кәңәшмә үтте. Унең эшендә әүҙем ҡатнашҡан билдәле тел белгесе Рәшит Шәкүр Башҡортостан Хөкүмәте составында ошо йүнәлештә бүлек, һәр ҡала, район хакимиәтендә тел белгестәре булдырырға кәрәк, тип сығыш яһаны. Кәңәшмәне ойоштороусылар тәҡдимде ишетмәмешкә һалышты. Бөлки, шуғалыр ҙа, беҙ йылдың-йылы был мәсьәләгә әйләнеп ҡайтабыҙ. Ҡайтабыҙ ғына түгел, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары тарафынан әҙерләнеп сығарылған урыҫса-башҡортса һүҙлектәрҙе һанға һуҡмайбыҙ. Һәр кем үҙ яғында ҡулланған терминды әҙәби тел нормаһына тура килә тип яҡлап сыға. Мәктәптәрҙә беҙҙең телебеҙҙе башҡа милләт вәкилдәре лә өйрәнә. Ул күп осраҡта аптырап ҡала - кемгә ышанырға? Калининградтан Владивостокка тиклем урыҫтар төрлө диалектта һөйләшә, ләкин улар бер ҡасан да әҙәби тел нормаларын үҙгәртергә тип сығыш яһамай бит.

Дәүләт телдәре нормаларын (Рәсәй Федерацияһының Төп законында нығытылған) күҙәтеүсе органдың юҡлығына бына бер ғәмһеҙ миҫал. Мәләүез ҡалаһында "Ағиҙел" исемле ҡунаҡхана бар. Бынан бер 40 йыл элек уның өҫтөнә ат башындай "Агиҙел" ҡунаҡтар йорто" тип яҙғайнылыр. Ҡайҙа ғына мөрәжәғәт итмәнем, хатта 1986 йылда "Совет Башҡортостаны"нда ике яҙмам донъя күрҙе. Ә йөк, бөйөк мәҫәлсе Иван Крылов әйтмешләй, һаман да урынында. Һәм киләсәктә лә шулай булып ҡаласаҡ. Кәмендә Башҡортостанда, сөнки бына егерме бер йыл инде проблеманы йәмәғәт башланғысында ғына тормошҡа ашырырға маташалар. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының хәл итергә тырышҡан бер йүнәлеше генә был. Уныһы өҫтән күрһәтмә алыу менән мәсьәләгә ҡуш ҡуллап тотона һәм бер йыллап ваҡыт уҙғас һыуына. Һәр осорҙа проблеманы хәл итергә тырышыу урамдағы алтаҡталарҙағы хаталарҙы төҙәтеүҙән башлана.

Ошо унайҙан бер риүәйәт иҫкә төшә. Бер сауҙагәр магазинының алтаҡтаһын хаталы итеп яҙып элеп ҡуя. Быны күреп ҡалған танышы, инеп, уға был хаҡта еткерә. Сауҙагәр: "Беләм хаталы икәнен, ләкин мәсьәләнең икенсе яғы ла бар бит. Алтаҡталағы хатаны күргән кеше мине наҙан тип уйлай һәм быны алдап була бит тип магазинға инә. Ә мин уның алдарға маташҡанын белеп, көтөп торам", - ти.

Бына шулай, республикала тел мәсьәләләрендә иҫәп әлегә сауҙагәрҙәр файҙаһына...

**Сәйфулла ӘМИРОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

МИН - БАШҠОРТ!



# МӨХИТ РУХЫМДЫ УЯТТЫ

**Мин ҡатнаш милләтле ғаиләлә тыуғанмын. Әсәйем - башҡорт, атайым икенсе милләттән. Ғаиләлә ике ул үҫтек. Ғәҙәттә, милләтте атайҙыҡына ҡарап билдәләйҙәр. Ә мин, үҫмер сағымда бер ауыҙ һүҙ башҡортса белмәһәм дә, 2010 йылда бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу барышында, өйҙәгеләрҙе аптыратып, башҡорт тип яҙылдым. Был ҡылығыма хатта әсәйем аптыраны. Атайым ҡырталашып мине үҙ милләтенә яҙҙырырға, оялтырға, хатта кәмһетергә маташты. Тик мин үҙ һүҙемдә торҙом.**

Башҡорт булып яҙылыуҙың сәбәбе бар ине. Тарих уҡытыусыһы, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бер генә башҡорт та хәрби антына хыянат итмәгән, улар араһында һатлыҡ йәндәр булмаған, тип һөйләгәйне. Миңә шул саҡ, бөтә ил Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын билдәләгән йылда, совет осоро ҡаһармандары тураһында фәнни-тикшеренеү эше яҙып, байтаҡ уҡырға тура килде. Әсәм теле вәкиле булып китеүемдә, һис шикһеҙ, уҡытыусымдың роле ҙур булды, ул шул тиклем үҙ еренең илһөйәре ине. Беҙҙе, уҡыусыларын да, үҙ илен, республикаһын яратҡан илһөйәр, телһөйәр итеп тәрбиәләргә һе килгәндер. Халҡым, милләтем, телем, тарихым менән ҡыҙыҡһыныу шунан башланды.

Күп китап уҡыным, ҡыҙыҡһыныуым тиҙҙән ғорурлыҡ тойғоһо менән алмашынды. Бына шул ваҡытта быға тиклем бик әһәмиәт бирмәгән әсә телен өйрәнгем, дөрөҫөрәге - башҡорт булғым килде! Йәй етһә, олатайөләсәй, әсәйемдең туғандары йәшәгән ауылға барырға тырыштым. Улар менән вата-емерә булһа ла башҡортса һөйләштем. Көлкөгә ҡалған саҡтарым да күп булды, әлбиттә. Әммә башҡорт булып яҙылғас, ошо боронғо, данлы халыҡтың телендә һөйләшергә кәрәклеген аңланым. Өйҙә лә әсәйгә тик башҡортса өндәштем. Тәүҙә ул атай менән киҫкен һөйләшеүҙе иҫкәртеү маҡсатынандыр инде, урыҫса яуап бирә торғайны. Йәйләп барыһы ла күнекте, хатта быға тиклем бар тип тә белмәгән атайым да Башҡортостанға исем биргән халыҡтың теле менән ҡыҙыҡһына башланы.

Армияла хеҙмәт иткәндә лә башҡорт булыуым менән ғорурланып йөрөнөм. Старшина башҡорттарҙы хөрмәт итә ине. Салауат Юлаевтың тормош һәм яу юлын яҡшы белгән хәрби командирым мине "Салаватка" тип йөрөттө. Ерән бөҙрә сәсле, зәңгәр күҙле булһам да, хеҙмәттәштәрем дә ихтирам итеп, миңә "башҡорт" тип кенә өндәшә ине.

Туған телгә һөйөү ғаиләнән, ата-әсәнән башлана, тиҙәр. Дөрөҫ. Әммә был һәр осраҡта ла түгел. Кешенең йәшәгән, уҡыған, эшләгән мөхите лә ҙур роль уйнай бында. Был тәңгәлдә балалар баҡсаһында - тәрбиәсенең, мәктәптә уҡытыусының өлөшө баһалап бөткөһөҙ.

**Роберт ТАҢАТАРОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Быйыл приставтар Башҡортостан халҡынан ваҡытында түләнмәгән 3,8 миллиард һум һалым, йыйым, пошлина һәм штраф түләттергән. Был аҡса федераль бюджетты тулыландырған. Приставтарға суд ҡарарҙарын үтәргә иҫәпкә һәм мөлкәткә арест һалыу, сит илгә сығыуҙы ваҡытлыса сикләү, Федераль һалым хеҙмәте һәм ЮХХДИ инспекторҙары менән берлектәге рейдтар, шул иҫәптән "Юл приставы" аппарат-программа комплексын һәм "Мобиль эҙләү" ҡушымтаһын файҙаланыу ярҙам иткән.

✔"Башҡорт теленә яңы ҡараш" тип аталған сарала башҡорт телен популярлаштырыу буйынса проекттарҙың презентацияһы булды. Проект авторҙары, йәмәғәтселек фекере лидерҙары туранантура ҡатнашты, ә киң аудиторияға Башҡортостан юлдаш телеканалында һәм социаль селтәрҙәрҙә тура трансляция ойошторолдо. Ҡатнашыусылар башҡортсарусса һәм русса-башҡортса тәржемәсенең яңы веб-порталы, башҡорт телен өйрәнеү өсөн мобиль ҡушымталар, "Аҫылташ" бренды тураһында мәғлүмәт алды.

✔Башҡортостанда йәшәүселәрҙе COVID-19-ҙан вакцинациялау башланды. Тәү сиратта прививка сирлеләр менән туранан-тура эшләгәндәргә - табиптарға, уҡытыусыларға, социаль хеҙмәткәрҙәргә яһала. Декабрь аҙағына тиклем Башҡортостанға коронавирус инфекцияһынан вакцинаның икенсе партияһы килтерелеүе көтөлә. Алдан хәбәр ителгәнсә, әлегә барлыҡ прививкаларҙы бушлай, табиптарҙың йүнәлтмәһе буйынса дәүләт дауаханаларында һәм поликлиникаларында ғына эшләйҙәр, шәхси медицина учреждениеларында COVID-19-ға ҡаршы вакцина юҡ.

✔Башҡортостан фермерҙары ковидгоспиталдәргә республикала үҫтерелгән йәшелсә һәм аҙыҡ-түлек тарата. Акция Башҡортостан Республикаһында Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты булышлығында уҙғарыла, тип хәбәр итте "Башинформ"ға Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаты, Бөрө районындағы крәҫтиән-фермер хужалығы етәксеһе Яков Кугубаев. Ул үҙе лә медицина учреждениеларына аҙыҡ-түлек менән ярҙам күрһәтә.

✔Рәсәйҙә коронавирус буйынса берҙәм телефон номеры индерелде - 122. Ошо һандарҙы йыйғас: "Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге кәрәк булһа, "1"-гә, табипҡа яҙылыу өсөн "2"-гә баҫығыҙ", тигәнде, ковидҡа ҡаршы үҙәк менән тоташтырғас, "Бында коронавирус һәм медицина ярҙамы буйынса ҡыҙыҡһындырған һорауығыҙҙы бирергә мөмкин" тигән һүҙҙәрҙе ишетеп була.

✓ *Башҡортостан парламенты ауыл хужалығы малын көтөү тәртибен боҙған өсөн яуаплылыҡҡа бәйле закондың үтәлешен тикшерәсәк. Быға Әбйәлил районында балалар үлеменә килтергән юл-транспорт ваҡиғаһы сәбәпсе булды.*



*ҠЫҪҠАСА*

# КӘНФИТ КӘРӘКМӘЙ!

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова йыл һайын социаль приюттарҙа, балалар йорттарында тәрбиәләнгән балаларға Яңы йыл бүләктәре әҙерләгән бизнес-партнёрҙарға һәм ирекмәндәргә мөрәжәғәт итте һәм уларҙы тәм-том урынына файҙалы уйынсыҡтар бүләк итергә саҡырҙы.** "Тәмле-татлы бүләктәрҙе бик күп килтерәләр, тәрбиәселәр йыл да Яңы йыл каникулы ваҡытында балаларҙың һаулығы өсөн борсола. - тине министр. - Партнёрҙарыбыҙға мөрәжәғәт итеп, балаларҙы дөрөҫ туҡланырға һәм ҡыҙыҡлы шөғөлдәргә бергәләп өйрәтергә тәҡдим итәм. Балаларға уйынсыҡтар, өҫтәл уйындары, ижад, спорт өсөн уйындар, открыткалар бүләк итегеҙ, ҡыҙҙарға - матурлыҡ һәм үҙеңде тәрбиәләү саралары". Әлеге ваҡытта Башҡортостандың балалар учреждениеларында 1200-гә яҡын бала тәрбиәләнә. Приюттарҙа - өс-ете, балалар йорттарында 11-15 йәшлектәр күп. Малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда күберәк.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары күсмә зоопарктарҙы һәм дельфинарийҙарҙы федераль кимәлдә тыйыуға өлгәшергә ниәтләй.** "Ҡағиҙә булараҡ, күсмә зоопарктарҙа йәнлектәр йыл әйләнәһенә тығыҙ ситлектәрҙә йәшәй, асылда, улар төрмә камералары булып тора. Хайуандар тейешле тәрбиәләнмәй, ашатылмай, ветеринария хеҙмәтләндереүенән мәхрүм. Һөҙөмтәлә улар йыш ҡына хәүефлегә әйләнә. Беҙҙең республикала, башҡа төбәктәрҙә бер нисә тапҡыр кешеләргә ҡарата агрессия осраҡтары теркәлде. Йәнлектәрҙең яҙмышына ла көнләшерлек түгел. Ишембай районында булған һуңғы осраҡты хәтергә төшөрөү ҙә етә, унда ситлектә ҡарауһыҙ ҡалдырылған айыуҙар табылды. Был дельфинарийҙарға ла ҡағыла", - тине Башҡортостан парламенты рәйесе Константин Толкачев. Уның фекеренсә, ташыған ваҡытта йәнлектәр тығыҙ контейнерҙарҙа йәшәргә мәжбүр, ә ҡырағай тәбиғәттә улар бер көндә тиҫтәләрсә саҡрымды йөҙөп үтә. Закон көсөнә ингән осраҡта күсмә зоопарк хужаларына стационар эш режимына күсеү йә иһә йәнлектәрҙе башҡаларға һатыу өсөн ярты йыл ваҡыт бирелә.

✓ **Башҡортостанда үҙизоляция осоронда оло йәштәгеләр араһында коронавирус менән сирләгәндәр һаны 10 процентҡа кәмегән.** "Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, 10 ноябрҙән республика Башлығы указы буйынса төбәктә 65 йәштән өлкәндәр, шулай уҡ хроник ауырыуҙары булғандар өсөн үҙизоляция режимы ғәмәлгә индерелде.Уларға көндөҙгө сәғәт 11-ҙән төшкө 1-гә тиклем урамда йөрөргә йәки магазинға барып килергә рөхсәт ителә. Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының оператив мәғлүмәттәре буйынса, сикләүҙәр индерелгәндән һуң ололар араһында коронавирус инфекцияһы менән ауырыу кимәле 10 процентҡа тиерлек кәмегән. Ошо категорияға ҡараған граждандарҙың COVID-19 билдәләре менән медицина ойошмаларына мөрәжәғәттәре лә аҙайған.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# БАЛЫБЫҘ ЕҢДЕ!



**"Рәсәй тәмдәре" төбәк брендтарының беренсе милли конкурсы еңеүселәре иғлан ителде. Башҡорт балы "Бөтә илгә" номинацияһында иң яҡшы өсәү иҫәбенә инде.**

"Был конкурсты йыл да ойоштороорға уйлайбыҙ. Унда ҡатнашыусылар абруй яулап ҡына ҡалмай, еңеүселәр өсөн урындағы брендтарҙы үҫтереүҙең комплекслы саралары ла тормошҡа ашырылыр, был иһә ҡыҙыҡлы, үҙенсәлекле һәм иң мөһиме - илебеҙҙең сифатлы аҙыҡ-түлеге менән тағы ла яҡынданыраҡ танышырға мөмкинлек бирер", - тип билдәләне Рәсәйҙең ауыл хужалығы министры Дмитрий Патрушев.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, был конкурсҡа Башҡортостандан 26 милли ризыҡ тәҡдим ителде. Еңеүселәр 8 номинацияла билдәләнде, улар араһында 19 ноябрҙән 2 декабргә тиклем дауам иткән халыҡ тауыш биреүе ҙур популярлыҡ яуланы. Рәсәйҙәр үҙҙәренең яратҡан ризығы өсөн миллиондан ашыу тауыш бирҙе. Тауыш биреүҙең һуңғы көндәрендә башҡорт балы ышаныслы рәүештә илдең 79 төбәгенең 508 ғаризаһы араһында иң яҡшы унау иҫәбенә инде. Конкурстың "Бөтә илгә" номинацияһында еңеүселәрен Башҡортостандан сенатор, Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова иғлан итте. "Ҙур тулҡынланыу менән номинацияла өсөнсө урынға Башҡорт балы лайыҡ булыуын иғлан итәм", - тине ул.

Шуны билдәләп үтәйек: икенсе һәм беренсе урындарҙы Адыгей сыры һәм Вологда майы алды. Республика брендтарының "Беҙҙең ауылдан" номинацияһында ла еңеү мөмкинлеге бар ине. Башҡорт ҡорото һәм "Ҡорғаҙаҡ" минераль һыуы иһә бында иң яҡшы унау иҫәбенә инде.

# БАЛАЛАРҒА БАЙРАМ БУЛАМЫ?



**Башҡортостанда мәктәпкәсә учреждениеларҙа Яңы йылды байрам итеү мәсьәләһе хәл ителде: балалар өсөн иртәлектәр була, ләкин коронавирусҡа бәйле бер ни тиклем сикләүҙәр индерелә.**

Был хаҡта республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин: "Мәктәпкәсә учреждениеларҙа Яңы йыл иртәлектәре төркөмдәрҙә генә була, әммә ата-әсәләр ҙә, олатай-өләсәйҙәр ҙә ҡатнаша алмай. Ситтән Ҡыш бабай, Ҡарһылыу костюмын кейгән өлкәндәрҙе, шулай уҡ операторҙарҙы саҡырмаҫҡа, ә байрам иртәлектәрен белем биреү ойошмалары хеҙмәткәрҙәре көсө менән үткәрергә кәңәш итәбеҙ", - тип белдерҙе. Ведомство башлығы быйыл Республика һәм Кремль Яңы йыл шыршыларын ойоштороу тураһында ла һөйләне. "Аңлашылыуынса, пандемия шарттарында Республика яңы йыл шыршыһын уҙғара алмайбыҙ. Элек был байрамдарҙа йыл һайын 800-гә яҡын бала ҡатнаша торғайны. Ләкин балаларға бүләктәрҙе мотлаҡ тапшырасаҡбыҙ, улар һатып алынған да инде, - тине Айбулат Хажин. - Кремль яңы йыл шыршыһы буйынса хәбәр көтәбеҙ, быйыл ул да булмаҫ, моғайын". Мәктәптәрҙәге шыршыларға килгәндә, бында, министр һүҙҙәренсә, "ковид йоҡтороу хәүефен кәметеү" өсөн белем биреү ойошмаларына байрамды урамда уҙғарырға тәҡдим ителә.

Министр 2021 йылда яңы йыл каникулы оҙайтыламы, тигән һорауға ла яуап бирҙе. "График буйынса беҙҙә каникул 11 ғинуарға тиклем дауам итә, һуңынан уҡый башлайбыҙ. Белеүемсә, әле икенсе ярты йыллыҡта уҡыу графигы федераль кимәлдә тикшерелә. COVID-19 буйынса федераль оператив штабта ҡарар ҡабул ителгәс тә, беҙ, һис шикһеҙ, ошо хаҡта уҡыусыларға, ата-әсәләргә еткерербеҙ", - тине ул. Билдәләнеүенсә, уҡыусылар өсөн икенсе сирек 30 декабрҙә тамамлана, был - каникул алдынан һуңғы уҡыу көнө.

# ҺӘЙКӘЛ ПРОЕКТЫН...



**Өфөлә йәшәүселәргә генерал Миңлеғәли Шайморатов һәйкәленең проекттарын күрһәтәләр. Теләге булғандар 14-16 декабрҙә "Торатау" Конгресс-холында асыҡ ишектәр көнөндә конкурс эштәрен ҡарай ала. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.**

"Әйҙәгеҙ, был варианттарҙы бергәләп ҡарайыҡ, бәлки, улар араһында беҙ ҡуясаҡ һәйкәлдең макеты барҙыр, - тип мөрәжәғәт итте ул яҙылыусыларға. - Еңеүсене билдәләгәндә конкурс комиссияһы һәр фекерҙе иҫәпкә аласаҡ. Бер нисә тапҡыр әйткәнемсә, төҙөкләндерелгәндән һуң Совет майҙаны беҙҙең "Ҡыҙыл майҙан"ға әүерелергә тейеш".

Рәсәй Геройының буласаҡ монументы проекттары конкурсына 19 эскиз һәм өс үлсәүле модель ҡабул ителгән. Уларҙы фотоға төшөрөү тыйылған (авторҙың хоҡуғы). Ләкин республика халҡы махсус бланктарҙа үҙҙәренең баһаламаһын ҡалдыра ала. Экспозиция иртәнге сәғәт 11-ҙән киске 8-гә тиклем эшләй. Алдан яҙылыу өсөн телефон: +7-927-327-77-24 (иртәнге сәғәт 10-дан 5-кә тиклем).

# МАЛЫҢ КӨТӨҮҘӘМЕ?



**Башҡортостан парламенты ауыл хужалығы малын көтөү һәм ҡыуыу тәртибен боҙған өсөн яуаплылыҡҡа бәйле закондың үтәлеш һөҙөмтәлелеген тикшерәсәк. Быға Әбйәлил районында балалар үлеменә килтергән юл-транспорт ваҡиғаһы сәбәпсе булды.**

Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев республика Рәсәйҙә бындай тәртип боҙоуҙар өсөн яуаплылыҡ индергән беренсе төбәк булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ауыл хужалығы малын көтөү һәм ҡыуыу тәртибен боҙған өсөн яуаплылыҡ БР Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекстың 7.3-сө статьяһында билдәләнгән. Түбәндәге штрафтар ҡаралған: граждандар өсөн - 1 меңдән 3 меңгә тиклем, вазифалы кешеләр өсөн - 5 меңдән 8 меңгә тиклем, юридик шәхестәр өсөн 15 меңдән 20 меңгә тиклем. Ошондай осраҡ ҡабатланғанда граждандар өсөн - 3 меңдән 5 меңгә тиклем, вазифалы кешеләр өсөн - 10 меңдән 15 меңгә тиклем, юридик шәхестәр өсөн 30 меңдән 40 меңгә тиклем. "Закондың һөҙөмтәлелеге ниндәй, райондарҙа ғәйеплеләрҙе ысынлап та административ комиссиялар яуаплылыҡҡа тарттырамы? - тигән һорау ҡуя парламент спикеры. - Һалынған штраф күләме бәләкәй икән, уны арттырыу бер нәмә лә бирмәйәсәк. Нисек кенә булһа ла, был проблеманы өйрәнәсәкбеҙ һәм унан сығыу юлын табасаҡбыҙ". Парламент спикеры шулай уҡ мәсьәләне хәл итеү барышында депутаттар республикала малдарҙы чиплау буйынса эште анализлаясаҡ, тип билдәләне. "Проблема йыш ҡына юл-транспорт ваҡиғаларында ҡатнашҡан малдарҙы идентификациялауға барып төртөлә, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе. - Бер кем дә яуаплылыҡ алырға теләмәй, йыш ҡына уның эйәһен табыу ҙа ауырға тура килә. Чиплау, шулай уҡ башҡа мотлаҡ идентификациялау ысулдары бындай хәлдәрҙе иҫкәртә, юл-транспорт ваҡиғаһына сәбәпсе малдың эйәһенә яҙаның ҡотолғоһоҙлоғон тәьмин итә".

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә ВДНХ "ЭКСПО"-ла креатив индустрияларҙы үҫтереүгә арналған "Башҡортостан Республикаһында һөнәрҙәр аҙналығы" асылды. Күләмле сара һөнәрселәрҙе, оҫталарҙы, көнкүреш әйберҙәре, этник кейем-һалым, биҙәүестәр, сувенирҙар әҙерләү өлкәһендә эшләгән предприятиеларҙы берләштерә. Сара барышында "Йыл һөнәрсеһе - 2020" республика конкурсына, ауыл һәм экологик туризм өлкәһендәге проекттар конкурсына йомғаҡ яһала, шулай уҡ республиканың халыҡ художество кәсептәре продукцияһы күргәҙмәһе була.

✓Өфө буйлап "Ҡала легендалары" мобиль гид-ассистенты" проекты Башҡортостан Республикаһының Туризм буйынса комитетында хуплау тапты, хәҙер ул Өфө хакимиәте менән берлектә тормошҡа ашырыла. Гид-ассистент - республиканың баш ҡалаһы ҡунаҡтары, шулай уҡ унда даими йәшәүселәр өсөн дә файҙалы мобиль мәғлүмәт сервисы. Уның ярҙамында Өфөнөң тарихы, мәҙәниәте һәм хәҙергеһе менән танышырға мөмкин. Сервистың интерфейсы рус, башҡорт һәм инглиз телдәрендә була.

✓Өфөлә Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы хеҙмәткәрҙәренә коронавирустан прививка эшләй башланылар. Был хаҡта дауахананың баш табибы Шамил Булатов хәбәр итте. Табип әйтеүенсә, прививка тәү сиратта сир йоҡтороу хәүефе янағандарға яһала. "Эйе, вакцинация кешенең сирләмәүен гарантияламай. Әгәр ҙә инде ошо инфекцияны эләктерһә, ауырыуҙы еңелерәк үткәрә. Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ һәм һау-сәләмәт булығыҙ", - тип өҫтәне баш табип.

✓Баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары 700 миллион һумдан ашыуға төҙөкләндерелгән "Беренсе Май" мәҙәниәт һәм ял паркына көн һайын килә. Кемдер спорт менән шөғөлләнә, кемдер балалары менән саф һауала йөрөй, ләкин ял итеү өсөн булдырылған урында объекттарҙы емереүселәр ҙә күп. Паркта видеокүҙәтеү системаһы эшләй. Биләмәлә 101 камера бар, уларҙың һәр береһе "Хәүефһеҙ ҡала" системаһына тоташтырылған. Тәүлек әйләнәһенә онлайн күҙәтеү тәртип боҙоуға юл ҡуймаҫҡа мөмкинлек бирә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ҠЫШ БАБАЙҘЫ КӨТӘБЕҘ!




**Һаман да шул ҡоронр вирус бәләһеме, әллә икенсе сәбәптәре бармы, әммә быға тиклем Өфө ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рәмил Мөслимов сәләмәтлек торошона бәйле урынын ҡалдырғайны. Өфө ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын яңы башҡарыусы Рөстәм Ғәзизов етәкселегендә үтте.**

Видеоконференция форматында уҙған сарала, ғәҙәттәгесә, ҡала территорияһында булған ваҡиғаларға ҡыҫҡаса байҡау яһалғандан һәм төп мәлдәргә иғтибар йүнәлтелгәндән һуң, көн тәртибенә сығарылған мәсьәләләр ҡаралды. Мәғлүм булыуынса, миҙгел алышынған ваҡытта юлдарҙа аварияләр күбәйә. Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса ЮХХДИ идарағы начальнигы урынбаҫары Руслан Исламетдинов ошо юҫыҡтағы мәғлүмәттәр менән таныштырҙы. Аварияләр, ғәҙәттә, төнгә тура килә. Быны төп сәбәбе булып ҡала юлдарының ҡәнәғәтләнерлек торошта, йәғни юлдарҙа горизонталь билдәләрҙең булмауы йәки уларҙың асыҡ күренмәүе, уларҙы ҡабатлаған билдәләр ҡуйылмауы, кәрәкле урындарҙа йәйәүлеләр өсөн кәртәләүҙәр юҡлығы тора. Шулай уҡ юлтранспорт ваҡиғаларының өстән бер өлөшө йәйәүлеләрҙе тапатыуға йәки төрттөрөүгә тура килә, 37,9 осраҡта был - йәйәүлеләр үҙҙәре юл ҡағиҙәләрен боҙоуы һөҙөмтәһе. Быйыл Өфө территорияһында 64 ДТП урыны билдәләнгән. ЮХХДИ хеҙмәте юлдарҙың был участкаларын үҙ балансында тотҡан ойошмаларға уларҙы тейешле торошҡа килтереү буйынса талаптар ҡуйған.

Ысынлап та, юлдарҙағы хәүефһеҙлек ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренең генә бурысы түгел, хакимиәттең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов ҡала округында юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген арттырыуға килтергән саралар тураһында бәйән итте. Идаралыҡ эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәренең береһе - юл-транспорт ваҡиғалары тупланған урындарҙы рәткә килтереү. Бындай саралар үҙ һөҙөмтәһен бирә. Мәҫәлән, 2018 йылда Өфөлә авария тыуҙырыу ҡурҡынысы булған 112 урын булһа, былтыр ул 101-гә ҡалған, быйылғы 11 айҙа был күрһәткес - 78. Был йүнәлештә алып барылған эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә 12 яңы светофор ҡуйылған, икеһе модернизацияланған, йыл һуңына тиклем тағы 3 светофор ҡуйырға ниәтләйҙәр. 24 идара ителгән юл сатында светофорҙың сигналын ҡабатлаусы световодиод таҫма, юлға эшләнгән "Йәйәүләр үткәүеле" юл билдәһен ҡабатлаусы 463 билдә һәм башҡа 3765 билдә ҡуйылған. Быйылғы миҙгелдә Өфөлә 247,6 мең квадрат метр майҙанға юл билдәләре эшләнгән, уларҙың 78 процентында, йәғни ҡаланың 337 километр юлында термопластик билдәләр төшөрөлгән. Мәғариф учреждениелары һәм авария хәүефе булған урындарҙа йәйәүлеләр өсөн кәртәләүҙәр ҡуйылған, уларҙың дөйөм оҙонлоғо 10418 километр тәшкил итә. Шулай уҡ белем усаҡтары һәм йәйәүлеләр үткәүелдәре эргәһендә юлдарҙың яҡтыртылған булыуына ла айырым иғтибар бирелә.

Көн тәртибендә шулай уҡ ҡала райондарында хоккей ҡумталары эшләү мәсьәләһе ҡаралды, ҡаланы Яңы йылға биҙәү һәм боҙ майҙансыҡтары төҙөү темаһы ла ситтә ҡалманы. Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Ғәзизов белдереүенсә, был аҙнала боҙ ҡаласыҡтарын эшләү тамамланырға тейеш. Ә инде байрам иллюминацияһы һәм Совет (булаҫаҡ М. Шайморатов) майҙанында шыршы ултыртыу мәсьәләһенә килгәндә, иллюминация 10 декабрҙә тоташтырылһа, Шайморатов майҙанында шыршы 15 декабргә тиклем ҡуйыласаҡ. Тимәк, тиҙҙән Ҡыш Бабай менән Ҡарһылыу киләсәк, уларҙы хатта тажзәхмәт тә ҡурҡыта алмаҫ!

*ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!*

# ПРОКУРОР ТИП ТАНЫШТЫРА...



**Башҡортостан прокуратураһы республикала телефондан алдашыуҙар осраҡтары теркәлеү хаҡында иҫкәртә.**

Мошенниктар үҙҙәрен прокуратураның вазифалы кешеләре тип таныштырып, граждандарға, предприятиелар етәкселәренә ниндәйҙер тауарҙар һатып алырға, кәрәҙле телефон өсөн түләргә йә булмаһа, уларға ниндәйҙер хеҙмәттәр вәғәҙәләп, үҙҙәренә аҡса күсерергә тәҡдим итә. Мәҫәлән, ошо йылдың октябрендә юғары уҡыу йорто филиалы директорына үҙен район-ара прокурор урынбаҫары тип таныштырыусы ир шылтырта һәм Мәскәү комиссияһын ҡаршылау өсөн сәскәләр һәм кәнфит хаҡын түләүҙе һорап, телефон номерын әйтә. Аҡса ебәргәс кенә етәксе үҙенең алданыуын аңлап ҡала.

Ошондай осраҡтар булып тороу сәбәпле, прокуратура граждандарҙы һәм коммерция структуралары вәкилдәрен үҙҙәрен прокуратура, хоҡуҡ һаҡлау һәм контроль-күҙәтеү органдары хеҙмәткәрҙәре тип таныштырыусы кешеләр менән һаҡ булырға саҡыра һәм бындай шикле тойолған осраҡтар хаҡында полицияға йәки прокуратура органдарына хәбәр итеүҙе һорай. Үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәтте йәки башҡа төрлө хәбәрҙе республика прокуратураһының рәсми сайтындағы телефон һандары буйынса тикшерергә мөмкин.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# БОҘ ҠАЛАСЫҠТАРЫ БУЙЛАП...



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова етәкселегендә ҡала һәм республика киң мәғлүмәт саралары, янғын һүндереүселәр, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы вәкилдәре ингән комиссия төп Яңы йыл майҙансыҡтарында урынлашҡан боҙ ҡаласыҡтарының хәүефһеҙлеген тикшерҙе.**

Тәү сиратта боҙ скульптураларының, ҡоймаларҙың, электр техник ҡоролмаларының хәүефһеҙлегенә һәм тотороҡлологона, боҙ һындарҙағы һәм тауҙарҙағы осло мөйөштәр, ярыҡтар, балалар һәм өлкәндәр сәләмәтлеге өсөн хәүефле башҡа зоналарға иғтибар бирелде. Әйтергә кәрәк, яңы коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефенә бәйле республикала ҡышҡы байрамдар осоронда боҙ ҡаласыҡтары һәм башҡа майҙансыҡтар һанын арттырырға хәл ителде. Был бер майҙансыҡта күп кешенең йыйылыуына юл ҡуймаҫҡа ярҙам итәсәк. Быйыл ҡышын ҡала ихаталарында яҡынса 140 яңы йыл шыршыһы һәм 80 тау, 55 боҙ ҡаласығы һәм 22 "пятачок" барлыҡҡа киләсәк. Бынан тыш, ихаталарҙа 80-гә яҡын хоккей ҡумтаһы эшләнгән.

Акция барышында Ленин, Салауат Юлаев исемендәге майҙандарҙа, Спорт һарайы, Өфө балалар филармонияһы алдындағы, Өфөнөң Дим районының, "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял парктарында, Затон бистәһендәге "Тулҡын" скверы, С. Орджоникидзе һәм "Моторҙар эшләүселәр" мәҙәниәт һәм ял һарайы алдындағы майҙандарҙа, шулай уҡ Арыҫлан Мөбәрәков һәм Софья Перовская урамы сатындағы шыршылар һәм боҙ ҡаласыҡтары тикшерелде. Әйткәндәй, Өфөнөң барлыҡ райондарында һәм алыҫ биләмәләрҙә 16 майҙансыҡта яңы йыл ҡаласыҡтары йыһазландырылған. Улар ҙа комиссия иғтибарынан ситтә ҡалмаясаҡ.

Дөйөм алғанда, тикшереү ҡала Яңы йыл майҙансыҡтарының хәүефһеҙлек нормаларына тап килеүен күрһәтте.

- Иҫкәрмәләр бар, улар булырға тейеш тә. Район комиссияларын тикшергәндән һуң да, электр, боҙ, тау конструкциялары буйынса ла етешһеҙлектәр булыуы асыҡлана. Тәү сиратта беҙ хәүефһеҙлек сараларына ҡарайбыҙ, ә һындарҙың һәм композицияларҙың эстетикаһына һәм матурлығына түгел. Етешһеҙлектәр буйынса протокол төҙөйбөҙ һәм улар яҡын араларҙа бөтөрөлөргә тейеш. Шуға ҡарамаҫтан, боҙ ҡаласыҡтары төҙөлөшө арҡаһында Өфөлә Яңы йыл кәйефе барлыҡҡа килә, тип әйтергә мөмкин, - тип билдәләне Алина Сөләймәнова һәм боҙ ҡаласыҡтары торошон ҡала хеҙмәттәре белгестәре һәр ваҡыт контролдә тоторға тейешлеген дә һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шулай уҡ боҙ ҡаласыҡтарында йәмәғәт тәртибен полиция хеҙмәткәрҙәре һәм Өфөнөң Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре күҙәтәсәк. Бынан тыш, төп майҙансыҡтарҙа "Хәүефһеҙ ҡала" системаһының видеокүҙәтеү камералары ҡуйылған.

Муниципалитет бөтә төр милек формаһындағы предприятие, сауҙа һәм халыҡты хеҙмәтләндереү объекттарын байрам кәйефен булдырыуға ҡушылырға

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Энтероколит

❖ Энтероколит - нәҙек һәм йыуан эсәктең елһенеүе. Дауаланыу өсөн бер тигеҙ нисбәттәге кесерткән, меңъяпраҡ һәм эт муйылы (крушина) ҡайырын ваҡлап, бутарға. Килеп сыҡҡан ҡатышманың ике ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне икегә бүлеп, береһен иртәнсәк, икенсеһен төнгөлөккә эсергә.

### Ашҡаҙан-эсәк юлы ҡанһырауы

**Халыҡ медицинаһы эске ҡан ағыуҙарҙан түбәндәге үҫемлектәрҙе ҡулланырға кәңәш итә.**

❖ Баҫыу ҡырҡбыуыны (хвощ полевой) үләне ҡайнатмаһын әҙерләү өсөн бер ҡалаҡ ваҡланған үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стаканлап ашағандан һуң бер сәғәт үткәс эсергә.

❖ Бер ҡалаҡ ваҡланған һыу боросо (горец перечный) үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә, үләнен һығып алырға. Көнөнә 3 тапҡыр 2/3 стаканлап эсергә. Был төнәтмә геморройға бәйле ҡан килеү осрағында ла файҙалы. Әммә үләнде күрһәтелгән миҡдарҙан артыҡ тотонорға ярамай, ағыулы.

❖ Ат ҡуҙғалағының 1 ҡалаҡ ваҡланған тамырына 200 мл һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға, шунан 2 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

### Шәкәр диабеты

❖ Шәкәр кимәлен кәметеү өсөн бер тигеҙ өлөштә валерьян тамыры, баҫыу ҡырҡбыуыны һабағын һәм ҡорос ағас япрағын (ясень) алып, ваҡларға һәм ҡушырға. Килеп сыҡҡан ҡатышманың 2-3 семтеменә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Төнәтмәне көн дауамында әҙләп кенә уртлап эсергә. Дауаланыу осоро - 1 аҙна.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Әгәр башҡорт телен өйрәнһәм, яратҡан башҡорт йырҙарының һүҙҙәрен аңлаясаҡмын, был йырҙарҙы үҙем йырлай аласаҡмын тип, башҡорт телен өйрәнергә ҡарар ҡылдым.*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Ҡораманы боронғо нағыштар менән берләштереүҙәре үҙенсәлекле булған, тәү сиратта ҡуш элмә техникаһында башҡарылған ҡусҡар биҙәк ҡулланылған. Шаҡмаҡ деталдәре булған көп менән ҡапланған сергеләрҙең ҡаймаһы мөйөштәрендәге шаҡмаҡтар ҡайылған, ҡайһы бер осраҡта нағыш башҡа деталдәрен дә ялмаған. Әбйәлил районы Буранғол ауылындағы боронғо туй сергетышының мөйөштәге ҡыҙыл шаҡмаҡтары ҡусҡар биҙәкле булыуҙан тыш, уларҙың уртаһында торған ҡара шаҡмаҡтар ҙа ҡайылған һәм уртанан үткән ҡара күк һыҙатына йондоҙға оҡшаш нағыш һалынған. Һул һәм уңда өсмөйөштәрҙән торған мозаика һыҙаты урынлашҡан. Һырт яғынан серге йәшел буҫтау менән көпләнгән.



*Ҡайылған ҡорамалы сергетыш (БР, Әбйәлил районы, Буранғол ауылы). Автор фотоһы. 1971*

Үҙәк яҫылыҡ тулыһынса төрлө төҫлө ҡораманан тегелгән булһа, ҡайма һыҙаты ҡайып биҙәлгән. Стена буйы келәмдәрендә ҡусҡар орнаментлы бер төҫтәге туҡыма һыҙаттары төрлө төҫтәге өсмөйөштәрҙән төҙөлгән шаҡмаҡтар бағаналары менән сиратлашып килгән. Барыһы ла ҡайма менән уратып алынған. Белорет районы Аҙналы ауылынан булған келәмдең сите тар ҡыҙыл һәм киң ҡара күк туҡыма менән ҡаймаланған. Уларҙың тоташҡан ере "кәзә тояҡ" йөйө ярҙамында ҡаймаланған. Ҡайма буйынан буйына хисаплы шыма ҡайыу алымындағы төрлө төҫтәге ҡыя шаҡмаҡтар, тәрегә оҡшаш сәскә формаһындағы оя биҙәктәр, йондоҙҙар менән биҙәлгән. Йола әйберҙәрендә бер типтағы геометрик биҙәкте һаҡлап ҡалып, төрлө биҙәү алымдарын бергә ҡушыу был декорҙың традицион булыуы хаҡында һөйләй.



*Ҡайылған ҡорамалы келәм (БР, Белорет районы, Аҙналы ауылы). Автор фотоһы. 1976*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Һуңғы ваҡытта ватсапта һәм интернет селтәрендә бер украин егетенең башҡорт-татар-рус телдәрендә йырлаған йырҙары тупланмаһы таралды. Хатта ҡайһы берәүҙәр: "Саф башҡорт тиерһең!", "Башҡорттан айырып та булмай", - тип һоҡланыуҙарын белдерҙе, тел шартлатты. Хәҙер заманса технологиялар ете диңгеҙ аръяғындағы кешене лә эҙләп табыу мөмкинлеген бирә, мин дә үҙенең моңо һәм "башҡорт телен һыу кеүек эсеүе" менән беҙҙең күңелдәрҙе яулаған Андрейҙы эҙләргә булдым һәм барлыҡ таныштарҙы, мөмкинлектәрҙе эшкә ҡуштым. Күп тә үтмәй, уның үҙенән яуап килде. Һөйләшеүҙең ниндәй формаһына (яҙма йәки видеобәйләнеш) өҫтөнлөк биреүен белешкәс, ул оҙаҡ уйлап торманы: "Һорауҙар ебәрһәгеҙ яҡшыраҡ булыр, минең яуап бирергә ваҡытым булыр", - тип яуапланы. Әйтергә кәрәк, яуаптарын да оҙаҡ көттөрмәне һәм улар саф башҡорт телендә ине (һаманғаса башҡорт клавиатураһын ҡуймайынса, гаджеттарҙа рус хәрефтәре менән башҡортса яҙған милләттәштәр, таш һеҙҙең баҡсаға!). Шулай итеп, иғтибарығыҙға Андрей ДРИНФЕЛЬД менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# СИТ МИЛЛӘТ ВӘКИЛЕНЕҢ...

## башҡорт телен яратҡаны



**Андрей, бөгөн Башҡортостанда балалар бәләкәйҙән үк рус телендә һөйләшеп үҫә, хатта ҡайһы берҙәренең теле русса асыла. Һәм уларҙың башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныуын уятыу өсөн төрлө саралар, программалар, конкурстар, флешмобтар һ.б. ойошторола. Ә бына һеҙҙә, сит милләт вәкилендә, башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу ҡасан һәм нисек тыуҙы?**

- Мин Украинаның Харьков ҡалаһында тыуып үҫтем, ә туғыҙ йәш булғанда ғаиләбеҙ Америка Ҡушма Штаттарының Чикаго ҡалаһына күсенде. Әсәйем сығышы менән Өфөнән, әммә уның ғаиләһендә рустар ғына, йәғни тамырҙарымда башҡорттар, шулай уҡ минән башҡа башҡорт телен белгән кешеләр юҡ. Әсәйем Өфөнөң Черниковка бистәһендә тулыһынса рус телле мөхиттә тыуып үҫкән. Ул ваҡытта биҫтәлә татарҙар ҙа, башҡорттар ҙа бик аҙ һәм улар ҙа күбеһенсә рус телендә һөйләшә. Бала саҡта йәй һайын әсәйемдең туғандарына Өфөгә килгәндә Черниковка урамдарында күбеһенсә тик рус телен ишеттем. Шуның өсөн ул ваҡытта башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныу ихтималы аҙ ине.

Әммә миңә ун йәш булғанда барыһы ла тамырынан үҙгәрҙе. Бер ваҡыт Өфөлә булғанда мин телевизорҙа башҡорт йырҙары концертын ҡараным һәм был миңә бик оҡшап ҡалды. Шунан һуң мин йәй һайын Өфөгә килгәндә телевизорҙан башҡорт һәм татар йырҙарын тыңлай инем. Тиҙ арала башҡорт халыҡ йырҙарына, оҙон көйҙәренә, ҡурай моңона ғашиҡ булдым. Ул ваҡытта (егерме йыл самаһы элек) интернет әле көслө түгел ине. Америкала өйөбөҙҙә компьютер һәм интернет булһа ла, интернетта башҡорт музыкаһы бик булманы. Шуға мин башҡорт йырҙарын күбеһенсә тик Өфөлә булған ваҡытта ғына ишеттем. Һуңынан бер нисә кассетаны Америкаға алып барҙым. Әсәйем минең ҡыҙыҡһыныуымды күреп, башҡорт теле дәреслеге һатып алды, әммә мин әле бала ғына инем, шуға күрә үҙ белдегем менән яңы телде өйрәнә алманым.

Бер нисә йылдан һуң, аныҡлап әйткәндә 2006 йылда (миңә ун ете йәш булған саҡта) етди рәүештә башҡорт телен өйрәнә башланым. Быға ике сәбәп булды. Беренсеһе - интернетта беренсе тапҡыр башҡорт телендә йырҙар һәм башҡа материалдар күпләп күренә башланы. Чикагола йәшәһәм дә, хәҙер инде теләһә ҡайһы ваҡытта башҡорт йырҙарын тыңлай алдым, әммә йырҙарҙың һүҙҙәрен аңламаным. Әгәр башҡорт телен өйрәнһәм, яратҡан башҡорт йырҙарының һүҙҙәрен аңлаясаҡмын, был йырҙарҙы үҙем йырлай аласаҡмын тип, башҡорт телен өйрәнергә ҡарар ҡылдым. Икенсе сәбәп - шул ваҡытта мин төрлө телдәр менән ҡыҙыҡһына башланым һәм яңы телдәр өйрәнеүгә һәләтем уянды. Шулай уҡ бер нисә йыл элек Өфөлә һатып алған башҡорт теле дәреслеге һаман өйөмдә китап кәштәһендә ята ине. Мин уны ҡулланып, башҡорт телен өйрәнә башланым. Дәреслек буйынса уҡып, телде өйрәнеүҙе тамамлағандан һуң, интернетта башҡортса яҙылған төрлө текстарҙы уҡып, башҡорт йырҙары, башҡорт радиоһының Юлдаш каналын тыңлап, башҡорт телен өйрәнеүҙе үҙаллы дауам иттем.

Һуңынан татар телен дә өйрәнә башланым. Башҡорт телен өйрәнгәндән һуң, татар телен өйрәнеү бик еңел булды. Башҡорттар һәм татарҙар араһында был популяр фекер түгел, әммә минең өсөн, өйрәнсек булараҡ, ҡайһы ваҡытта башҡорт теле һәм татар теле бер тел булып тойолдо, тиерлек.

**Күптәр башҡорт телен өйрәнеү өсөн ауыр тел, ти. Йә ғәйепте ғаиләнән, тәрбиәселәрҙән, уҡытыусынан эҙләй. Һеҙ башҡорт телен үҙаллы өйрәнгән кеше булараҡ, дөрөҫөн генә әйтегеҙ әле: башҡорт теле өйрәнеү өсөн ауыр телме?**

- Минең өсөн яңы телдәр өйрәнеү еңел, шуға ла башҡорт телен өйрәнеү ҙә ауыр булманы. Әммә, әгәр мин башҡорт телен башҡа үҙем белгән телдәр менән сағыштырып ҡараһам, башҡорт телендә еңел өлөштәр ҙә, ауыр өлөштәр ҙә бар, тип уйлайым. Мәҫәлән, рус, инглиз һәм башҡа Европа телдәре менән сағыштырғанда, башҡорт телендә лә, башҡа төрки телдәрҙә лә һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе тулыһынса айырыла. Мәҫәлән, рус телендә "Я знаю человека, которого ты встретил на рынке сегодня утром", тигән һөйләм башҡорт телендә "Мин һин бөгөн иртән баҙарҙа осратҡан кешене беләм", була. Әгәр беҙ был ике һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен сағыштырып ҡараһаҡ, ул тулыһынса айырыла. Рус телендәге һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе башҡа Европа телдәре (инглиз теле, француз теле һәм башҡалар) менән оҡшаш, ә башҡорт телендәге һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе башҡа төрки телдәр һәм ҡайһы бер башҡа Азия телдәре (мәҫәлән монгол теле, корей теле һәм япон теле) менән оҡшаш. Ҡайһы бер төрки телдәрҙе өйрәнгән япон һәм корей кешеләре төрки телдәрҙә һүҙҙәр тәртибе еңел тип уйлай, сөнки улар һүҙҙәрҙең шундай тәртибенә өйрәнгән. Әммә рус телле кешеләр өсөн һүҙҙәрҙең бындай тәртибен өйрәнеү ауыр, сөнки ул беҙгә таныш булған һүҙҙәр тәртибенән тулыһынса айырыла.

Башҡорт теле грамматикаһында ҡайһы бер еңел өлөштәр ҙә осрай. Мәҫәлән, рус телендә лә, инглиз телендә лә дөрөҫ булмаған ҡылымдар бар. Уларҙың төрлө формаларын хәтерҙә ҡалдырыу еңел түгел. Ә башҡорт телендә һәм башҡа төрки телдәрҙә бындай ҡатмарлыҡ юҡ, сөнки уларҙа барлыҡ ҡылымдар ҙа дөрөҫ. Һәр ҡылымдың тамырын ғына хәтерҙә ҡалдырыу кәрәк, ә барлыҡ формаларын ҡағиҙәләр буйынса өйрәнергә мөмкин. Ғө-

**✓ Америкала йәшәгән ҡайһы бер татарҙар һәм башҡорттар ғаилә эсендә үҙ телен һаҡлай. Мәҫәлән, Лос-Анджелеста йәшәгән Айгөл Ғимранованың балалары Америкала үҫһә лә, башҡорт телендә һөйләшә.**

мүмән, рус теле һәм инглиз теле менән сағыштырып ҡарағанда, башҡорт теле морфологияһы күберәген дөрөҫ, логикаға нигеҙләнгән тип уйлайым.

Ҡайһы бер рус телле кешеләргә башҡорт теле өндәрен өйрәнеү ауыр булыр тип уйлайым, әммә минең өсөн ул еңел ине, сөнки мин бала саҡтан Америкала йәшәгәс, инглиз телен яҡшы беләм, ә башҡорт телендә булған ҡайһы бер өндәр (ҫ, ҙ, һ, ң) инглиз телендәгеләргә оҡшаш.

**Башҡорт телен өйрәнеү - бер, уны һаҡлау өсөн мөхит кәрәк, тиҙәр Башҡортостан башҡорттары. Ә телде үҙаллы өйрәнгән һәм башҡорт мөхитенән ситтә йәшәгән кешегә башҡорт телен камиллаштырыу өсөн нимә кәрәк?**

- Башҡорт телендә башҡорттар менән аралашыу мөмкинлеге булмаһа, күп уҡырға һәм тыңларға кәрәк. Мин башҡорт телен күбеһенсә уҡыу һәм тыңлау аша өйрәнгәс, уны хәҙер шул уҡ рәүештә һаҡлайым. Һәр ваҡыт түгел, әммә ҡайһы ваҡытта ютубта башҡорт телендә төрлө программаларҙы ҡарайым, төрлө йырҙарҙы тыңлайым. Әгәр мин күп ваҡыт башҡортса тауыштарҙы тыңламаһам, бер аҙ онота башлайым, ә янынан тыңлай башлаһам, ул иҫкә төшә. Ҡайһы ваҡытта башҡорттар менән башҡорт телендә һөйләшергә форсат табыла, әммә һирәк, сөнки Америкала башҡорттар бик аҙ һәм улар уның төрлө-төрлө яҡтарында йәшәй.

Америкала йәшәгән ҡайһы бер татарҙар һәм башҡорттар ғаилә эсендә үҙ телен һаҡлай. Шундай кешеләрҙе осратҡаным бар. Мәҫәлән, элек башҡорт телевидениеһында эшләгән, хәҙер Лос-Анджелеста йәшәгән Айгөл Ғимранованың балалары Америкала үҫһә лә, башҡорт телендә һөйләшә. Минең ундай форсатым юҡ, сөнки ғаиләмдә мин үҙем генә башҡорт телен беләм. Шуға күрә күбеһенсә башҡорт йырҙарын һәм программаларын тыңлап, башҡорт телен һаҡлайым.

**Интернет селтәре буйлап һеҙҙең башҡарыуҙа башҡорт, татар телдәрендә яҙылған йырҙар тарала һәм уларҙы башҡорт башҡарыусыларынан айырыуы ла мөмкин түгел. Шулай ҙа һөнәрегеҙ буйынса һеҙ кем?**

- Һөнәрем буйынса мин - лингвист, хәҙер аспирантурала уҡыйым. Донъялағы телдәр, уларҙың төрлөлөгө менән ҡыҙыҡһынам. Хәҙер мин Папуа-Яңы Гвинеяла йәшәгән бер аҙ һанлы халыҡтың теленең грамматикаһын диссертация итеп яҙам. Был тел Аро тип атала һәм уның һүҙлеген, грамматикаһын әлегәсә бер кем дә яҙмаған. Ошо тел, донъяның башҡа аҙ һанлы халыҡтарҙың телдәре кеүек, аҡрынлап юҡҡа сыға бара. Шундай телдәр тураһында уларҙың бөтөнләй юҡҡа сығыуынан алда мәғлүмәт яҙырға кәрәк. Башҡорт теле менән хәҙерге ваҡытта профессиональ яҡтан шөғөлләнмәйем, әммә лингвистика белемем миңә уның өндәрен, грамматикаһын яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә.

Йырлау менән иһә профессиональ рәүештә шөғөлләнмәйем, бының өсөн һәләтем дә, теләгем дә юҡ. Интернетҡа һалған йырҙарҙы һәүәҫкәр кимәлдә йырларға мөмкин. Быны "Урал", "Буранбай" кеүек бик ҡатмарлы булған башҡорт халыҡ йырҙарын интернетҡа һалмайым, сөнки уларҙы башҡарыр өсөн тауышым етмәй. Ә яҙҙырған йырҙарҙа әйтелеш яҡшы булһын өсөн күп практика, ҡабатлау ғына кәрәк. Мин башҡорт йәки татар телендә яңы йырҙы өйрәнә башлаһам, уны бер, ике тапҡыр ғына йырлаһам, әйтелешем бик яҡшы булмаҫ ине. Ә егерме йәки утыҙ тапҡыр бер йырҙы йырлап ҡабатлаһам, шунда инде әйтелешем яҡшыра бара.

**Ғаиләгеҙ менән дә таныштырып китегеҙ әле? Америкаға нисек барып юлыҡтығыҙ?**

- Әсәйем тураһында башта әйттем инде, ә атайым Украинаның Харьков ҡалаһында тыуып үҫкән. Улар Өфөлә уртаҡ дуҫтар аша танышҡан. Өйләнешкәндән һуң әсәйем Украинаға күсенгән. Атайым - математик. Әсәйемдең шулай уҡ математика буйынса белеме бар, әммә ул хәҙер эшләмәй. 1999 йылда атайым Америкала Чикаго университетында эшләй башлағас, шунда күсендек. Ә тормош иптәшем - Ҡытайҙан. Ул Америкаға алты йыл элек килгән. Беҙ ике йыл элек осраштыҡ.

**Интернет селтәрендә йөрөгән бер аҙмала башҡорт милләте вәкиленән уның ырыуы менән ҡыҙыҡһыныһығыҙ һәм "кыпсаҡ" тигәс, "Ҡыпсаҡ ҡыҙҙары" тигән йырҙы башҡарыһығыҙ. Ә һеҙ үҙегеҙҙең тамырҙарығыҙҙы беләһегеҙме?**

-Тарих һәм этнография менән ҡыҙыҡһынам, шуға күрә минең өсөн шәжәрә һәм ырыуҙар темаһы бик ҡыҙыҡлы. Шулай уҡ айырыуса башҡорт ырыуҙары тураһында күп уҡығаным бар. Шуға күрә башҡорт милләте вәкилдәре менән аралашҡанда уларҙың ырыуҙары, шәжәрәләре тураһында һорашырға, белешергә яратам.

Үҙемдең тамырҙарымды, әлбиттә, бер аҙ беләм. Мәҫәлән, әсәйемдең ата-әсәһе һәм уларҙың ата-бабалары барыһы ла рустар һәм Бөйөк Ватан һуғышына тиклем Ярославль һәм Тверь өлкәләрендә йәшәгәндәр. Ә атайымдың ата-әсәһе һәм уларҙың ата-бабалары барыһы ла Көнбайыш Украина йәһүдтәре. Шулай уҡ мин өс-дүрт быуын ата-бабаларымдың исемдәрен беләм. Әммә башҡорттар кеүек ете һәм унан күберәк быуынымды белмәйем. Ни өсөн? Сөнки башҡорттар ырыу-ырыу булып йәшәгәндәр, ырыуының тамырҙарын, кәмендә ете быуын ата-бабаларын белергә тейеш булғандар. Ә рустарҙа ла, йәһүдтәрҙә лә хәҙерге заманда ундай йола юҡ. Үҙемдең тамырҙарымды яҡшыраҡ белгем килһә лә, өс-дүрт быуындан башҡа мәғлүмәт юҡ.

Ғөмүмән, Рәсәйҙә генә түгел, бөтә донъяла төрлө мәҙәниәттәр араһында шундай айырма бар - ҡайһы бер мәҙәниәттәрҙә үҙенең тамырҙарын яҡшы белеү бик мөһим, ә ҡайһы берҙәрендә мөһим түгел. Мәҫәлән, ғилми тикшеренеү буйынса Папуа-Яңы Гвинеяға барғаным бар. Аро халҡы вәкилдәре менән бер нисә ай йәшәнем. Улар, боронғо башҡорттар кеүек, ырыу-ырыу булып йәшәй һәм улар өсөн үҙҙәренең тамырҙарын яҡшы белеү бик мөһим. Яҙыуҙары булмаһа ла, улар ете быуын ғына түгел, ун бер, ун ике йәки ун өс быуын ата-бабаларының исемдәрен хәтерҙә тота! Шулай уҡ улар ата-бабалары ҡайҙан килеп сыҡҡанын, ҡайһы урында йәшәгәнен белә, ырыуының тарихынан төрлө риүәйәттәрҙе иҫләй.

**Башҡорттар менән башҡортса, татарҙар менән татарса һөйләшергә тырышам, тиһегеҙ, йәғни телдән телгә күсеп киткән ваҡытығыҙҙы "йәшниктәр" менән сағыштырыһығыҙ: башҡорт теле бер йәшниктә, татар теле - икенсеһендә. Ә бына "башҡортлоҡ" тигән "йәшнигегеҙ" бармы?**

- Мин башҡорт-татар телдәрен өйрәнгәндән һуң тәүге ваҡытта татар, башҡорт һүҙҙәрен, өндәрен һәр ваҡыт бутай инем. Татарса йәки башҡортса һөйләшкәндә ике телдән дә алған һүҙҙәрҙе бер һөйләмдә болғағас, саф башҡорт телендә лә, саф татар телендә лә һөйләшеү ауыр булды. Әммә һуңыраҡ, бер ни тиклем ваҡыт үткәс, хәтеремдә барыһы ла үҙ урынына ятты. Башҡортса һөйләшә башлағанда, тик башҡорт һүҙҙәрен ҡулланам, ә татарса һөйләшкәндә - тик татар һүҙҙәрен. Татар телен, башҡорт телен бер береһенән айырыу, был ике телдең һүҙҙәрен бутамау өсөн, ысынлап та, "йәшник"тәр кәрәк булды. Тәүге ваҡытта мейемдә "ҫ", "ҙ" өнө - "ч", "ж", "әсәй" һүҙе - "әни", "менән" һүҙе - "белән" һәм башҡалар бер йәшниктә ята ине, шикелле. Ә һуңынан улар ике йәшниккә айырылып, рәтләп һалынды. Шуның өсөн хәҙер мин татар телен, башҡорт телен баштағы кеүек бутамайым. Шундай ике "йәшник" менән сағыштырыу, бәлки, ике телде белгән башҡорттарға һәм татарҙарға таныштыр?

Әгәр мин был сағыштырыуға мәҙәниәт яғынан ҡараһам, шулай уҡ ике "йәшник" кәрәк - хәтеремдә "Буранбай", "Урал" йырҙары башҡортлоҡ йәшнигендә ятһа, "Әпипә" һәм "Әлдермеш" йырҙары татарлыҡ йәшнигендә ята, тип әйтеп була. Әммә татар, башҡорт мәҙәниәттәрен бер-береһенән айырыу ауыр түгел, шунлыҡ өсөн уларҙы "йәшник"тәргә һалып ҡуйыу тураһында уйламайым. Ә башҡорт, татар телдәрен бер-береһенән айырыу, ике телде бутамай һөйләшеү ауырыраҡ. Шуның өсөн ошондай "ике тел - ике йәшник кеүек" тигән сағыштырыу башыма килде.

Дөрөҫөн әйткәндә, был ике йәшник менән сағыштырыуҙа тәрән фәлсәфәүи мәғәнә юҡ. Уның күберәк практик мәғәнәһе бар - ике туғандаш телде бер үк ваҡытта өйрәнгәндә был ике телде бутамау өсөн, хәтерҙә тотҡан барлыҡ мәғлүмәтте тәртипкә килтереү бик мөһим.

**Башҡортостан, Өфө тигәндә күңелегеҙҙә ниндәй хәтирәләр уяна?**

- Бала сағым, өләсәйемдең баҡсаһы, апайым һәм ағайым менән йәйгеһен Ҡариҙел районында тәбиғәттә сатырҙа йәшәү, ҡайын еләге тәме, ҡурай, гармун моңдары, оҙон көй, Ағиҙел буйҙары, Салауат Юлаев һәйкәле һәм башҡалар.

**Башҡортостандың халыҡ шағиры Факиһә Туғыҙбаева үҙенең бер шиғырында "Башҡорттарға аңлатамын башҡортлоҡто" тип яҙа. Ә һеҙ башҡорттарға башҡортлоҡто нисек аңлатыр инегеҙ?**

- Мин башҡорт телен белһәм дә, башҡорт йырҙарын күп тыңлаһам да, башҡорт халҡының тарихы тураһында күп уҡыһам да, башҡортлоҡтоң барлыҡ яҡтарын, сифаттарын белә алмайым. Шуның өсөн мин башҡорттарға башҡортлоҡто аңлата алмайым, киреһенсә, башҡорттар миңә башҡортлоҡто аңлатырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башта яҙып үткәнемсә, Андрей яуаптарҙы саф башҡорт телендә ебәрҙе һәм уның яуаптарын үҙенең стилен һаҡлап, әммә саҡ ҡына үҙгәрештәр индереп бирергә булдыҡ. Ихлас, эскерһеҙ яуаптарҙа сит милләттән булһаң да телдәрҙе ни тиклем яратырға мөмкин икәне ярылып ята. Бары тик ярата белергә, белмәгән хәлдә өйрәнергә генә кәрәк. Ә инде уның аҙаҡҡы һорауға яуабы һәр башҡорттоң сәмен уятырға тейеш: "мин башҡорттарға башҡортлоҡто аңлата алмайым, киреһенсә, башҡорттар миңә башҡортлоҡто аңлатырға тейеш".**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

ИҢ МАТУР ҺҮҘ



# УЛ - УҠЫТЫУСЫ

**"Иң матур башҡорт һүҙе"акцияһы тураһында уҡығас, бер ни тиклем уйға ла ҡалдым. Миңә ҡалһа, һәр һүҙебеҙ матур. Матур, сөнки һәр береһе көйләп, йырлап торғандай. Таҙа башҡорт телмәрен ишеткән ситтәрҙең иғтибарын ана шул тарта ла инде. "Ҡайһылай матур телегеҙ, көйләп торған шикелле", - тигәндә үҙем бер нисә тапҡыр ишеткәнем бар.**

Башҡорт халыҡ йырҙарының бик моңло булыуы ла ана шул көйләп тороусы һүҙ байлығынан ул, минеңсә. "Башҡорт урман эргәһенән барһа - урман тураһында, тау буйлап барһа - тау тураһында, йылға буйлап барһа, йылға тураһында йырлай..." тип һоҡланып яҙып ҡалдырған заманында Р.Г. Игнатьев. Үҙенән үҙе көйләп торған тел байлығына эйә булыуыбыҙ тураһында һөйләмәйме һуң был һүҙҙәр? Ҡәҙерен генә белеп йәшәргә, ҡулланырға ине лә беҙгә.

Мал-тыуарға бирелгән ҡушаматтар бөтөнләй юғалып бара. Йылҡы малына ғына төҫө, йәшенә ҡарап аталған йәҙләп булған, тигәнгә хайран ҡалаһың. Был өлкә урыҫ теленә күсеп бөттө тип әйтһәм дә хата булмаҫ.

Гәзиттең алдағы һанында туған, туғанлыҡ терминдары хаҡында һүҙ булғайны. Олоно оло итеп, кесене кесе итеп, яҡынынды яҡын итеп ҡәҙерләгән был һүҙҙәргә лә һәр халыҡ та эйә түгел әле. Олоһон да, кесеһен дә исем менән генә атау күңелгә ятышһыҙ бит ул. Элек ошо матур һүҙҙәрҙе ҡушмай, исем менән генә өндәшкәндә ололар: "Ағас тел", - тип көйөшөр ине.

Мин үҙем был акцияға "уҡытыусы" һүҙен тәҡдим иттем. Ул бөгөн дә киң ҡулланылышта, әлбиттә. Шулай ҙа рус телендәгеһе менән йышыраҡ ҡулланалар кеүек. Был һүҙ донъяға килгән һәр кемде тормош дауамында оҙата бара. Йәше еткән һәр кемде ошо атаманы йөрөткән һөнәр эйәләре белем донъяһына алып инә. Хәреф танырға, уҡырға, яҙырға, иҫәпләргә өйрәтә. Уҡытыусы ярҙамында физика, математика, химия серҙәренә төшенә, һөнәр һайлай, үҫә, һәр төрлө кимәлдә хеҙмәт итә, юғары дәрәжәләргә етә ҡайһы берәү. Игенсенән алып космонавҡа тиклем, ил етәкселәре булып киткәндәрҙең дә күңелендә уҡытыусыһы, "тәүге уҡытыусы" тигән төшөнсә һаҡлана.

Кеше ғүмере буйы белемгә ынтылып йәшәй, ғүмере буйы нимәгәлер өйрәнә. Тимәк, уҡытыусыға һәр саҡ мохтаж. Уҡыған китаптарындан да үҙең өсөн файҙалы кәрәкле кәңәштәр туплайһың икән, китап та - уҡытыусы. Әлеге мәлдә беҙ, ағинәйҙәр, милли кейем буйынса әүҙем эштәр алып барабыҙ. Урындағы ерлеккә хас булғанын эшләргә тырышабыҙ, биҙәктәрен, эшләү алымдарын өйрәнәбеҙ. Оло ғына йәштә булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, бында ла уҡытыусыһыҙ булмай. Уҡытыусыбыҙҙан эшләү алымдарын өйрәнгән сақта телмәребеҙҙә онотола барған һүҙҙәр ҙә терелде: кештәк, беләҙек (күлдәктең еңендәге), флүр яулыҡ, ҡушъяулыҡ, тула, тула һуғыу, тула баҫыу (былар икеһе ике төрлө эш алымы), сарыҡ, ҡата, сарыҡ бороу, ҡыҫмау, яға һәм башҡалар...

"Уҡытыусы" һүҙе, шикһеҙ, иң матур һүҙҙәребеҙҙең береһе. Борон "мөғәллим" тип тә аталған ул. Туған телебеҙгә иғтибарлы булайыҡ, ҡурсалайыҡ, яратайыҡ.

Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА.
Учалы районы.

*✓ Башҡорт телен тәрән итеп өйрәнергә теләгән балалар баш ҡаланың төрлө райондарында йәшәй. Шуның өсөн милли мәктәптәрҙең территорияға беркетелеүе айырым райондарҙы түгел, ҡаланы бер территория итеп ҡуҙалларға тейеш.*

# БАШҠОРТ

## ғаилә теле статусын да

**Былтыр Башҡортостан Республикаһы Башлығының рәсми указы менән Аҡмулланың тыуған көнө - 14 декабрь Башҡорт теле көнө тип иғлан ителде. Бындай даталарҙы махсус рәүештә телде пропагандалауы, уны данлауы һәм бөйөклөккә күтәреүсе ниндәйҙер билдәле шәхестең тыуған көнө менән бәйләү датаһы инде традицияға әүерелеп бара. Мәҫәлән, "Урыҫ теле көнө" Пушкиндың тыуған көнө менән бергә үткәрелә. Шулай уҡ Рәсәйҙә алтай (20 октябрь), адыгей (14 март), бүрәт (6 октябрь), коми-пермяк (17 февраль), муҡшы һәм эрзя (16 апрель), сыуаш (25 апрель), татар (26 апрель), урыҫ (6 июнь), черкес (14 март), чечен (25 апрель) телдәре көнө рәсмиләштерелгән. Быйыл Башҡорт теле көнө рәсми рәүештә икенсе тапҡыр үткәрелә һәм ошо уңайҙан редакцияға БР Мәғариф һәм фән министрлығы Милли мәғариф идаралығының милли мәғариф бүлеге начальнигы Розалия САФИУЛЛИНАны, "162-се "СМАРТ" полилингваль күп профилле мәктәбе" директоры Наил ӘМИНЕВты, Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы директоры Гөлназ ӘХМӘҘИЕВАны, Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының башланғыс синыфтар уҡытыусыһы Гөлнара ХАЖИЕВАны саҡырҙыҡ.**

**▸ 2020 йыл, рәсми булмаһа ла, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм Президиумы тарафынан Башҡорт теле йылы тип иғлан ителде. Уның республика мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуға, телдең абруйын күтәреүгә йоғонтоһо, тәьҫире, файҙаһы булдымы?**

**Гөлнара Хажиева:** Минеңсә, файҙаһы бик ҙур булды, сөнки бынан бер нисә йыл элек башҡорт телен ныҡлап ҡыҫыу башланғайны. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытҡан уҡытыусыларға дәрестәр бирмәй интектерҙеләр, уҡыусылар башҡорт телен уҡыуҙы һайламаған осраҡтар ҙа булды. Был махсус рәүештә эшләнмәне, шулай ҙа бындай күренештәрҙе булдырмау сараһы ла күрелмәне. Ә бына быйыл, киреһенсә, республика етәкселеге яғынан хуплау тапҡан уҡытыусылар үҙ эшмәкәрлеген тағы ла йәнләндереп ебәрҙе. Хатта шундай ҡатмарлы ваҡытта яҡлау, хуплау, телдән генә әйтелһә лә, ҙур ярҙам булып тора.

**Наил Әминев:** Эйе, бына ошо һуңғы ике йылды ғына алһаҡ та, республика Башлығы Радий Фәрит улы тарафынан башҡорт телен уҡытыу, үҫтереү буйынса күп эштәр эшләнде һәм беҙгә мәғариф өлкәһендә эшләүсе, башҡорт телен предмет булараҡ ҡына түгел, дәүләт теле булараҡ уҡытыуы ла, ата-әсәләр менән эшләүе лә еңелләште, сөнки етәкселектән яңы йүнәлеш билдәләнде, яңы һулыш алынды.

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Йылды беҙҙең йәмғиәттең, йәмәғәтселектең, Хөкүмәттең, етәкселектең башҡорт теленә һиңғай йөҙ менән боролғанлығын иҫбатлаусы тағы ла бер этап тип иҫәпләйем, сөнки башланғыс ике йыл, йыл ярым элек һалынһа, ошо осорҙа Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса фонд төҙөлөүе, программалар яҙылыуы, гранттар менән эшләй башлауыбыҙҙы һиңғай елдәр иҫә башлауына бәйләйем. Ҡыҫҡаһы,йыл башҡорт теленең бәсен, әһәмиәтен, уның урынын, дәрәжәһен күтәреү өсөн бик мөһим булды.

**▸ Ысынлап та, хәлдәрҙең ниндәй ҡатмарлы, ҡырҡыу төҫ алыуына барыбыҙ ҙа шаһит. Юғарылағы етәкселәрҙең башҡорт теленә мөнәсәбәте үҙгәргәндән һуң ата-әсәләрҙең ҡарашы үҙгәрҙеме, әллә һаман да кемделер өгөтләргә, мәктәп хуплап ебәрергә, һалпы яғына һалам ҡыҫтырырға кәрәкме? Ата-әсәләр менән эш нисек алып барыла?**

**Гөлнара Хажиева:** Беҙҙең гимназияла элек-электән башланғыс кластарҙа башҡортса ғына уҡытыла ине. Шуның өсөн беҙгә башҡорт телен белмәгән атай-әсәйҙәр, уҡыусылар килмәй. Балаларҙы уҡыуға ҡабул иткәндә шартлы рәүештә өс төркөмгә бүләбеҙ. Беренсеһе - башҡортса һәйбәт һөйләшә, аңлай һәм башҡортса уйлай, фекерләй. Икенсе төркөм - уйлай, аңлай, ләкин һөйләшмәй. Өсөнсө төркөм башҡортса һөйләшә белмәй, уйлауы ла насыраҡ. Шундай балалар менән ныҡыраҡ эшләйбеҙ, ләкин атай-әсәйҙәргә килгәндә, һәр ваҡыт иҫкәртеп ҡуябыҙ: беҙ башҡорт телен өйрәнмәйбеҙ, ә башҡортса уҡыйбыҙ, уҡытабыҙ. Шуның өсөн беҙҙең гимназияла атай-әсәйҙәр менән эш элекке кимәлдә ҡалды тип уйлайым, элегерәк ҡайһы бер атай-әсәйҙәр, нишләп һеҙ математиканы, башҡа фәндәрҙе балаларға русса уҡытмайһығыҙ, уларға ауыр бит, тип әйткән осраҡтар булды. Хәҙер инде улай тиеүселәр юҡ. Гимназия уставында башланғыс кластарҙы тулыһынса бөтә предметтарҙан да башҡортса ғына уҡытыу тураһында яҙылған.

**Наил Әминев:** 2017 йылда мине Өфөнөң 23-сө мәктәбенә директор итеп тәғәйенләнеләр. Июль айында эш башланым, августа атай-әсәйҙәр башҡорт теленә ҡаршы баш күтәрҙе. Шунда коллегаларымды, ата-әсәләрҙе йыйып, аңлатыу эштәре алып барҙыҡ, йәғни башҡорт телен яңы йүнәлештә уҡыйбыҙ, диктанттар яҙмайбыҙ, грамматикаға ныҡ иғтибар бирмәйбеҙ, беҙ балаларҙы иң элек башҡорт телендә һөйләшергә өйрәтәбеҙ, тип, маҡсатты аңлатҡандан һуң, уларҙың 100 проценты ла, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытырға ризабыҙ, тип ғариза яҙҙы. Ике йыл директор булған осорҙа прокуратураһамы, башҡа хоҡуҡ органдарынамы ялыу яҙып йөрөгән атай-әсәйҙәр булманы.

Былтыр яңы 162-се полилингваль мәктәп асылғас, шул уҡ сәйәсәт, яңы методика ҡулланып, иң яҡшы уҡытыусылар менән ошо йүнәлеште дауам итеп, атай-әсәйҙәргә матур итеп аңлатыу эштәре алып барҙыҡ һәм икенсе йыл инде 1-11-се кластарҙа 801 бала аҙнаһына ике тапҡыр башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡый.Башҡорт телен туған тел булараҡ уҡыусылар күбеһенсә башҡорт балалары һәм теләге булған башҡа милләт балалары ла бар (былтыр 120 бала булһа, быйыл 150 самаһы бала).

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Беҙҙә Устав буйынса башланғыс синыфтарҙа уҡытыу башҡортса булырға тейеш тип билдәләнгән, ләкин беҙҙең социум, тирә-яҡта йәшәгән йәмғиәт, атай-әсәйҙәр, балалар бөтә предметтарҙы ла тотош башҡорт телендә уҡытыуға әҙер түгел. Шуға күрә башланғыс кластарҙа бер нисә предмет башҡорт телендә уҡытыла, мотлаҡ рәүештә туған тел булараҡ башҡорт теле, ә барлыҡ коммуникатив мәлдәр, үҙ-ара аралашыу, өҫтәмә саралар барыһы ла башҡорт телендә бара.

Гимназия проект буйынса 900 балаға иҫәпләнгән, ғәмәлдә 1179 бала уҡый. Улар араһынан башҡортса һөйләшеп, башҡортса уҡырға әҙер булып килгәндәр бик күп түгел. Ә инде башҡорт телен өйрәнергә теләп, ата-әсәһе, минең балам туған телемде белергә тейеш, тип етәкләп алып килгән балалар күп. Шуға күрә, беҙ шундай ысынбарлыҡ шарттарында адаптив ҡараш, адаптив ысулдар ҡулланып эшләйбеҙ. Бөтә предметтар буйынса ла башҡортса дәреслектәр юҡ. Методик баҫмалар, дәреслектәр әҙер булһа, ул ваҡытта инде милли мәғарифтың яңы бите асылыр тип уйлайым, сөнки беҙҙең кеүек урталыкта торған лицей-гимназиялар күп.

Мәктәптәрҙе территорияға беркетеү ҙә үҙ ролен уйнай, сөнки ул белем биреү ойошмаларының мөмкинлеген сикләй. Ҡанундың, балалар бушлай белем алырға тейеш, тигән пункты үтәлә, әммә һәр бала туған телендә белем алырға, үҙенең туған телен өйрәнергә хоҡуклы, тигән пунктҡа ҡарата ҡаршылыҡ килеп сыға. Мин был тураһа йыш һөйләйем, һәр бер трибунанан әйтергә тырышам, шул проблеманы хәл итергә кәрәк, сөнки башҡорт телен тәрән итеп өйрәнергә теләгән балалар күп, улар баш ҡаланың төрлө райондарында йәшәй. Мәҫәлән, беҙгә Һупайлынан, Октябрь проспектынан киләләр. Уларҙы беҙҙең ҡабул итмәҫкә хоҡуғыбыҙ юҡ, шуның өсөн милли мәктәптәрҙең территорияға беркетелеүе айырым райондарҙы түгел, ҡаланы бер территория итеп ҡуҙалларға тейеш, минеңсә.

**▸ Гөлназ Ғафир ҡыҙы, бер мәлдә генә асыҡлап китәйек: Ҡоролтайҙың бер ултырышында, Уставҡа үҙгәрештәр индермәйенсә, йәғни бер типтағы Уставҡа тап килтермәйенсә, уны раҫлатып, ғәмәлгә индереп булмай, тигәйнегеҙ. Ул проблема һаман торамы, әллә башҡорт гимназияһы булғас, Уставығыҙҙы башҡа төр мәктәптәрҙән айырмалы итеп эшләү мөмкинлеге бирелдеме?**

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Йылы елдәр иҫте тип әйтеп китеүем бушҡа түгел, башҡорт теленең көндәре аяҙая башланы, шуға күрә был проблема ла хәл ителеү өҫтөндә. Мәғариф министрлығының Милли мәғариф бүлеге эшсе төркөм булдырып, барлыҡ норматив документтарҙы тикшереүгә алды. Улар өйрәнелә һәм бөтә мәғариф учреждениеларына, милли гимназияларға һәм лицейҙарға туған телдә белем алыуға һәм телдәрҙе өйрәнеүҙә уҡыусыларҙың хоҡуҡын тәьмин итеүҙе булдырған устав эшләү өсөн тәҡдимдәр биреләсәк. Әле комплексы комиссия (унда йәмәғәтселек тә, ата-әсәләр комиссияһы ла, мәғариф идараҡы, Обрнадзор вәкилдәре лә бар) эш алып бара, милли белем усаҡтарының нормаив, матди базаһын, тын алышын, кадрҙар, контингент мәсьәләләрен, ниндәй проблемалары бар - төрлө яҡлап тикшерәләр, өйрәнәләр. Ниһайәт, беҙҙең хәлебеҙҙе һорашып, киләсәкте уңышлы итеп күреүгә маҡсат ҡуйып, кәңәшләшеп эшләйбеҙ, тип ҡыуанабыҙ.

ҙән, закон талаптарын үтәргә кәрәк, икенсенән, Федераль дәүләт белем биреү стандарттары бар. Улар быҡаса 9-сы класҡа тиклем генә булһа, быйыл 10-сы класҡа тиклем индерелде. Шул яҡтан ҡарағанда, беҙ ысынбарлыҡтан сығып, бер генә телдә түгел, бер нисә телдә уҡытыуға киләбеҙ.

Бөгөн республикала полилингваль мәктәптәр системаһы булдырыу ошо беҙҙең милли мәктәптәрҙең йүнәлешен ысынбарлыҡ талаптарынан сығып үҙгәртеү тип баһаларға мөмкин, сөнки, мәҫәлән, 158-се йәки 20-се гимназияла ҡайһы бер предметтар тик башҡорт телендә уҡытылһа ла, ниндәйҙер предметтар рус телендә алып барыла. Әгәр ҙә билингваль уҡытыу булһа, ул предмет ике телдә уҡытыла ала. Быға ҡабул ителгән стандарттар ҙа рөхсәт итә, улар буйынса, белем биреүҙең баҫҡыстарына ҡарап, башланғыс кластарҙа һәр бер предметтың йөкмәткеһендә 80 процент федераль компонент булһа (хатта ул рус теле, математика, тәбиғәтте өйрәнеүме, физкультура булһынмы), ҡалған 20 проценты мәктәп компонентын күҙ уңында тота. Ана шул мәктәп компоненты тигәндә, республиканың тел, милләт үҙенсәлектәре, ерле материал ҡулланылырға тейеш. Әгәр уҡытыусы дәрестең дүрттән бер өлөшөн генә булһа ла башҡорт телендә алып

**▸ Хәҙер беҙҙә лә полилингваль мәктәптәр барлыҡҡа килде, улар милли мәктәп йәки гимназиянан нимәһе менән айырыла? Саҡ ҡына асыҡлыҡ та индереп китәйек...**

**Розалия Сафиуллина:** Бөгөнгө милли мәктәп ниндәй ул? Ваҡытында милли мәктәптәргә күбеһенсә тик бер телдә генә уҡытылды. Үҙебеҙ уҡып сыҡҡан милли мәктәптәрҙә рус теленән башҡа бөтөн предметтар ҙа башҡортса уҡытылды, тиһәң дә була. Бөгөнгө шарттарҙа белем биреүҙе тулыһынса тик туған телдә генә алып барыу Рәсәй мәғарифы өлкәһендәге талаптарға яуап бирмәҫкә мөмкин, сөнки законға ярашлы уҡытыу Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле статусына эйә булған рус телендә ойошторолa һәм рус телендә дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы үткәрелә. Шул уҡ ваҡытта мәғариф һәм тел сәйәсәте өлкәһендәге закондар граждандарҙың телен иҫәпкә алып, туған телдә белем һәм тәрбиә алыу хоҡуғын бирә. Тимәк, ата-әсәләрҙең, уҡыусыларҙың фекерен асыҡлап, уларҙың теләген иҫәпкә алып, дөйөм белем биреү программаларын туған телдә, шул иҫәптән башҡорт телендә алып барырға мөмкин. Мәктәп етәкселеге барлыҡ фекерҙәрҙе иҫәпкә алып, алтын урталыҡты табырға тырыша. Сөнки, бер-бара алһа, бик яҡшы. Ләкин бында тағы ла бер яғы бар: уҡытыусылар дәреслек юҡ, униһы юҡ, быныһы юҡ, тип, рус теленә күсеп китәләр йәки тәржемә ителгән дәреслектәр көтөп ултыралар. Дәреслек әҙерләү тиҙ башҡарыла торған эш түгел, уның үҙенең нормативтары бар. Әммә шуны әйтер инем: беҙҙең уҡытыусылар, бигерәк тә башҡорт мәктәптәрендә эшләгән уҡытыусылар - милләте буйынса башҡорт. Уларҙың күбеһе милли мәктәптәрҙе тамамлаған, телде белә. Шул уҡ ваҡытта бөтә өлкәләр буйынса ла терминологик һүҙлектәрҙе күп сығарабыҙ, улар баҫма форматта ла, электрон форматта ла бар. Уҡытыусыға методик яҡтан ниндәйҙер кимәлдә ярҙам күрһәтелә. Тимәк, ул, үҙенең теләге булғанда, ниндәйҙер бирелмәләрҙе, күнегеүҙәрҙе ерле компоненттарҙы иҫәпкә алып эшләргә тейеш. Урындағы етәкселәр, ата-әсәләр программала шуға иғтибар итеп, шуны талап итһәләр, эшләргә була. Ҡабатлап әйтәм: башланғыс кластарҙа төбәк компоненты - 20, урта кластарҙа (5-9-сы) - 30, юғары кластарҙа (10-11-се) 40 процент тәшкил итергә мөмкин.

Ә бына полилингваль мәктәптәргә килгәндә, уларҙа дәрестең ниндәйҙер өлөшөн генә алып барыу тураһында һүҙ бармай, беренсе этапта улар яҡшы итеп

✓ **Бында бөтә нәмә педагогтан тора. Педагог дәресен ни тиклем ҡыҙыҡ итеп алып бара - балаларҙы ул дәрескә, үҙенә ылыҡтыра. Бында көслө, белемле, методиканы яҡшы белгән, яңы һулыш менән эшләгән кеше кәрәк.**

# ТЕЛЕНЕҢ... НЫҒЫТАЙЫҠ!

телдәрҙә өйрәнергә тейеш, икенсе - полилингваль белем биреүгә күскәндә, бер нисә телдә уҡытыуҙы индерәләр, өсөнсө этапта - тулыһынса бер генә (мәҫәлән, инглиз) телдә уҡытыу ҡарала. Полилингваль мәктәптең милли мәктәптәрҙән айырмаһы шунда - унда уҡыусылар составы күп милләтле. 20-се гимназияны, 136-сы лицейҙы алһаҡ та, унда күбеһенсә башҡорттар. Ләкин 158-се гимназияны алһаҡ, унда тик башҡорттар ғына тип әйтеп булмай. Бына ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алырға тура килә һәм шунан сығып уҡыу-уҡытыу ойошторола.

**Һеҙҙең ҡарашҡа, "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" федераль закон милли мәктәптәрҙе ҡурсалаймы?**

**Розалия Сафиуллина:** Сентябрҙә БР Башлығы ҡатнашлығында Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара уҡытыусылар форумы үтте, уның йомғаҡтары буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙар, күбеһенсә яҡын арала - быйыл һәм киләһе йылдарҙа эшләй торған эш планы. Ҡарарҙарҙың бер пункты тап милли мәктәптәргә ҡағыла. 2019 йылдан "Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм туған телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" дәүләт программаһы тормошҡа ашырыла башланы. Уның бер пункты булып милли мәғарифты үҫтереү концепцияһын эшләү тора ине. Былтыр ул концепция эшләнде. Концепцияла милли мәктәптәр, туған телдә уҡытыу үҙенсәлектәре лә иҫәпкә алынды. Былтыр уҙған 1-се Бөтә Рәсәй башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары съезы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ла ошо һорауҙар күтәрелде. Улар даими рәүештә күтәрелә килә һәм дәүләт органдары был һорауҙарға системалы рәүештә иғтибар бирә. Һөҙөмтәлә бөгөн БДБҠ Башҡарма комитеты, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары менән берлектә милли мәктәптәрҙең проблемаларын билдәләп, уларҙың статусын асыҡлау буйынса РФ Дәүләт Думаһына закон проекты инициативаһы менән сығырға уйлайбыҙ. Мәҫәлән, 273-сө федераль закондың 14-се статьяһында Рәсәй Федерацияһында йәшәгән һәр бер гражданин үҙенең туған телендә белем ала ала, үҙенең туған телен өйрәнә ала һәм республикаларҙың дәүләт телен өйрәнә һәм был уларҙың ғаризаһы буйынса башҡарыла, тиелгән. Граждандарҙың ошо хоҡуғын тормошҡа ашырыу өсөн мәғариф системаһы мәктәптәр, кластар һәм төркөмдәр аса ала. Мәктәптәр аса ала, тигән юлдар милли мәктәптәр асыуға нигеҙ

булып тора. Ләкин артабан законда милли мәктәп нисек булырға тейешлеге күрһәтелмәгән. Уға ниндәй талаптар булырға тейеш, уны нисегерәк күҙ алдына килтерергә, ниндәй күләмдә булырға тейеш - ошолар барыһы ла законда билдәләнһә, асыҡланһа, Рәсәйҙә булған 22 милли республикаға һәм башҡа субъекттарға мәктәп асмаған хәлдә лә, кластар, төркөмдәр асыуға мөмкинлектәр, шул мөмкинлекте тормошҡа ашырырға шарттар булдырылыр ине. Быға инде телде белгән кадрҙар, дәреслектәр, программалар әҙерләү мәсьәләһе һәм мәктәптә булдырылырға тейешле шарттар: кабинеттар, финанстар һ.б. барыһы ла инә. Әле фекер алышыу бара, әгәр ҙә Башҡортостан Республикаһының инициативаһын башҡа

субъекттар күтәреп алһа, федераль законға үҙгәрештәр индерергә мөмкин булыр тип уйлайбыҙ. Әгәр ошо законға үҙгәрештәр индереп булһа, уға ярашлы бөтә норматив документтар ҙа үҙгәрәсәк.

**Уҡытыусылар съезы, уҡытыусылар Форумы үткәрелеүе, әлбиттә, уҡытыусыларға ҡанат ҡуйҙы, уларға иғтибарҙы арттырҙы, иңдәрен турайтып ебәрҙе, тиергә мөмкин. Унда республиканан һәм күрше өлкәләрҙән үҙҙәренең алдынғы методикалары, проекттары, ысулдары буйынса эшләгән иң яҡшы уҡытыусылар йыйылды. Беҙҙә, ысынлап та, алдынғы ҡарашлы уҡытыусылар бик күп, ә уларҙың ошо ысулдары, алымдары бөтә республика һәм башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәргә таратыламы? Ошо сараларҙың һөҙөмтәлелеген билдәләгән анализ эшләнәме?**

**Розалия Сафиуллина:** Әлбиттә, ниндәйҙер сара үткәрҙек тә таралыштыҡ түгел. Съезд, мәҫәлән, былтыр апрелдә үтте, һуңынан беҙ сентябргә тиклем 10 зона, күрше өлкәләр буйынса йөрөп, шундағы матур тәжрибәләр менән уртаҡлаштыҡ, ошондағы һөйләшеүҙе һәр берәһенә еткерергә тырыштыҡ, һәр бер уҡытыусыға барып еттек, тип әйтә алам. Быйыл үткән Форум буйынса ла шундай уҡ схема буйынса эшләйбеҙ - Яңы йылға тиклем онлайн-семинарҙар үткәрәбеҙ. Аралашыу һөҙөмтәлерәк булһын өсөн төбәктәргә

бүлгәнбеҙ, сөнки кеше күп булһа, аралашыу килеп сыҡмай, ә беҙгә аралашыу, уларҙың фекерҙәрен, тәҡдимдәрен белеү мөһим.

Статистикаға килгәндә, ундай мониторингты йыл да үткәрәбеҙ. Беҙҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте өс линия буйынса өйрәнелә. Беренсе линия - башҡорт мәктәптәре. Уларҙа, әлбиттә, сәғәттәр һаны күпкә күберәк, иғтибар етдиерәк, программалары ла айырылып тора. Икенсе линия - ниндәй генә мәктәптә уҡыһалар ҙа, туған телде предмет булараҡ өйрәнәләр. Бөгөн, ғаризаларға ярашлы, башҡорт теле туған тел булараҡ республиканың барлыҡ мәктәптәрендә лә өйрәнелә. Өсөнсө линия - башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү. Был система ниндәйҙер кимәлдә ҡатмарлыраҡ та, сөнки беҙ бөтә категория уҡыусыларҙы ла күҙ уңында тоторға, һәр уҡыусының хоҡуғын тормошҡа ашырырға тырышабыҙ. Әйтәйек, бөтә милли республикаларҙа йәки башҡа субъекттарҙа ундай шарттар бар тип әйтеп булмай. Күп субъекттар үҙенең теленә генә иғтибар итә, әммә был бит унда тик бер генә милләт йәшәй тигәнде аңлатмай. Әгәр ҙә уҡырға теләге булған балалар булһа, барыһының да теләге иҫәпкә алынырға тейеш. Бына Силәбе өлкәһендә башҡорт телен мәктәп системаһында дәрес булараҡ уҡытыуҙы булдырыу миҫалдары бар, әммә бөтә ерҙә лә ундай ҡараш юҡ. Һарытауҙа, мәҫәлән, туған телде дәрестән һуң факультатив булараҡ ҡына уҡыйҙар, әммә үҙҙәренсә тырышалар.

Әйтергә кәрәк, Башҡортостан Республикаһы башҡорттар йәшәгән төбәктәргә ярҙам итергә тырыша. Мәғариф һәм фән министрлығы, мәҫәлән, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса яңы федераль исемлектәге дәреслектәр менән тәьмин итә, башҡорт теле уҡытыусыларына курстар үткәрә, семинарҙар һәм осрашыуҙар ойоштора. Бөгөнгө көндә Силәбе һәм Ҡурған, Ырымбур өлкәләре башҡорт теле уҡытыусыларының ассоциациялары бар, улар республиканың алдынғы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары менән даими аралаша, тәжрибә уртаҡлаша.

**Гөлнара Хажиева:** Беҙ бына БР Мәғарифты үҫтереү институты менән тәжрибә майҙансығы астыҡ һәм унда Башҡортостандағы барлыҡ алдынғы уҡытыусылар (тьюторҙар) йыйылышып, тәжрибә уртаҡлашыу ойошторҙоҡ. Мин, мәҫәлән, уларға асыҡ дәрес күрһәттем. Улар үҙҙәренең ниндәйҙер тәжрибәһен беҙҙең балалар менән ҡулланып ҡараны. Әле каникул алдынан, моғайын да, республикала беренсе тапҡырҙыр, "Тирә-яҡ мөхит", "Математика", "Әлифба" дәрестәрен нисек итеп башҡортса ғына уҡытыуыбыҙҙы онлайн-асыҡ дәрестәрҙә күрһәттек. Онлайн форматты ҡулланып, яңы алым, яңы формат ярҙамында дәрес күрһәтеү мөмкинлеге булыуы ла яҡшы.

**Ноябрҙә Сколково Мәскәү идара итеү идаралығы менән берлектә үткәрелгән Башҡортостандың полилингваль мәктәптәренең үҫеш йүнәлешен билдәләү буйынса стратегик сессияла уның етәксеһе Андрей Шаронов, балалар башҡорт телен өйрәнһен өсөн уларҙы ҡыҙыҡһындырырға кәрәк, мәҫәлән, башҡорт телен белгәндә 150 төрки телендә һөйләшергә һәм аңлашырға мөмкин, тигән миҫал килтерҙе. Әммә бөгөнгө күҙлектән ҡарағанда бының менән генә балаларҙы ҡыҙыҡһындырып булмай, уларҙың ҡыҙыҡһыныуы төрлө. Шундай киң ҡырлы булған тормошта нисек итеп баланың ҡыҙыҡһыныуын табырға? Беҙ тәҡдим иткән нәмәләр, улар күбеһенсә беҙҙең ҡараштан, беҙҙең быуын күҙлегенән, дөрөҫөн әйткәндә, уҙған быуат балалар күҙлегенән эшләнгән. Үҙебеҙ теләгәнде, балаларҙың теләген дә иҫәпкә алып, нисек артыҡ баҫым яһамай ғына һеңдерергә?**

**Наил Әминев:** Беренсенән, мәктәптә эшләгәс, кадрҙар барыһын да хәл итә, тип әйтергә лә була. Тәү сиратта, бында бөтә нәмә педагогтан тора. Педагог дәресен ни тиклем ҡыҙыҡ итеп алып бара - балаларҙы ул дәрескә, үҙенә ылыҡтыра. Көнө-төнө инша-диктанттар яҙып, башҡорт телен өйрәнһәләр, әлбиттә, был осраҡта балаларҙа ла, ата-әсәләрҙә лә, нимәгә миңә башҡорт теле, тигән һорау тыуыуы мөмкин. Шуға күрә, бында көслө, белемле, методиканы яҡшы белгән, яңы һулыш менән эшләгән кеше кәрәк. Ул эш биреп кенә ултыртып ҡуйырға түгел, күберәген балалар менән аралашырға тейеш. Бөгөн беҙҙең бурыс - балаларҙы башҡорт теленә телмәр аша өйрәтеү. Был шулай уҡ башҡа туған телдәргә лә, сит телдәргә лә ҡағыла. Бала дәрестә матур итеп һөйләшергә өйрәнергә тейеш. Мин уҡытыусыларыма һәр саҡ әйтәм: башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытаһығыҙ, бергә ултырып һөйләшә-һөйләшә сәй эсәһегеҙме, уйнайһығыҙмы - башҡорт теле дәресе матур үтергә, бала унда ҡыуанып, теләп, дәресте һағынып барырға тейеш.

Беҙҙә, мәҫәлән, Мөнир Ҡарабаев уҡыта, ул башланғыс класс уҡыусылары өсөн дәреслек авторы ла. Стәрлетамаҡтан Гүзәл Фазылованы саҡырып алдыҡ. Улар балалар менән аралашып, дәрестәрҙе уйын формаһында ойоштора. Мөнир Иҙел улы матур итеп гитарала уйнай, матур итеп йырлай, шуға балалар менән гитарала башҡорт көйҙәрен уйнап, башҡорт йырҙарын йырлап, башҡорт телен туған тел булараҡ алып бара. Гүзәл Раил ҡыҙы башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыта. Дәрестәрен яңы, матур формаларҙа үткәрәләр. Шуға күрә, мәктәптә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыусыларҙың 100 проценты ла уҡый икән, бында күп нәмә уҡытыусынан тора. Әйткәндәй, башҡа мәктәптәрҙә башҡорт теле дәүләт теле булараҡ 2-се кластан уҡытылһа, беҙҙә 1-се кластан уҡыйҙар. 10-11-се кластарҙа ла башҡорт теле дәресе бар.



**Гөлназ Әхмәҙиева:** Эйе, был йүнәлештә ниндәйҙер аҙымдар эшләнә, сөнки мәғлүмәт мөхите киңәйгәс, үҙгәргәс, баланың ҡабул итеү каналдары тап шул йүнәлештә тормошҡа ашырылырға тейеш. Туған тел дәрестәрендә башҡортса видеолар, башҡортса уйындар ҡулланыу кәрәк, сөнки бөгөн баланың аңын, йәшәүен, тәүлеген интернет уйындар биләп алды. Тимәк, проблеманы шул уйындар аша хәл итергә кәрәк. Халҡыбыҙҙың менталитетынан сығып ҡарағанда, әлбиттә, ул уйындар гуманлы, кешелекле, мәрхәмәтле булырға тейеш. Былар барыһы ла ижади ҡарашлы уҡытыусыларҙан, ғалимдарҙан, программистарҙан, актив шәхестәрҙән тора. Беҙҙең гимназия уҡытыусылары һәр береһе алтынға бәрәбәр, сөнки нимәлер етмәгән ваҡытта улар үҙҙәре булдыра, тулмағанды тулыландыра. Мәҫәлән, башҡорт теле уҡытыусыһы Фәйрүзә Үтәбаева үҙ предметы буйынса ике йыл рәттән республика уҡытыусылары өсөн оҫталыҡ дәресе үткәрҙе. Тағы бер уҡытыусыбыҙ Айгөл Игелекова урта класс балалары менән эшләгәс, интерактив уйындар уйлап сығарҙы. Шунда уҡ ул цифрлаштырыуҙы ла ҡушып ебәрҙе. Ләйсән Мәмбәтҡолова тигән уҡытыусыбыҙ фәннилек, сығанаҡтарҙы өйрәнеү йүнәлешендә эшләй. Уның бүлмәһендә һүҙлектәр туп-тулы, балаларҙы тикшереү эшенә - телдең нигеҙенә, легендалар, эпостарға, үҙенсәлектәрен, әҫәрҙәрҙе анализлауға ылыҡтыра. Фәриҙә Миһранова балаларға телде лингвомәҙәни аспект аша өйрәтә, практик ҡараш менән эш итә, сөнки хәҙерге тормошта телдең практик ҡулланылышы бик мөһим.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✓ *Башҡорт теленең ғаиләлә лә статусы булырға тейеш. Минең әсәйем дә, мин дә ҡала башҡорттары. Әсәйем телде белмәһә лә, улым башҡортса белһен, тип, мине башҡортса өйрәтте, минең менән һөйләшеп, үҙе лә башҡортса өйрәнде.*



# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ...

## ғаилә теле статусын да нығытайыҡ!

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Хәҙерге заман шундай ҡыҙыҡ, мөмкинлектәр киң, бары тик теләк һәм ижади ҡараш ҡына булһын. Баланы тәрбиәләү, уҡытыу өсөн бары тик шарттар ғына кәрәк. Ул шарттарҙы Федераль дәүләт мәғариф стандарттары сиктәрендә лә рәхәтләнеп тормошҡа ашырырға мөмкин. Ә телде (ниндәй генә тел булмаһын) белеү өсөн төп шарт - ул мөхит. Мөхит булғанда балаға телдәрҙе өйрәнеү еңел бирелә. Икенсе шарт - мотив (дәртләндереү). Рекламаны сауҙаны хәрәкәткә килтереүсе көс тиһәләр, мин дәртләндереүҙе телдәрҙе уҡыу һәм өйрәнеүҙең хәрәкәткә килтереүсе көсө, тиер инем. Дәрте булмаһа, бала телде лә өйрәнмәй, уҡымай ҙа, үҫешмәй ҙә. Был бурыс атаәсәнән тора. Баланың, ниндәй генә милләттән булыуына ҡарамаҫтан, күңеленә дәрт һалынған икән, ул ниндәй генә мәктәптә булһа ла телде өйрәнә. Шуның өсөн йәмғиәттең дөрөҫ ҡарашы кәрәк. Республикала шарттар бар, улар йылдан-йыл тулылана, киңәйә бара. Телебеҙҙең һүнеп барған торошо хәҙер яңы амплитуда менән яңы бейеклеккә күтәрелә башлана. Башҡорт телен үҫтереү өсөн нимә генә уйлап сығармайҙар, балаларға бәләкәйҙән мотив һалалар. "Балалар" тигән проект, йәнһүрәттәр, анимациялар... Уларҙың авторҙары - 90-сы йылдарҙа асылған гимназияларҙың сығарылыш уҡыусылары. Шул гимназияларҙың, уларҙағы белем биреү һәм тәрбиә өлгөһөнөң емештәрен тирәбеҙ бөгөн. Ә бөгөн эшләгән яңы йүнәлешле милли гимназия-лицей-мәктәптәрҙең һөҙөмтәһе 15-20 йылдан күренә башлаясаҡ.

**Гөлнара Хажиева:** Балаларҙың үҙҙәрен дә ошо уҡ процесҡа йәлеп итергә кәрәк. Мәҫәлән, йәнһүрәттәр эшләүгә. Бер бала йәнһүрәт эшләй, тауышын да үҙе яҙҙыра икән, быны уның иптәштәре лә күрә һәм уларҙың да ошондай ижадҡа теләге тыуа. Мәғлүмәт технологиялары, программалау кеүек ҡыҙыҡлы форматтар бик күп. Һәр уҡытыусы кемдәндер нимәлер көтөп ятырға тейеш түгел. Бына дәреслектәр, ниндәйҙер ҡулланма материалдар етешмәй, тибеҙ. Ошо йүнәлештә уҡытыусылар ҙа күберәк эшләһен ине, тигән теләктә ҡалам, сөнки 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы уҡытыусылары исеменән ғорурланып әйтә алам, башҡорт теле һәм әҙәби уҡыу китаптары беҙҙең гимназия нигеҙендә сыҡты, педагогия фәндәре кандидаттары Фәниә Сынбулатова, Әлфиә Мәүлийәрова, Мәрхәбә Дәүләтшина кеүек авторҙар китаптарына йүгерешеп йөрөп апробация эшләгән практик-уҡытыусылар беҙ булдыҡ. Беҙ, дүрт уҡытыусы, телмәр үҫтереү программаһын үҙебеҙ яҙҙыҡ. Шулай уҡ математиканан да үҙебеҙ яҙған программа бар. Ата-әсәләр, әлбиттә, аптырай, нишләп һеҙ, мәҫәлән, Петерсондың китабын алдыртып эшләмәйһегеҙ, нишләп һәр бер эште ксерокс аша сығарып таратаһығыҙ, тиҙәр. Ә беҙ тап үҙебеҙҙең программаға ярашлы, телде ата-әсәйҙәр ярҙамында эҙмә-эҙлекле өйрәнергә була тип эшләйбеҙ.

**Розалия Сафиуллина:** Ҡыҙыҡһындырыуға килгәндә, әлбиттә, интернет мөмкинлектәрен дә файҙаланырға кәрәк, беҙ бик күп конкурстар, интернет-викториналар үткәрәбеҙ. Мәҫәлән, Башҡорт теле көнөнә ҡарата интернетта балаларҙың башҡортса яҙышыуын популярлаштырыу өсөн "Башҡорт интернет блогы" тигән яңы конкурс үткәрәбеҙ. Сөнки улар Бәйләнештә селтәрендә лә, Фейсбукта ла, инстаграмда ла күп ултыра һәм башҡорт теленә иғтибар биреп, шунда телде, үҙебеҙҙең тыуған ерҙе популярлаштырыуға, исмаһам, үҙҙәре күргәндәр тураһында фотолар ҡуйып, башҡортса үҙҙәренең фекерҙәрен яҙалар икән, бер ҙә насар түгел.

▶ **Башҡорт телен ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә нисек итеп пропагандалау, нисек итеп уның өҫтөнлөклө яҡтарын күрһәтеү тураһында һөйләйбеҙ, шул йүнәлештә эштәр алып барыла, әммә мәктәптән һуң был эштәр туҡталып ҡалған кеүек. Хәҙер ыңғай күренештәр күренә башланы: республика Башлығы ла башҡортса һөйләй, унан күреп, башҡалар ҙа эйәрә, әммә артыҡ энтузиазм тойолмай. Хәтта райондарҙа башҡорт ауылдарына барған район хакимиәте вәкилдәре лә халыҡтың әйткәнен ҡолағына ла элмәйенсә, русса ғына аралаша. Мәктәптә балаларға башҡорт теленең әһәмиәте тураһында күпме генә тылҡыһаҡ та, улар бит ысынбарлыҡтағы ошо күренештәрҙе лә күреп, һеңдереп, үҙенсә һығымта яһап йөрөй...**

**Наил Әминев:** Әлеге ваҡытта республикала өс полилингваль мәктәп эшләп килә, икеһе Өфөлә, береһе - Стәрлетамаҡта. Республика етәкселегенең ҡуҙғалауы буйынса, улар башҡорт телен һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү буйынса төп үҙәктәр булырға тейеш һәм ундағы бөтә саралар, иғландар башҡорт-рус-инглиз теле аша башҡарыла. Туған телде, беҙҙең осраҡта башҡорт телен белеү - ул нигеҙ, сит телдәрҙе белеү - ул беҙгә ҡанат ҡуя. Йәғни үҙ телебеҙҙе белеп, тағы сит телдәрҙе лә өйрәнһәк, беҙ үҙебеҙҙең телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, тарихыбыҙҙы һ.б. киң донъяға алып сығабыҙ. Шул ваҡытта 15-20 йылдан әле һеҙ әйткән проблема ла юғаласаҡ, сөнки йылдан-йыл полилингваль мәктәптәр һаны артасаҡ, тимәк, мәктәп тамамлағанда уҡ күп телдәргә эйә шәхестәр сығасаҡ.

**Розалия Сафиуллина:** Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән 35 йылға яҡын төбәк-ара олимпиада үткәрелеп килә. Беҙ уны былтырғы уҡыу йылынан Рәсәй Мәғариф министрлығы саралары исемлегенә индереүгә өлгәштек. Был ҙур аҙым булды. Беренсенән, олимпиаданың статусы күтәрелде, икенсенән, махсус талаптарға яуап биргәс, олимпиада еңеүселәренә һәм призерҙарына Башҡортостандың барлыҡ вуздарына, хатта техник вуздарға ингәндә лә өҫтәмә мәрәйҙәр ҡуйыу мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Был хаҡта БР Башлығы уҡытыусылар съезында ла әйткәйне. Ҡайһы бер юғары уҡыу йорттары ректорҙары уның тәҡдимен хуплап, хатта 10 балға тиклем өҫтәмә балл ҡуйҙы. Һөҙөмтәлә шунда уҡ олимпиадала ҡатнашырға теләүселәр һаны һәм сифат артты.

Бөгөн тел буйынса белемде имтихандар биреп билдәләйҙәр. БДУ, БДПУ-ла рус теленән һәм сит телдәр буйынса тестлау үҙәге бар. Хатта 2014 йылдан алып татар теленән халыҡ-ара сертификация үҙәге бар. Ә беҙ Рәсәйҙә һан буйынса дүртенсе урында торабыҙ, тимәк, телебеҙ ҙә донъяуи кимәлдә булырға тейеш. Әле кәңәшләшеү йәһәтенән саралар үткәрҙек, белгестәр менән фекер алыштыҡ, билдәле аҙымдар эшләнә. Һәм һәр кем үҙенең телде ниндәй кимәлдә белгәнен аңларға, шуның өсөн имтихан-сертификация үтергә, уның һөҙөмтәһе буйынса ҡулына ниндәйҙер таныҡлыҡ та алырға, ул таныҡлыҡ артабан ҡайҙалыр таныларға ла тейеш. Мәҫәлән, министр булып эшләргә теләйһең икән - ҡулыңдағы телде белеү кимәлен тураһында таныҡлыҡтың барлығын да аңлатып тора, йәки республиканың дәүләт органында эшләргә теләйһең икән, тимәк, дәүләт телдәрен һ.б. яҡшы белергә бурыслылыһың кеүек килеп сыға инде. Ғөмүмән әйткәндә, был эш алып барыла тип уйлайым. Иғтибар итегеҙ: республика Башлығы сайты, башҡа рәсми сайттар ике телдә алып барыла. Һуңғы ваҡытта барлыҡ министрлыҡтарҙың сайттары ике телдә булмаған хәлдә лә, яңылыҡтар таҫмаһында башҡортса мәғлүмәттәр ҙа күренә башланы. Кәңәшмәләрҙә, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ултырыштарында, оперативкаларҙа башҡортса сығыштар яңғырай. Дәүләт органдарында тағы бер яңылыҡ: башҡорт теле буйынса курстар ойошторола башланы. Былтыр Мәғариф министрлығы хеҙмәткәрҙәренә башҡорт теленән курстар үткәрҙек.

▶ **Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы 2022-2032 йылдарҙы Ерле халыҡтар телдәре ун йыллығы тип иғлан итте, шуға, Башҡорт теле йылы иғлан ителеүен репетиция тип кенә ҡараһаҡ, ошо ун йыллыҡты үҙ файҙабыҙҙа ҡулланып, тағы ниндәй пландарҙы, идеяларҙы тормошҡа ашыра алабыҙ? Тағы нимәләр эшләргә мөмкин?**

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Ун йыллыҡҡа план төҙөүҙе шул тиклем ҡыйын, сөнки тормош үҙенең үҙгәрештәрен индерә. Быны быйыл Башҡорт теле йылында берәү ҙә барлыҡ сараларҙы онлайн үткәребеҙ тип уйламағайны. Ысынлап та, боҙ ҡуҙғалды, ҡуҙғалған боҙ - ул бик ҙур көс, шуны ҡулланып, эш барышында килеп тыуған идея-фекерҙәр менән тулыландырып, бер аҙ төҙәтеүҙәр индереп, алға барырға, башланған эштәргә өҫтәлмәләр индереп, артабан дауам итергә кәрәк, тип уйлайым.

**Розалия Сафиуллина:** Эшебеҙҙең стратегик йүнәлеше бар. 2030 йылға тиклем Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы эшләнде. Беҙ уны туған телдәрҙе һәм дәүләт телдәрен уҡытыу концепцияһы тип алдыҡ, сөнки Рәсәй буйынса был концепция шулай атала. Рус теле, башҡа предметтар буйынса бындай бар ине, әммә туған телдәр буйынса Рәсәй кимәлендә юҡ ине. Хәҙер бөтә система шул концепцияға ярашлы эш алып бара.

Әйтергә кәрәк, республикала ғына түгел, Рәсәй кимәлендә лә туған телдәргә иғтибар артты. 2019 йылда Туған телдәрҙе үҫтереү буйынса федераль фонд булдырылды. Уның төп эшмәкәрлеге - дәреслектәр менән тәьмин итеү. Был мәсьәлә беҙҙең республика буйынса ла еңел түгел, ә Рәсәй буйынса ҡараниһәң, 90-ға яҡын туған тел өйрәнелә, ләкин уларҙың барыһының да методик яҡтан эшләнелеше һәйбәт тип әйтеп булмай. Рәсәй буйынса туған телдәрҙең үҫеше төрлө кимәлдә. Шуға хәҙер ошо федераль фонд дәреслектәр эшләү өсөн миллион һумдар тотона. Законға ярашлы, дәреслектәргә экспертизаны ла РФ Мәғариф министрлығы үҙе түләп үҙе үткәртә, элек субъекттар үҙҙәре түләй һәм мөмкинлек булмағанлыҡтан, тиҙ генә федераль исемлеккә инеү ҙә тотҡарлана ине.

Икенсе аҙым, былтырҙан Рәсәйҙә РФ халыҡтарының туған телдәрен үҫтереү институты тигән структура барлыҡҡа килде. Быға тиклем туған телдәр менән махсус шөғөлләнгән подразделение юҡ ине. Хәҙер ул эшләй, уларҙың ябай хеҙмәткәрҙәре, әйҙәүсе белгестәре - фән докторҙары. Улар субъекттарҙан вәкилдәрҙе даими йыйлар, семинарҙар, конференциялар үткәрәләр, етәкселәрҙе саҡыралар йәғни беҙгә проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшергә, хәл итергә майҙан бирәләр.

▶ **Бөгөнгө һөйләшеүҙе йомғаҡлап, башҡорт теленә мөнәсәбәт, башҡорт телендә уҡытыуға ҡараш, уның үҫешенә, ҡулланылышы буйынса дөйөмләштереп нимә тип әйтә алаһығыҙ?**

**Розалия Сафиуллина:** 1999 йылда "БР халыҡтары телдәре тураһында" закон ҡабул ителгәндән һуң, вуз тамамлап, эшләй башланым. Төрлө этаптарҙы күрҙем. Беҙ мәктәпкә килгән ваҡытта хатта элементар программа дәреслектәр ҙә юҡ ине. Ә бөгөн беҙҙә закондар бар, программалар бар, дәреслектәр бар, кадрҙарыбыҙ бар, мәктәптәребеҙ бар! Башҡорт теле бөтөп бара, башҡортса һөйләшеүселәр кәмей, юғалыу ҡурҡынысы янай, тиһәләр ҙә, мин быны менән килешмәйем. Башҡорт теле ике башҡорттоң һөйләшеү теле булып ҡала икән, ул юғалмаясаҡ. Шуның өсөн уны үҫтерергә, балаларға өйрәтергә, күсәгилешлек булдырырға кәрәк. Нимә генә тиһәк тә, мәғариф системаһы ла үҙенең эшен эшләргә тейеш, әммә бөтә нәмә ғаиләнән башлана. Балалар русса һөйләшә тип, руссаға күсеп китергә түгел, ә киреһенсә, башҡортса һөйләшеүҙе төп ҡағиҙә итергә кәрәк. Балалар олатай-өләсәй янында ғына түгел, атай-әсәй янында ла башҡортса һөйләшергә кәрәклеген һеңдереп үҫһен. Башҡорт теленә тағы бер статус кәрәк - уның ғаилә теле статусы булған ваҡытта, тел һаҡланыр тип уйлайым.

**Гөлназ Әхмәҙиева:** Мин дә ҡушылам, сөнки әлеге көндә туған телде уҡытыу буйынса бөтә шарттар ҙа бар. Түбәндәрәк, муниципаль кимәлдә, мәҫәлән, норматив база ентекле эшләнергә тейеш. Шунан тағы ла аҫҡараҡ төшөп - гимназиялар, лицейҙар, мәктәптәр кимәлендә эште дөрөҫ ойоштороу зарур. Һәм ғаилә кимәленән ҡарағанда ла эш, тәрбиә дөрөҫ итеп ойошторолорға тейеш. Сөнки күптәр үҙендең донъялағы ниндәй алтын бөртөк икәнендә иҫбатлау өсөн тамырыңдан сыҡҡан телде, мәҙәниәтте белергә, тамырҙан сыҡҡан терәк кәрәк икәнен аңланы. Хәҙер инде һәр кемдең үҙенән тора. Тыуған иленә, туған теленә булған һөйөүҙе лозунг итеп ҡысҡырып йөрөп түгел, ә күңелендә йөрөтөп, шуның өсөн аҙымлап эшләргә тейешһең.

**Наил Әминев:** Беҙ Төньяҡ Осетияла семинарҙа булғанда унда "туған телде дәүләт бирергә тейеш", тигән һүҙҙәр яңғыраны, сөнки уларҙа ғаиләлә йә атаһы осетин телен белмәй, йә әсәһе. Беҙҙә лә шундай проблема бар, әммә беҙ ике йүнәлештә лә эшләргә: дәүләт биргән мөмкинлектәрҙе файҙаланып, телде ғаиләлә өйрәтергә тейешбеҙ. Йәғни Розалия Рәсих ҡыҙы әйткәнсә, башҡорт теленең ғаиләлә лә статусы булырға тейеш. Минең әсәйем дә, мин дә ҡала башҡорттары. Әсәйем телде белмәһә лә, улым башҡортса белһен, тип, мине башҡортса өйрәтте, минең менән һөйләшеп, үҙе лә башҡортса өйрәнде. Хәҙер минең ғаиләмдә ике йәшлек ҡыҙым үҫә, уның менән тик башҡортса ғына һөйләшәбеҙ. Ғаилә план-проекты төҙөнөк: өс йәшкә тиклем саф башҡорт телендә һөйләшәбеҙ, өс йәштән биш йәшкә тиклем - башҡорт теле аша инглиз телен өйрәнәбеҙ, биш йәштән уға рус телен үҙләштерер өсөн ни бары ике аҙна кәрәк була. Сөнки әле лә ул балалар майҙансығында балалар менән аралашҡанда уларҙың русса әйткәнен аңлап, беҙгә башҡортса тәржемә итә. Шуға күрә бала бәләкәй саҡта уҡ башҡорт телен ғаиләлә өйрәнһә, тел дә, милләт тә киләһе ун йылда ғына түгел, артабан да йәшәр. Шулай уҡ алдыңғы ҡараш менән өлгө булып торорға тейешбеҙ, сөнки беҙ - уҡытыусылар, киләсәк орлоғон сәсәбеҙ, киләсәкте төҙәйбеҙ, тип әйтер инем.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ ***Бөтөнләй таныш булмаған кеше һиңә "һылыу" тип өндәшә икән, ул шундуҡ һинең яҡынына әйләнә лә ҡуя. Башҡа бер генә һиңә төбәлгән өндәшеү һүҙе лә шундай тойғолар уятмайҙыр.***



Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, уны Ангелина менән күрештерҙеләр.

- Нишләп алданың, Ангелина? - тип һораны Сара.

- Алдаманым. Минең атай менән әсәй бик ҡаты булдылар. Шуға ла мин үҙем сабый алып, бик яҡшы итеп тәрбиәләргә тейеш инем. Минең бөтөн донъяға иң һәйбәт әсәй икәнемде күрһәткем килә. Балалар йортонан алып сығыу аңһат булды тиһеңме миңә! Барыбер юлымды ҡыйҙылар, сволочтар!

Сара ауыҙын асҡан килеш, уға ҡарап ҡатты.

- Ул бит кеше балаһы!

- Тоталар ҙа шулай тиҙәр! Алып сыға алғас, ул минеке!

Сара башын ике услап тотто. Ул Ангелинаның үҙ-үҙен тотошонан уҡ сирле икәнен һиҙемләргә тейеш ине. Нисек белмәгән-күрмәгән кешеһенә ярҙамға ташланды һуң ул? Шиктәр булды, әлбиттә... Тәү күрешкәндә эсе таҡыр икәнен дә күрҙе. Икенсе күрешкәндә ҡорһаҡлы булыуы аптыратты. Юҡ, эске мөхәрририен тыңламаны, сөнки үҙе лә баш мөхәррир тарафынан нахаҡҡа рәнйетелгәс, кемгәлер бик ярҙам иткеһе килде. Шуны эшләй алыуы күңелдә ҡәнәғәтлек тойғоһо тыуҙырҙы. Аңра һарыҡ!

Рауилдың вахтаһынан ҡайтып төшөүе бәйләнсек уйҙарынан ҡотҡарҙы. Ирҙе ҡаршы алыу, уның өйҙәге кәйефен булдырыу ҡатындың бурысы. Был бурысты Сара матур итеп еренә еткереп атҡара. Ирекәйе тормош көтөүгә әүәҫ, тик карьера яһайым тип серәнмәне. Унның ҡарауы, һәр саҡ үҙаллы фекер йөрөткән кеше булып ҡалды. Эйе-эйе, ире үҙлеген юғалтҡан, икенсе кешеләрҙең фекерен ҡеүәтләүсе, хуплаусы йән эйәһе булып йәшәмәне. Рауилдың Себер йөрөп эшләүенә лә Сараның ҡаты сирләп китеүе сәбәп булды. Шундай ирҙе нисек яратмайһың да, нисек хөрмәт итмәйһең? Әлбиттә, һүҙгә килешкән, үпкәләгән мәлдәр ҙә була, ғаиләлә унһыҙ булмай. Былдай ыҙғыш күберәк Иректе ҡалайыраҡ тәрбиәләүгә бәйле булды шикелле. Берҙән-бер бала булғас, Сара нығыраҡ иркәләне.

Атай кеше ҡатыраҡ тоторға тырышты, ир тәрбиәһен ул шулай аңлай. Һәр хәлдә, Ирек иғтибарҙан мәхрүм булманы, тик балаҡайҙы үҙаллы тип әйтеп булмай. Бәлки, ата кешенең йыш өйҙә була алмауы, ҡырҙа эшләүе йоғонто яһағандыр. Хәйер, ниәһенә зарланырға, Ирек үҙ теләге менән Силәбегә китте. Йәйләп тормош көтөргә өйрәнер. Шулай ҙа "Лада" машинаһын төкөттөргәнен Рауилдың белмәүе хәйерле. Белмәгәндең беләге тыныс. Иҫке машина инде ремонтланды, элеккенән дә зәһәрерәк ялтырап ултыра.

Рауил Сараның ниндәй мажараға тарыуын телефон аша һөйләшкәндә тыңлағайны инде. Ҡайтып төшкәс, ентекләп һорашырға тотонды. Башын берсә ҡағып, берсә сайҡап, ҡатынын тыңланы.




- Балаһы урланған әсә нимә генә кисермәгәндер. Урамдағы теләһә кемдең һүҙенә ышанған һине лә аңламайым, - ауыҙынан сыҡҡан тәүге һүҙе ошо булды.

Үҙен йәлләр, йыуатыр тип көткән Сара быны ишеткәс, ҡыҙғанын һиҙмәй ҙә ҡалды:

- Ҡапыл эштән китеп, япа-яңғыҙ тороп ҡалыуы рәхәт булды тиһеңме миңә? Мин дүрт стена эсендә бикләнеп ултырырға тейеш инемме ни? Бәлки, хаталанмаҫ өсөн берәү менән дә ҡатнашмаҫҡалыр, ә? Әгәр ҙә телевизор эшләп ултырған булһа, йә ноутбук боҙолмаған булһа, мин дә яңылыҡтарҙы белеп ултырған булыр инем. Бала табыу йортондағы хәлде берәйһе әйткән булһа, исмаһам!

- Әйҙә, - тине ире. - Киттек телевизор алырға.

- Юҡ, миңә ноутбук кәрәк...

Бер нисә көндән Сараға Илдар ағаһы шылтыратты. Илдар өлкән улына өй һалдырыу менән мәшғүл. Улар ҙа ҡул оҫтаһы Рауилдың ҡайтҡанын көтөп кенә торалар.

- Сара, өйҙөң ҡыйығын ябырға кәрәк. Кейәүһеҙ быны эшләп булмай.

Ағайҙың үтенесен нисек кире ҡағаһың инде, ярамай, унның ярҙамы арҡаһында Луиза бәләһенән еңел ҡотолдо, шуға күрә Сара иренә йәһәтерәк йыйынырға ҡушты.

"Эштең тейешле күләмен атҡарҙыҡ та, әле ҡайнаға менән йылға буйында ял итәбеҙ", - тип яуап бирҙе Рауил бисәһенең аҙаҡҡы шылтыратыуына. Сараға "Ял итәбеҙ", тиеүе һис кенә лә оҡшаманы. Ағаһының тағы бер шөғөлө бар, һунар итергә ярата. Саҡ ҡына буш ваҡыты булдымы, ҡырға сығып китә. Сара ағаһынан айырмалы рәүештә, һунар итеүҙе күрә алмай. Тәбиғәттә ҡош-ҡорт, йәнлек үҙ иркендә йөрөргә тейеш, уларҙың йәндәрен ҡыйыу гонаһ, ти ул. Бигерәк тә Илдарҙың Рауил кейәүен үҙе менән һунарға йөрөтөүе оҡшамай. Сара асыуланғас, бер талай Рауилһыҙ ғына йөрөнө. Хәйер, судьяның дуҫтары былай ҙа етерлек. Әле бит бына тағын кейәүен эйәрткән... Һунарсылыҡ ҡомары ағаһында ҡайҙан киләлер, быны аңлатыуы ҡыйын. Әллә байҙарҙың кәсебе шул инде? Һәр хәлдә, һунар тиһәләр, унда ытырғаныу хисенән тыш бер нәмә лә юҡ. Ауыр хәтирәләр уята был һүҙ.

Сара күп бала-сағалы булыу тураһында хыял йөрөтә торғайны, әммә көтмәгәндә-уйламағанда бөтәһе лә селпәрәмә килде. Ул икенсе балаға буйға уҙғас, шундай ҡанатланып-осоп йөрөгәйне. Һәр әсәгә хас, күңел яҡты уйхыялдар менән тулы. Йөклө сағында бер ниндәй ҙә сир тоймаіны бит ул, ә сабый үле тыуҙы. Ире һунарға киткән мәлгә тура килде был бәхетһеҙлек. Эйе, үҙенең ҡазаға юлығыуын Сара Рауилдың һунарға китеүе менән бәйләй. Бала табырға етешкән көндәренең береһендә Рауил ашығып ҡайтып инде лә, шкафтан рюкзакты сығарып, нәмәләрен барлай башланы:

- Илдар ҡайнаға һунарға саҡыра.

Тере йәнде донъяға килтерергә әҙерләнгән Сара был һүҙҙәрҙе ишетеү менән ытырғанып китте.

- Йөрөмә, - тине. - Һунар мәле түгел.

Ысынлап та, һунар тыйылған осор ине. Ләкин ағаһының һәм унның дуҫтарының - үҙ законы.

- Ҡайнаға эргәһендә иптәш кәрәк, - тине Рауил ҡәтғи тауыш менән. - Бер-бер хәл булһа, шунан аҙаҡ ғүмер буйы үкенеп йәшәйекме? Ул мине алырға тип, машинаһы менән етеп килә.

Сараның кәйефе төштө, шулай ҙа иренә ҡаршы өндәшмәне, бары тик бер йәнлеккә лә мылтыҡ тоҫҡамаҫҡа һүҙ алды. Ағай һәм кейәү дәртләнеп, шау-гөр килеп, күңелле хәбәр һөйләшеп, көлөшә-көлөшә һунарға сығып киттеләр. Ул көлөү әле лә ҡолаҡ төбөндә ишетелгәндәй. Тап шул төндө Сара эсе ауыртыуҙан ыңғырашып уянды. "Ашығыс ярҙам" саҡырттылар, тиҙ генә хастаханаға алып барып еткерҙеләр. Хәле ауырлашҡан Сараға операция яһанылар. Сабый үле тыуҙы. Һунарҙа йөрөгән ире былар тураһында бер нәмә лә белмәне, сөнки урманда телефон тотмай, уны эҙләүҙән фәтеүә юҡ ине.

Рауил шылтыратҡанда Сара наркоздан арынып бөтмәгәйне әле.

- Кәләш, беҙҙең һунар уңышлы булды! - тип ҡысҡырҙы ул шат тауыш менән. - Бер мышыны атып алдыҡ. Тик быуаҙ булып сыҡты, шуныһы үкенесле.

Сараның ҡулынан телефоны төшөп китте. Бер нисә сәғәттән "ah-yh" итеп эргәһенә килеп еткән иренә шелтәле ҡараш ташланы ла, күҙҙәрен йомдо. Хәле ауыр ине ҡатындың, ҡаны зарарланғаны асыҡланды, әллә шәбәйә, әллә юҡ, тигән һүҙҙәр ҙә булды. Артабан ҡатмарлы операциялар үткәрергә тура килде, ҡиммәтле дарыуҙар, ҡиммәтле дауаланыу талап ителде, иң үкенеслеһе, аналығын алдырҙы... Рауилға оҙон аҡса артынан Себергә юлланыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Һуңынан һунар тураһында бер ҡасан да һүҙ ҡуҙғатҡандары булманы. Ләкин ул Сараның күңелендә яҙылмаған бер төйөр булып ҡалды. "Ауға бармаһалар, быуаҙ мышыға ҡорал күтәрмәһәләр, минең балам да иҫән ҡалған булыр ине..." тигән уй тынғылыҡ бирмәне.

Йылға буйында, имеш. Илдар йортон эшләшергә түгел, ә ауға алып сығыр өсөн саҡырған булырға тейеш кейәүен. Күңелдә ошо шик тыуыу менән Сара: "Тиҙерәк ҡайт, өйҙә кәрәкһең",- тип Рауилға телефондан әллә нисә тапҡыр тылҡыны. Сюрприз алда булған икән, Илдар ағаһы үҙе шылтыратты.

- Сара, минең егеттәр, шәп эшләп, планды үтәнеләр. Хәҙер рәхмәт йөҙөнән мин уларҙы Питерға алып китәм. Кейәү өсөн ҡайғырма, үҙем ҡарап йөрөтөп алып ҡайтам. Былай ҙа киң донъяға сыҡҡаны юҡ, - тине бойорған тауыш менән. Рауил да: "Беҙ Питерға юлға сыҡтыҡ", - тип яуапланы.

Бер аҙна тигәндә саҡ әйләнеп ҡайттылар. Өйгә килеп инеү менән Рауил бисәһен ҡосағына алмаҡ булып, ҡулдарын һуҙҙы.

- Ундағы архитектура, һарайҙар! Иҫ китерлек! Эх, һине лә алып барырға кәрәк булған, Сара!

- Йәш саҡта тегендә-бында йөрөтә торғайның, хәҙер матур һүҙҙәр менән генә йыуаһың.

- Йә, улай тимә инде, кәләш! Алып барырмын! Йөрөтөрмөн!

- Мин япа-яңғыҙмын бит инде... Һинең арҡала икенсе балам үле тыуҙы!

- Сара, нишләп улай тиһең? Ни өсөн минең арҡала?

- Мине "Тиҙ ярҙам" менән алып киткәндә, әйт, һин ҡайҙа инең? Һунарҙа! Быуаҙ мышы атып йөрөнөң! Ике йәнде бер ыңғайҙан ҡыйҙың да баһа! Мин һиңә барма, йөрөмә, тимәнемме, ә! Хоҙай язаһы беҙгә төштө. Шуны һаман аңламайһың! Мышы төшөмә инһә, әле һаман йоҡонан яҙам, белгең килһә!

- Мин мышыны ат-ма-ным. Сара, мин мышыны үл-тер-мәнем. Мин бит һунарсы түгел. Сара, нисек шулай тип уйлай алаһың? Киреһенсә, ундағы аусыларҙың ҡомарын мин тыйҙым. Мин. Юғиһә, улар ҙур һунарға сыҡҡандар ине.

Сара ышанманы, иренә тишерҙәй итеп ҡараны:

- Кем атты быуаҙ мышыны?

- Әйтһәм, күңеленә ауыр буласаҡ, Сара.

- Ағайым...

Рауил яуап бирмәне, бары ҡатынын ҡыҫып ҡосаҡлаған килеш.

- Йөрәк әрнеүеңде кәметә алһа, ант итеп әйтәм, мин үлтермәнем быуаҙ мышыны, - тине. - Йөрөтмә был йөктө үҙең менән.

Сара башын иренең күкрәгенә ҡуйып, тауыш-тынһыҙ ғына илап ебәрҙе.

- Шулай булғас, теге ваҡыт, балалы ҡатын, тип, ни өсөн Луизаны ҡотҡарырға тырышып йөрөгәнемде һин дә аңлайһыңдыр бит!

**(Дауамы бар).**

*ИҢ МАТУР ҺҮҘ*

## "ҺЫЛЫУ" ТИП ӨНДӘШӘМ...

**Беҙҙең ҡаһарман ата-бабаларыбыҙ ҡалған быуындарға гүзәл Ватан, ғорур исем, матур тел мираҫ иткән. Туған телебеҙ бигерәк яғымлы, гүзәл, бай бит беҙҙең! Күңеле һәр саҡ матурлыҡҡа, юғарылыҡҡа ынтылып торған халҡыбыҙҙың теле һығылмалығы, йомшаҡлығы менән дә күптәрҙе һоҡландыра. Башҡа милләттәрҙе, тип әйтеүем.**

Бер саҡ дауаханала ятҡанда бүлмәлә ике урыҫ әбейе тура килде. Оҙаҡ итеп телефондан һөйләшәм әнейем менән. Ул һәр нәмәне төпсөп, ҡабатлап һораша. Теге әбейҙәрҙән уңайһыҙланып (улар халҡы үҙ телебеҙҙә һөйләшкәнде яратмауын беләм): "Әнейем был, оло кеше күп һөйләй шул", - ти үҙемсә аҡланған булам. Ә берәүһе: "Һөйләш, һөйләш. Әле тыңлап ултырабыҙ ҙа, бигерәк матур икән һеҙҙең тел. Шишмә сылтыраған кеүек ҡолаҡҡа. Әллә үҙең шулай һөйләйһең", - тимәһенме!

Ә инде "Тамыр" телеканалы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы иғлан иткән "Иң матур башҡорт һүҙе" тигән акцияға килгәндә, ул акция булып ҡына ҡалмаһын, телевидениела ла, гәзит-журнал биттәрендә лә дауам итһен ине, тигән теләк бар. Бына "Киске Өфө" гәзитендә ул "Иң матур һүҙ" тигән рубрикала дауам итә. Шуға ҡушылып, хуплап, ошо рубрикала мин дә сығыш яһамаҡсы булдым әле.

Халҡыбыҙҙың кемгәлер өндәшеү атамалары, туғанлыҡ терминдары күңелемә яҡын минең. Улар иҫ китмәле бай һәм төрлө. Бигерәк тә "һылыу" тигән өндәшеү оҡшай. Әлбиттә, һылыу тип, тышҡы ҡиәфәте, төҫө-буйы камил, матур ҡыҙға әйтәләр. Һылыу һүҙен ишетеү менән халҡыбыҙҙың сая, сибәр, тыйнаҡ, ғорур Маянһылыуҙары күҙ алдына килеп баҫа. Ә бына беҙҙең Ейәнсура, Күгәрсен яҡтарында үҙендән кесе ҡыҙ туғанына өндәшеү һүҙе ул. Үҙемдең ағайым да, башҡа оло кешеләр ҙә миңә шулай тип өндәшә. Шул һүҙҙе ишетеү менән һулышым йышая, күңелем тула, йөрәгемә йылылыҡ бөркөлә. Хатта берәй бөтөнләй таныш булмаған кеше һиңә "һылыу" тип өндәшә икән, ул шундуҡ һинең яҡынына әйләнә лә ҡуя. Башҡа бер генә һиңә төбәлгән өндәшеү һүҙе лә шундай тойғолар уятмайҙыр.

Шуға ла үҙемдән йәшерәктәргә, танышына ла, таныш булмағанына ла, гелән "һылыу" тип өндәшәм. Үҙ-ара йылылыҡты, матур һүҙ әрәсәһен хәстәрләп. Милләтемдең быуындар сылбырын, һүҙ маһирлығын дауам итеп.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**

# ЗАМАН ТАЛАБЫ...

## эшебеҙҙә бер йүнәлеш

**Өфө мәктәптәре генә түгел, республикабыҙҙың башҡа ҡала мәктәптәре лә белем биреү кимәленең сифаты юғары булыуы менән ғорурлана ала. Бер аҙ уларҙың тәжрибәләре тураһында һөйләтеү маҡсатында Стәрлетамаҡ ҡалаһының В.И. Ленин исемендәге 2-се лицей-интернат директоры Илшат Ҡәйепҡолов, Ж.Ғ. Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия директоры Айгөл Шаһисолтанова һәм Мәләүез ҡалаһы Кинйә Арыҫланов исемендәге 9-сы Башҡорт гимназияһы директоры Ләлә Рафиҡова менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



**➔ Һеҙҙең белем усағында уҡыусылар ниндәй махсус профилдәр буйынса белем ала һәм киләсәктәрен ниндәй юғары уҡыу йорттары менән бәйләйҙәр?**

**А. Шаһисолтанова:** Юғары кластарҙа филология һәм тәбиғи фәндәр йүнәлештәре буйынса профилле уҡытыу белем алыуға етди ҡараш тыуҙыра. Сығарылыш класс уҡыусылары йыл һайын рус теле, әҙәбиәт, математика, информатика, биология, химия, тарих буйынса белем сифаты юғары булыуын иҫбатлай. Дөйөм алғанда, гимназия профилде һайлағанда уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең теләктәрен һәм заман талабын иҫәпкә алып эш итә. Бөгөн уҡыусылар күберәк физика, математика, химия, биология, йәмғиәтте өйрәнеү предметтарын үҙ итә һәм илебеҙҙең төрлө тарафтарында күберәк техник, медицина юғары уҡыу йорттарында белемен дауам итә. Уларҙың уңыштары менән даими ҡыҙыҡһынып торабыҙ һәм милли кадрҙар әҙерләүгә, һәр яҡлап үҫешкән шәхестәр тәрбиәләүгә лә өлөш индереүебеҙ менән ғорурланабыҙ.

**И. Ҡәйепҡолов:** Беҙ физика-химия йүнәлешендә уҡытабыҙ. Әммә лицей булғас, математика фәненә лә юғары иғтибар бүләбеҙ һәм унан өҫтәмә дәрестәр ҡаралған. Эш һөҙөмтәләребеҙ бик матур, Берҙәм дәүләт имтихандарын уҡыусылар йыл да яҡшы тапшыра. Мәҫәлән, быйыл 22 уҡыусыға 8 юғары балл йыйыусы булды һәм 19-ы республика вуздарына уҡырға инде, 3-һе колледжда белем ала. Быйылғы йыл үҙенсәлектәрен иҫәпкә алғанда, айырыуса шатландыҡ. Ә инде ниндәй вуздарға өҫтөнлөк биреүҙәренә килгәндә, уҡыусыларыбыҙ Башҡорт дәүләт медицина университеты, Өфө дәүләт нефть техник университеты, Башҡорт дәүләт аграр университетына уҡырға инәләр һәм тәбиғәт фәндәрен тәрәнәйтеп өйрәнәләр. Шуға беҙ ҙә заман талаптарына, йәштәрҙең ихтыяждарына яуап биреү маҡсатында мәғлүмәт технологиялары буйынса төплө белем бирергә ынтылабыҙ. Әлеге көндә бәләкәй кластар уҡыусыларына "Компьютер грамоталылығы", өлкәнерәктәргә "Программалаштырыу" түңәрәктәре эшләй. Бынан тыш, технология дәресен информация-компьютер технологиялары дәресе менән берләштереп үткәрә башланыҡ. Шулай уҡ робот техникаһы йүнәлешендә эш башлап торабыҙ.

**Л. Рафиҡова:** Гимназиябыҙ заман менән бергә атлай: инновацион технологиялар уңышлы ҡулланыла. Яңыса белем биреү, тәү сиратта, фән-техника үҫеше, мәғлүмәт-компьютер технологияларының, шулай уҡ илдең фәнни-техник көсө үҫеше менән бәйле. Шуға күрә беҙ йәш быуындың үҙенең күңеленә яҡҡан, шулай уҡ йәмғиәткә кәрәкле һөнәртте лә үҫтереүгә ҙур иғтибар бирергә тейешбеҙ. Бөгөн мәктәптә балалар физика-математика, химия-биология, социаль-иҡтисади йүнәлеш буйынса белем ала. Һәр профилле йүнәлеште үҙ эшенең һөнәрмәндәре етәкләй. Педагогтар уҡыусыларҙы төрлө кимәлдәге конкурстарға, фәнни-ғәмәли тикшеренеү эштәренә йәлеп итә. Ә шулай ҙа башҡорт телен төплө өйрәнеү йүнәлеше гимназиябыҙҙың төп профиле тиһәң, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Мәктәптә ойошторолған бөтә саралар ҙа башҡортса үтә. Башҡорт филологияһын, журналистикаһын, шулай уҡ башҡорт һүҙ сәнғәте, мәҙәниәтен үҙ эсенә алған уҡыу йорттарын һайлаған уҡыусыларыбыҙ күп. Үткән уҡыу йылында ғына бер нисә уҡыусыбыҙ башҡорт филологияһына уҡырға инде. Техник, медицина һәм хәрби вуздарға ингән гимназистарыбыҙ ҙа байтаҡ.

**➔ Мәғариф өлкәһендә яңылыҡтар, үҙгәрештәр йыш булып тора. Был бөгөнгө белем усағының етәксеһенә проблемалар ҙа өҫтәйҙер, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер шәхси сифаттарына ла талаптар ҡуя. Һеҙгә ниндәй талаптарға яуап бирергә, ниндәй мәсьәләләрҙе хәл итергә тура килә?**

**И. Ҡәйепҡолов:** Быйылғы йылды миҫалға алғанда, бөтә мәғариф системаһы өсөн яҙ айҙары еңелдән булманы. Көтмәгәндә дистанцион уҡытыуға күсергә тура килде. Быға тиклем дистанцион уҡытыу алымдарын өйрәнеп йөрөһәк тә, ул һаман да теория кимәлендәрәк ине. Ауырып ятҡан 1-2 балаға дәрес үткәреү - дистанцияла уҡыуға һаналмай әле. Ә бында тотош мәктәп шул системаға күсеп киткән ваҡытта ауыр булды, уҡыусылар ҙа тиҙ генә өйрәнеп китә алманы. Былай саҡта уҡытыусылар һәр баланың кәйефен, хәлен ҡарап, күҙмә-күҙ аралашып, аңламаған ерендә ентекләберәк туҡталып, шулай иғтибарлы эшләй бит инде. Бынан тыш, техник яҡтан да проблемалар булды башта. Быны ошо шарттарҙа директорҙың да, барлыҡ коллективтың да берҙәм булыуы, көтөлмәгән проблемаларҙы тиҙ генә хәл итеп ебәреү кәрәк ине. Мәғлүмәти технологияларҙы әҙерәк кенә аңламаһаң да, ҡыйын. Шуға бөгөн белем усағы етәксеһенә үҙ алдына уҡыу, камиллашыу һәм замандан артта ятып ҡалмау мөһим, тип иҫәпләйем.

**➔ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы быйылғы йылды "Башҡорт теле йылы" тип иғлан иткәйне. Һеҙ был өлкәлә ниндәй проекттарҙы тормошҡа ашырып өлгөрҙөгөҙ?**

**А. Шаһисолтанова:** Гимназия коллективы Башҡорт теле йылына арналған сараларға бик теләп ҡушылды. "Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант" акцияһында уҡыусылар, уҡытыусылар һәм ата-әсәләр әүҙем ҡатнашты. Уҡыусыларыбыҙ шиғыр һөйләүселәр бәйгеһендә, "Республикамды данлайым!", "Иң һәләтле китап уҡыусы" видеороликтар конкурстарында призлы урындар яуланы.

Гимназияның "Арғымаҡ", "Шаян ТВ" телестудиялары "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы һәм Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан ойошторолған "Тамыр селтәре" проектында береһенән-береһе ҡыҙыҡлыраҡ сюжеттар, видеороликтар төшөрөп, I дәрәжә лауреат дипломы менән бүләкләнде (етәкселәре С.И.Тимерғәлиева, М.Р. Ғирфанова). Быйылғы уҡыу йылында гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты Башҡортостан Мәғариф министрлығы тарафынан заманса мультимедия комплексы менән йыһазландырылды. Ә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Рәсимә Хәлил ҡыҙы Сәфәрова "Иң яҡшы башҡорт һәм рус телдәре уҡытыусылары" конкурсы еңеүсеһе булып, Башҡортостан Республикаһы хөкүмәтенең аҡсалата премияһына лайыҡ булды.

**И. Ҡәйепҡолов:** Беҙҙә лә бөтә республика мәктәптәрендәге һымаҡ, планға ярашлы саралар ойошторолоп килә. Айырып телгә алғанда, уҡыусыларға бигерәк тә Милли кейем көнөнә арналғаны оҡшаны. Яҙғы дистанцион уҡыуҙар мәлендә "Мин дәрестә милли кейемдә ултырам" тигән сара ойошторҙоҡ, уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа бик әүҙем ҡатнашты һәм фото-видеоларын ебәрҙе. Унан һуң башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара форумында ҡатнашып, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин һәм башҡа етәкселәр менән осрашыуҙа коллегалар менән үҙебеҙҙе борсоған һорауҙарҙы күтәреп сыҡтыҡ. Йылға йомғаҡ яһап та, үҙебеҙҙең эш тәжрибәһенән сығып та шуны әйтә алам: беҙ был тәңгәлдә ҡулдан килгәндең барыһын да эшләйбеҙ. Беҙҙең лицей-интернат башҡорт милли кадрҙарын әҙерләү өсөн асылған һәм бына 96 йыл ошо маҡсатта эшләй. Фатима Мостафина, Хәй Мөхәмәтйәров, Миңлеғәли Яҡупов кеүек бик күп данлыҡлы уҡыусыларыбыҙ бар. Бөгөн дә заман ҡыйынлыҡтарына ҡарамайынса, йәш быуынды башҡорт мөхитендә тәрбиәләргә, башҡорт телен өйрәтеп үҫтерергә тырышабыҙ. Быны белеп, милләттәштәр республиканың Әлшәй, Стәрлебаш, Ейәнсура, Күгәрсен, Ҡырмыҫҡалы районДарынан, быйыл Баймаҡ һәм Белорет районДарынан да балаларын беҙгә уҡырға бирә. Элегерәк беҙҙең "Рәсәй башҡорттары" тигән программа буйынса сит төбәктәрҙән балаларҙы йүнәлтмә буйынса уҡырға ала инек, хәҙер ул юҡ. Әммә йола һаҡлана, Ырымбур, Ханты-Манси автономиялы округынан уҡыусыларыбыҙ бар. Ата-әсәләре балалары башҡорт мөхитендә тәрбиәләнһен, туған телен яҡшы белһен тип үҙҙәре мөрәжәғәт итә.

**Л. Рафиҡова:** Быйыл республикабыҙҙа Башҡорт теле йылы иғлан ителеү ҡыуанысл ы күренештәрҙең береһе булды, тип иҫәпләйем. Уның сиктәрендә ойошторолған төрлө саралар пандемияға бәйле онлайн режимда булһа ла, бик әүҙем һәм ойошҡанлыҡ менән уҙҙы. Был иһә телебеҙгә төрлө кимәлдә иғтибар артыуын да күрһәтте. Беҙ туған телдәр уҡытыусылары, йәмғәтселек, туған телдәрҙе үҫтереү һәм һаҡлау буйынса проекттар авторҙары, журналистар һәм блогерҙар, халыҡ ижады оҫталары, этнооҫҡыуарлыҡ ойоштороусылар, ижади коллективтар етәкселәре һәм ағзалары өсөн булдырылған Рәсәй халыҡтарының этномәҙәни үҫеше һәм берҙәмлеген нығытыуға индергән өлөшө өсөн "Милләт ғорурлығы" премияһына конкурста ҡатнаштыҡ. Шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Башлығының дәүләт телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән гранттары конкурсында көсөбөҙҙө һынап ҡараныҡ. "Урал батыр мәктәбе" тәжрибә майҙансығында ҡатнашып та йәш быуынға рухи-әхлаҡи һәм граждандыҡ-илһөйәрлек тәрбиәһе биреү буйынса тәжрибә тупланыҡ. "Иле юҡтың ғына теле юҡ!" хикәйәләр, "Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ" иншалар конкурстарында ла үҙебеҙҙе яҡшы яҡтан иҫбатланыҡ. Бынан тыш, Башҡорт милли кейеме көнөнә арналған саралар ҙа ойошҡанлыҡ менән үтте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәселәребеҙҙең тел төбөнән аңлашыла: беҙҙең республиканың милли белем усаҡтарында балаларға белем һәм тәрбиә биреү һәр ваҡыт тығыҙ бәйләнештә бара. Сөнки шунһыҙ, нисек кенә пафослы яңғырамаһын, йәмғиәткә файҙа килтергән, тыуған төйәгенә һәм халҡына кәрәкле булған шәхестәр үҫтереп булмай бит.**

Камила ҒӘЛИЕВА
яҙып алды.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ҠОРОҒОР ҺЫЙЫР, ТИМЕ?

## Халыҡсан һөйләш шулай була!



**Заманалар үҙгәреүе, телдең күберәк әҙәби һөйләшкә күсә барыуы, алмашҡа килгән яңы быуындарҙың тел нескәлектәрен, байлығын, һутлылығын тулыһынса тоймауы һәм башҡа күп төрлө сәбәптәр арҡаһында телебеҙ ярлылана, һайыға, ҡата бара һымаҡ. Ауылда ололар менән генә боронғоса ихлас һөйләшеп булалыр бөгөн. Ә йәштәр менән бит һүҙ һайлап ҡына аралашаһың, улар һин әйткәндең барыһын да аңлармы, ниндәйҙер һүҙҙәрҙе ҡабул итерме-юҡмы, мәғәнәһе барып етерме, тип кенә.**

Башҡорт телендә китаптарға ла инмәгән (бармай тип иҫәпләнгән), күптәр телмәрҙә ҡулланмаған, хатта тыйылған да һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, әйтемдәр бар. Телдә уларҙы агрессив фразеологизмдарға индерәләр, ахыры. Асылда, улар яҡшылап тикшерелмәгән дә, әммә һөйләш телмәренең бер ҡыҙыҡлы ҡатламын тәшкил итә. Мин бәләкәй саҡта ауылда оло инәйҙәр бындай һүҙҙәрҙе рәхәтләнеп ҡулланалар һәм берәү ҙә уларҙы бының өсөн шелтәләмәй ине. Сөнки был һүҙҙәр ҡарғау өсөн генә түгел, ә күп осраҡта эстәге тойғоларҙы сығарып бирер, әйтергә теләгәндә сәсрәтеп әйтер һәм кәрәк урынына еткерер өсөн ҡулланыла ине. Бына, ошондай һөйләшеүҙәрҙе ишетергә була ине:

- Ҡороғор һыйыр көтөүҙән айырылып ҡалған тағын.

- Бирәнләнеп йөрөй микән, айыу тарткыр?

- Көтөүсеһе лә шул, күҙе сыҡҡыр нәмә, малды теүәлләп ҡарап алып ҡайтмай.

- Э-эй, әйтерең, ней атанан тыуған һуң ул? Бер аяғын баҫҡансы, икенсеһен эт ашай.

Бына шундай һеңдерә әйтеп һөйләшелгән, әйтем-мәҡәлдәр менән байытылған була торғайны инәйҙәр һөйләше. Урыҫ мөхитендә үҫкән әсәйемдең һөйләшеүе халыҡсан телмәрҙән алыҫ булғас, ауылдағы инәйҙәр-өләсәйҙәр араһындағы ошондай һөйләште ауыҙымды асып тыңларға яраттым. Бер инәйҙең малдарынмы, балаларынмы, "тума, бирән, түпәһе уйылғыр" тип әрләгәнен ишетеп, үҙемдең дә өйҙә балаларҙы тәрбиәләгәндә ҡулланып маташҡанымды хәтерләйем.

Был тупаҫ тапҡыр фразеологизмдар менән байытылған һөйләшкә эйә булғандар тыңлаусыларын да ауыҙына ҡаратып ҡуя беләләр. Был үҙенә күрә телмәр үҫешенең бер кимәле, тел байлығының сикһеҙ белемен анда һаҡлай белеү, тип иҫәпләйем мин.

Башҡорт телендәге боронғо һөйләш телен һәм уның бөгөрлә-ҡатламлы эстәлекле һүҙ мәғәнәләрен яҡшы белгән кеше ине ҡәйнәм. Ябай ғына һауынсы ҡатындың телмәре шул тиклем бай булыуын уның олатаһы һәм өләсәһе ҡулында тәрбиәләнеп үҫеүе менән дә, шул ерлектә тел нескәлектәре ныҡ һаҡланыуы менән дә, шәхестең үҙенең аң кимәле яҡшы үҫешкән булыуы менән дә аңлатырға булалыр. Тел байлығын үҙләштереү һәм телмәрҙә дөрөҫ, урынлы файҙалана белеү - ул шул аҡыл билгеһе бит инде.

Бәрәй оло кеше тураһында яратмайыраҡ һөйләһәләр: "Ярай, күпһенмәгеҙ, уның да ғүмере арҡыры ағасҡа бәйләп ҡуйылмаған, йәшәгән тиклем йәшәмәҫ", - тип ҡуя. Бәрәй ирҙе һөйләһәләр: "Иргә ышанма, Иҙелгә таянма, ир - ир булып йөрөһөн, һин бисә булып донъя көт", - тиһенме, йәки бер туғандар һүҙгә килешһә: "Ағай-эне талашҡан, атҡа менһә ярашҡан, ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ. Бар, туғанлыңдың тупһаһына баҫ, сәләм биреп ишеген ас - ярашырһығыҙ", - тип, йәш ҡатындарға: "Иргә бикә кәрәкмәй, иркә кәрәк", - тип кәңәш бирә. Үҙендәге аҙҙы икенсе берәү һораһа: "Хәйерсене теләнсе талаған, ти", - тип көлә йә: "Бүлгән һайын күбәйермен, тигән, ти", - тип булған әйберен бүлешә. Бер хәлгә аптыраһа: "Уйлап уйым, буйлап буйым етмәне", тыңламай һуғылған балаға: "Гибеләм тигән ҡолон инәһенең ҡойороғона төртөләр", ир артынан йүгергән ҡатындарҙы: "Ирҙе һөйҙәрәм тип мирҙы көлдөргән, ти" - тип бер һөйләм менән генә сәпәй ҙә ҡуя. Көн тәртибе тотмағандарҙы: "Иртәнге сәйен төш эсеп, төшкө тамағын кис ашап йәшәгәндәр"- ти, ялҡауҙарҙы: "Арҡырыны буй һалмаған әҙәмдәргә ни минауат" - тип ебәрә. Ир-егеттең ҡылығын маҡтау йә шелтәләүен дә ымлыҡтарҙы алыштырып ҡына ла белдерә ала: "Һай, ирең; э-эй, ирең; йә-ә, ирең; ай, ирең". Мал араһында йөрөгәнендә малдарын орошоуын да, яратыуын да, һөкланыуын да агрессив фразеологизмдар аша сағылдыра: "Ҡороғор һыйыр, ҡалайтып торған була, суҡынған нәмә булды бит был, күҙе аҡшайған мал булғыры, ҡәһәр һуҡҡырҙы һайғау бөткәнсе яраһы бар..." Ә үҙе шул тиклем мал йәнле, уларға бармаҡ осо менән дә һуҡмаған, малды оҫта тәрбиәләй белгән ҡатын булды. Тимәк, булдай телмәр һәр осраҡта ла уй йәки ҡылыҡ ҡаралыуын аңлатмай, ә тойғоларҙы сығарыуҙың бер төрө булып та килә.

Күҙ алдында ятҡан нәмәне тапмай йөрөгәндә "күҙең сыҡҡанмы", аңламағандарға "тауыҡ баш" тиһәләр ҙә аптырамайбыҙ. Оҙаҡ уйнап ҡайтҡан балаларҙы "аяғыңды өҙөп ултыртам, аяғыңды һындыра һуғам", һорамай алғанда "ҡулыңды өҙәм", ярамағанды һөйләгәндә "теленде ҡырҡып алам" тип тә әрләйбеҙ, тыңлама, иғтибар итмә, тигәндә "сыс ҡолағына", "төкөр ауыҙына", телән ни эшлә тигәндә "суҡын" тип тә әйтәбеҙ. Был һүҙҙәрҙе туранан-тура ҡабул итмәҫкә икәнде телде дөрөҫ аңлаған кеше белә, әммә уны бөгөнгө быуын йәштәренә ҡулланып булыуы икеле. Үпкәләп китеүҙәре лә бар. Бер мисалда йәш ҡыҙ менән һөйләшкәндә "Хәйерсегә ел ҡаршы инде" тип хәсрәтен бүлешәйем, тиһәм, "Ни эшләп мин хәйерсе булайым?" тип ҡылтайып ҡалды. Был бит ошондай уңышһыҙ эштәр турaһында һөйләгәндә әйтелә торған әйтем, тип, саҡ тынысландырҙым. Телдән төшөп ҡалып бөтөп барған фразеологизмдарҙы, уларҙың агрессивтарын да ҡайҙан белһен инде улар?

Беҙҙең Бөрйән яҡтарында халыҡ тупаҫыраҡ итеп, әммә һутлы һәм һеңдерә әйтеп һөйләшә. Был айырмалы рәүештә бер ерлек үҙенсәлеге тип уйлайым. Мәҫәлән, ой таҙалап сыҡҡанды "йыйыштырҙым" ғына тимәйҙәр, ә "һыпырып таҙалап сыҡтым", әрләгәндә "һыҙыраһынан әрләнем", һыйыр һауғанды "дыһырҙатып һауып алдым", ныҡ йоҡлағанды "иҫһеҙ йоҡлағанмын", белмәгәндә "шыпа белмәй ҡалғанмын", ныҡ илағанды "соҙорап илап ҡалды", үткен кешене "сәсрәп тора", ныҡ тыйғанды "түпәһен төйөп ултырттым", ныҡ әйткәндә "һеңдерә ҡатырғансы әйттем" тиҙәр. Бик күп улар, барыһын да һанап сығып булмайҙыр.

Күрше инәйҙең ейәндәре йәйҙәрен күмәк булып йыйыла ла, бәләкәй балалар араһында талаш-тартыш сығып китһә, "Кырҡ ата балаһын тыңлатып буламы" тип орошоп йөрөгән була торғайны. Ҡыҙ балаларынан тыуған ейәндәре менән ир балаларынан тыуған ейәндәрен дә бер әйтем менән генә айырып билдәләй: "Инә туғанлығы табын артында, ир туғанлығы ҡан тартымда". Был нимәне аңлата ул, тип һорайым, әлбиттә. "Ҡыҙ балаларымдан килгән ейәндәрем ҡалай ғына ҡәҙерле булһалар ҙа, табыным түрендә ултырһалар ҙа, икенсе ҡан балалары, улдарымдан тыуған ейәндәрем, артыҡ иркәләтеп торолмаһа ла, шәжәрә ағасының ботаҡтары, улар бер ҡанды дауам иттереүселәр", тип тағатып бирә әйтемен инәй. Унан, бөтөн эшен ҡуйып, шул ейәндәрен һыу буйына йәки боҙ шыуырға алып барғанда ла, "Бала батшаны енгән", "Баллар ней, бер яҡтан йәннәт, икенсе яҡтан бәйнәт" йәки "Буран көндө буҡ ҡыҫтаған, ти" тип һуҡранып китеп бара торғайны. Һәр әйткәне ҡандай ҙа тәрән мәғәнәгә, фәлсәфәгә эйә үҙенең, шулай бит? Әткәндәй, бер журналистың яҙмаларында "Аҡҡа төшкәнсе, буҡҡа төш" тигән әйтемде йөмшартып "Ҡағыҙға төшкәнсе, бысраҡҡа төш" тигән халыҡ" тип яҙғанын уҡығайным. Йәнәһе, халыҡ әйткәнсә итеп яҙһаң, мәҙәниәтһеҙлек булып килеп сығасаҡ, ҡағыҙҙа улай ярамай. Юҡ шул, туғаным, халыҡ улай "культур-мультурлап" тормаған, тупаҫыраҡ, әммә тапҡыр итеп әйткән дә ҡуйған. Ул шуның өсөн дә халыҡ.

Агрессив фразеологизмдар менән тупаҫ яңғырашлы әйтемдәр араһында айырма бар, әлбиттә, әммә мин бында уларҙың бер функцияны - халыҡсан тел байлығын булдырыуын күҙ уңында тотам. Яңғыраште ысынлап тупаҫ һәм ҡаты, хатта дин күҙлегенән тыйылған (ҡарғышлы) булғанда ла, был һүҙ байлығы беҙҙең халыҡ телендә булған, йәшәгән һәм уларҙы "оҡшамай", "мәҙәниәтһеҙлек" тип кенә юйып ташлап булмай. Уларҙы хатта үҙгәртергә, шымартырға һәм мәҙәниләштерергә лә ярамай, минеңсә. Бөгөн бит әҙәби телдә һөйләшә белгәндәр (Аллаға шөкөр) күп тә, халыҡсан телде һаҡлаусылар һирәк. Бына ошо хаҡта ине һүҙем. Ошо һөйләшеүҙе, йә, кем дауам итә?

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



## БЕРЕНСЕ ӨҪТӨНЛӨГӨҢ

Һинең тормоштағы беренсе өҫтөнлөгөң - именлегең һәм аң даирәһе сиктәрен киңәйтергә ынтылышың. Аң даирәһе сиктәрен киңәйтеп, һин шәхес булырға ҡамасаулаған "хаталы ышаныуҙы" бөтөрәсәкһең.

Һин быға түбәндәге шарттарҙы үтәп өлгәшә алаһың:

1. Шәхси ҡарашыңды "дөрөҫ" һәм "дөрөҫ түгел" тип бүлеп яҡлауҙан тукта. Үҙ ҡарашыңды ныҡышып яҡлау яңы идеялар үҙләштереүгә ҡамасаулай. Һин шаршауыңды төшөрөп, ишегеңде саҡ ҡына асыҡ тоторға өйрәнергә тейешһең.

2. Үҙ концепцияңды, әһәмиәтеңде, инаныуҙарыңды, идеалдарыңды, пландарыңды, һаҡ схемаларын, нәфрәтеңде, маҡсатыңды, өмөтөңдө һәм әүәҫлектәреңде үтә ныҡ баһалама.

3. Үҙ талаптарыңды һәм ниәттәреңде үҙгәртеп ҡор һәм уларҙың асылына төшөнөргә тырыш.

4. Интуицияңа ышанырға өйрән.

5. Үҙ хаталарыңды күҙәт һәм уларҙы төҙәтергә тырыш; бының беҙҙең өсөн мөһим һабаҡтарҙың береһе булыуына төшөн.

6. Үҙеңде һәм башҡаларҙы ярат.

7. "Был яҡшы, ә был насар" тигән тиҫкәре фекергә килмәй һәм ихтыярһыҙ һығымта яһамай тыңларға өйрән. Һөйләгәндәренә ышанмаһаң да, иғтибар менән тыңларға ғәҙәтлән.

8. Үҙең яҡлаған принциптарҙы билдәлә.

9. Яңы аң даирәһе һине яҡшы яҡҡа үҙгәртер саралар һәм ниәттәр менән тәьмин итәсәгенә ышан.

Үҙ-үҙеңә "Минең инаныуҙарым нигеҙлеме икән? Хаталанмайыммы икән?" тигән һорау ҡуй. Башҡа кешегә ҡарата ошондай һорауҙар биргәндә, объектив булырға кәрәк. Һин мотлаҡ уның хаҡлы булмауына ышандырырлыҡ сәбәптәр килтерергә тейешһең. Бөтә нәмәне һорау аҫтына ҡуй һәм аңлайышлы иҫбатлауҙар нигеҙендә һығымта яһа.

Кеше үҙ-үҙенә ҡәтғи баһа биреү һәм үҙ-үҙен танып белеү талаптарын үтәргә әҙер булһа ғына яуап ыңғай буласаҡ. Әгәр уның ниәте ныҡлы икән, ул үҙе хаҡында ҡайһы бер мөһим хәҡиҡәтте асыу ғына түгел, психологик өҫтөнлөккә лә эйә буласаҡ. Шәхес үҙенең кешелек сифатын күрһәтеп, үҙ аңы нигеҙҙәрен аңлауға тәүге аҙымын яһаясаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 14 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.15, 1.20 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Скажи что-нибудь хорошее". [16+]
23.40 Вечерний Ургант. [16+]
0.20 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-5". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 История одного села. [12+]**
**14.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.00 Х/ф "Мир потеряшек". [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.00 Вечерний телецентр.**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Год башкирского языка. Итоги.**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 "Во имя народа". Литературно-музыкальный вечер, посвященный 125-летию со дня рождения Шайхзады Бабича. [12+]**
**1.00 Х/ф "Трамвай в Париж". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Моя семья". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 15 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.15, 2.15, 3.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Скажи что-нибудь хорошее". [16+]
23.40 Вечерний Ургант. [16+]
0.20 Д/ф Премьера. "Алекс - Юстасу". Тот самый Алекс". К 100-летию Службы внешней разведки. [16+]
1.20 Д/ф Премьера. "Бомба. Наши в Лос-Аламосе". К 100-летию Службы внешней разведки. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-5". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 По сути дела. [12+]**
**22.00 По сути дела. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Еще о войне". [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**4.00 "Млечный путь". [12+]**
**5.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 16 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.15, 2.15, 3.05 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.55 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Скажи что-нибудь хорошее". [16+]
23.40 Вечерний Ургант. [16+]
0.20 Д/ф Премьера. "Его звали Майор Вихрь". К 100-летию Службы внешней разведки. [16+]
1.20 Д/ф Премьера. "Без права на славу". К 100-летию Службы внешней разведки. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-5". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Спасибо врачам". Концерт. [12+]**
**0.00 Х/ф "Кадет". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Любишь - не любишь?" [12+]**
**4.45 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 17 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 "Модный приговор". [6+]
11.40, 12.15, 17.15, 0.20 Время покажет. [16+]
14.00 Ежегодная пресс-конференция Владимира Путина.
17.00 Новости (с субтитрами).
18.55 На самом деле. [16+]
20.00 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Скажи что-нибудь хорошее". [16+]
22.35 Большая игра. [16+]
23.40 Вечерний Ургант. [16+]
2.30, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
4.00 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 13.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.00 "60 минут". [12+]
14.00 Ежегодная пресс-конференция Владимира Путина.
19.00 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-5". [16+]
3.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Моя планета Башкортостан.[12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.15 Х/ф "Масакра". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Дальше тишина". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 18 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 4.50 Модный приговор. [6+]
12.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Сегодня вечером". [16+]
23.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
1.25 Вечерний Ургант. [16+]
2.20 Д/ф Премьера. "Юл Бриннер, великолепный". [16+]
3.20 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
23.50 Торжественная церемония вручения Российской национальной музыкальной премии "Виктория".
1.55 Х/ф "Незнакомка в зеркале". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/ф "Великая китайская стена". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00, 4.30 Караоке по-башкирски [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Белые росы. Возвращение". [12+]**
**2.15 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## 19 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]
11.15, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.05 Д/ф "Алекс - Юстасу". Тот самый Алекс". К 100-летию Службы внешней разведки. [16+]
14.15 Д/ф Премьера. "Без права на славу". К 100-летию Службы внешней разведки. [16+]
15.20 "Голос". Новый сезон. [12+]
17.15 Кубок Первого канала по хоккею-2020. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир.
19.50, 21.20 "Ледниковый период". Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
23.20 Х/ф Премьера. "После свадьбы". [16+]
1.25 Наедине со всеми. [16+]
2.10 Модный приговор. [6+]
3.00 Давай поженимся! [16+]
3.40 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.30 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Ожидается ураганный ветер". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.45 Д/ф "Опасный вирус. Первый год". [12+]
21.30 Х/ф "Входите, закрыто!" [12+]
1.30 Х/ф "Заклятые подруги". [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.00 Презентация мультфильма "Нурбостан".**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Хазина о хазине. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**18.30 Йәшлек-шоу-2020. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 Һылыуҡай-2020. [12+]**
**0.15 Х/ф "Следы апостолов". [12+]**
**2.45 Спектакль "Салават". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 20 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.15, 6.10 Х/ф "Ищите женщину". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.00 Д/ф "Его звали Майор Вихрь". К 100-летию Службы внешней разведки. [16+]
14.05 Д/ф "Бомба. Наши в Лос-Аламосе". К 100-летию Службы внешней разведки. [16+]
15.40 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
17.15 Кубок Первого канала по хоккею-2020. Сборная России - сборная Финляндии. Прямой эфир.
19.50 Праздничный концерт к Дню работника органов безопасности Российской Федерации. [12+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
23.10 Т/с Премьера сезона. "Метод-2". [18+]
0.10 Д/ф "Вся жизнь - игра". К 90-летию Владимира Ворошилова. [12+]
1.10 Д/с "Самые. Самые. Самые". [18+]
2.45 Давай поженимся! [16+]
3.25 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30, 2.00 Х/ф "Монро". [12+]
6.00 Х/ф "Невеста моего жениха". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Праздничный концерт, посвященный Дню работника органов безопасности РФ.
14.00 Х/ф "Моя идеальная мама". [12+]
18.15 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "Наша Африка в Латинской Америке". [12+]
3.45 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**10.15 "Гора новостей". [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 Т/с "Бирешмә".**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [0+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Юбилейный концерт композитора Данила Хасаншина. [12+]**
**18.15 Лидеры региона. [12+]**
**18.45 "Башҡорт йыры-2020". [12+]**
**20.00 Этно-краса. "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2020".**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Ковчег". [12+]**
**1.45 Спектакль "Касатка". [12+]**
**3.45 Наши годы. [12+]**
**4.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел ахыр - Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (29) дүшәмбе | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 15 (30) шишәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 16 (1) шаршамбы | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 17 (2) кесе йома | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 18 (3) йома | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 19 (4) шәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 20 (5) йәкшәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ТУҒАНЫНАН ЯҘҒАН - ЯРТЫ ЙӘТИМ, ТУҒАН ТЕЛЕНӘН ЯҘҒАН - МЕҢ ЙӘТИМ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**49-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ата. Мөнәжәт. Тубырсыҡ. Ҡоймаҡ. Тәғәм. Шарт. Таро. Илбаҫар. Тары. Пани. Әләм. Лапы. Вова. Әсә. Үгеҙ. Наза. Каста. Бала. Скат.

**Вертикаль буйынса:** Таһирова. Туғыҙбаева. Мәрсиә. Мышы. Гәрәбә. Рәшә. Теннис. Мәҙәк. Туп. Ағас. Ҡитға. Әтәс. Әрәмә. Тула. Ҡотлогилдина. Тәпән. Март. Ҡарамышева.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 декабрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 декабрь "Р"һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 11.00 0+

**"Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева, И. Казакова), музыкаль риүәйәт. 15.00 12+

**19 декабрь "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.30, 14.00, 16.30 0+

**20 декабрь "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.30, 14.00, 16.30 0+

**"Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00, 15.00, 18.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**19-20 декабрь "История одной снежинки"** (В. Антошин) 11.00, 14.00, 17.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 декабрь "Сәләм, дуҫ!"** Башҡорт теле көнөнә концерт. 6+

**15 декабрь Д. Ишниязова** етәкселегендәге эстрада төркөмөнөң онлайн концерты. 6+

**18 декабрь Ф. Ғәниев** етәкселегендәге эстрада төркөмөнөң онлайн концерты. 6+

**19 декабрь "Baby-ёлка"** 3 йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләр өсөн байрам. 12.00 0+

**20 декабрь "Главный новогодний утренник Уфы"**. 11.00 0+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Филология фәндәре докторы, профессор, яҙыусы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мирас Хәмзә улы Иҙелбаевты ихлас күңелдән юбилейы - 75 йәше тулыу менән ҡотлайбыҙ!**

Алдағы көндәрҙә лә ҙур хеҙмәт, аҡыл көсө, һәләт талап иткән фән менән әҙәбиәт өлкәһендә яңынан-яңы үрҙәр яулауын теләйбеҙ, яңы ғилми асыштар һәм әҙәби әҫәрҙәрен көтәбеҙ. Ижад, ғаилә именлеге, сәләмәтлек, балалар һәм ейән-ейәнсәрҙәр ҡыуанысына кинәнеп, оҙон-оҙаҡ ғүмер кисерергә насип булһын, тигән изге теләктәр менән, бөтөн Иҙелбаевтар исеменән

**Фәүзиә һәм Гөлфиә Мөхәмәтшиналар.**

ҠАЙҒЫ УРТАҠЛАШАБЫҘ

# ТОҒРО АВТОРЫБЫҘ БУЛДЫ

**Әнүәрә апай вафат булып ҡуйҙы. Шул хаҡта "Киске Өфө" гәзитенә, уны уҡыусыларға хәбәр итәйем, тинем. Сөнки Әнүәрә апай Хәйбуллина оҙаҡ йылдар ошо баҫмала "Халыҡ дауаһы" рубрикаһын алып барҙы, ағинәй һүҙҙәре, төрлө дауалау ысулдары тураһындағы кәңәштәре менән уртаҡлашты…**

Ул ниңәләр гел генә: "Аяғыңды һаҡла, үлем аяҡтан килә", - тип ҡабатларға ярата торғайны. Йөрәге тибеүҙән туҡтағас, кешенең аяҡ-ҡулы һыуына башлағанға шулай тинеме икән? Аяҡтан яҙһаң, хәрәкәтһеҙ ҡалған кәүҙәң кибә-һурыла башлағанға микән? Бәлки, ул төрлө дауалау серҙәрен дә, үләндәрҙе ҡулланыу ысулдарын да, халыҡтың борондан килгән дауаланыу сараларын да яҡшы белгәнгә шулай әйткәндер...

Беҙ күрше генә йәшәнек. Урамдан китеп барышлай, туҡталып, баҡсала үҫкән файҙалы үләндәргә күрһәтеп: "Сүп үләне булмай ул, һәр үләндең үҙенсә шифаһы бар, утаған үләндәренде ташлама, эҫе һыуға бығтырып, аяғыңды тығып ултыр", - тип, әллә күпме кәңәшен биреп үтә торғайны. Йылға буйында үҫкән хуш еҫле бөтнөк үләнен дә, башҡа үләндәрҙе лә ул ҡулланырға өйрәтте.

Бер ҙә бирешмәҫ, бер ҡасан да ауырымаҫ кеүек ине ул. Шулай ҙа:

"Әҙерләп ҡуйғанмын барыһын да, хәйерлек аҡсаларҙы ла йыйғанмын. Өйөңдә яҡшы һаҡла, ҡапыл ҡунағың килер; үҙеңдә яҡшы һаҡла, ҡапыл үлемең килер, тиҙәр бит",- тигән һүҙҙәре лә бар ине. Урамдан үткәндә лә элекке уҡыусыларының (ул уҡытыусы булып эшләнө) арҡаһынан һөйөп йә шаяртып семтеп ала ине, шул ғәҙәтен белгән уҡыусылары юрамал ситкәрәк шыла торғайны. Ишколда ла, Байымда ла беҙҙең өсөн Апай булды ул. Шулай иҫтә ҡалһын яраҡкан оло Уҡытыусыбыҙ.

Әнүәрә Ғабдулхаҡ ҡыҙы яҡты донъя менән мәңгелеккә хушлашты, иманы юлдаш булһын. Уны ҡәҙерләп ҡараған балаларына һәм күршеләренә ҙур сауаптар насип итһен!

**Зәйтүнә НӘСИБУЛЛИНА.**

* * *

Әбйәлил районы Байым ауылында йәшәгән пенсиялағы уҡытыусы, гәзитебеҙҙең тоғро дуҫы һәм авторы

**Әнүәрә Ғабдулхаҡ ҡыҙы Хәйбуллинаның**

вафаты айҡанлы уның балаларының һәм туғандарының оло ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

*Конкурстың иң ҡыҙыҡ өлөшө - һорауҙарға яуап биреү һынауының бик тиҙ, әллә ни әһәмиәт бирелмәй, һә тигәнсе үтеп китеүе генә бер аҙ күңелде ҡырҙы ҡырыуға.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МИЛЛИ ЙӨҘЛӨ...

## бәйге булды был!




**"Матурлыҡты табаҡҡа һалып, табынға сығармайҙар", тиҙәр беҙҙең башҡорт халҡында. Ләкин бөгөн был аҡылға ҡолаҡ һалыу тигән нимә онотолдо: Рәсәй генә түгел, барлыҡ донъя кимәлендә лә гүзәл заттар һылыулыҡта ярыша хәҙер. Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары ла был тәңгәлдә һыр бирергә теләмәй, киреһенсә, ниндәй генә халыҡ-ара бәйгеләрҙә ҡатнашһа ла, еңеүсе тажы кейә лә ҡайта. Ысынында, башҡорт ҡыҙҙарының һылыулығы бер феноменға әйләнә бара, тиергә лә булалыр.**



Быға тиклем республика, төбәк-ара кимәлдә генә үткән "Һылыуҡай" конкурсы быйыл иһә үҙенең даирәһен киңәйтеп, Бөтә Рәсәй кимәлендә бына ошондай матур, нәзәкәтле, һөнәрле һәм туған телен яҡшы белгән башҡорт ҡыҙҙарын барланы. Ойоштороусылары БР Хөкүмәте, БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы булған сараның 5 сентябрҙән башланған һайлап алыу турҙарында Башҡортостандан тыш, Силәбе, Свердловск, Ырымбур, Һамар, Ленинград, Мәскәү, Һарытау өлкәләренән, Пермь крайы, Ханты-Манси автономиялы округы, Татарстандан йәмғеһе 200-ҙән ашыу кеше ҡатнашҡан. Коронавирус инфекцияһына бәйле быйылғы ҡатмарлы шарттарға ҡарамаҫтан, баһалама ағзалары һәр төбәккә сығып, шәхсән үҙҙәре 20 еңеүсене һайлап алған. Был хаҡта Рәсәй һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, жюри ағзаһы Хөрмәтулла Үтәшев уйынлыысынлы былай ти: "Миңә 185 тапҡыр "Бөрйән ҡыҙы" бейеүен ҡарарға һәм, яңылышмаһам, Зилиә Бәхтиеваның "Халҡыма" йырын 105 мәртәбә тыңларға тура килде..."

Шулай итеп, бына һайлап алынған ҡыҙҙар Өфөгә, "Башҡортостан" дәүләт концерт залына бәйгенең йомғаҡлау сараһына йыйылды. Конкурстың электән килгән ҡағиҙәһенә ярашлы, башта ҡыҙҙар үҙҙәре менән таныштырыу маҡсатында телмәр тотто. Уларҙың һәр ҡайһыһы тарихта билдәле башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына оҡшарға теләүе, халыҡ йырҙарынан, ауыҙ-тел ижадында сағылыш тапҡан образдарҙан өлгө алыуы хаҡында бәйән итте. Әлбиттә, 16-24 йәшлек кенә һылыуҙарҙың үҙ халҡының тарихы, арҙаҡлы шәхестәре, мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныуы һәм күпселегенең башҡортса оҫта телмәр тота белеүе маҡтауға лайыҡ. Артабан ҡыҙҙар ҡабат-ҡабат сәхнәлә матур баҫып йөрөй белеүҙәрен күрһәтте, береһендә Рәсәй дизайнеры, кутюрье Игорь Гуляевтың кейем коллекцияһында сыҡты. Шунан "Аманат" халыҡ бейеүҙәре ансамбле егеттәре менән берлектә "Гөлнәзирә" һәм "Зарифа" башҡорт халыҡ бейеүҙәрен башҡарҙылар. Былар, әлбиттә, ҡатнашыусыларҙың талантын, буй һәм тышҡы йөҙ камиллығын балҡытып ебәреүсе һынауҙар һәм улар, һис шикһеҙ, был һынауҙы лайыҡлы тотто.

Конкурстың иң ҡыҙыҡ өлөшө - һорауҙарға яуап биреү һынауының бик тиҙ, әллә ни әһәмиәт бирелмәй, һә тигәнсе үтеп китеүе генә бер аҙ күңелде ҡырҙы ҡырыуға. Ә бит тап ошо һынау мәлендә ҡатнашыусыларҙың телмәр оҫталығы ла, фекерләү ҡеүәһе лә, хатта белем даирәһе лә сағылыш таба. Әллә һуңғы быуын йәштәренең бындай һынауҙарға бик үк әҙер түгеллеген аңлап шулай эшләндеме икән, тип тә уйланылды. Ана бит, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолованың "Башҡорт халыҡ әкиәттәре "борон-борон заманда..." тип башлана, ә бына һеҙҙең турала китап йә әҫәр яҙылһа, ни тип башланыр ине?" тип яңғыраған һорауына, ҡат-ҡат уйнаған пластинка кеүек, барыһы ла "Борон-борон заманда йәшәгән ти бер ҡыҙ" тибындағы яуаптар теҙҙе. Бөрйән районынан бер Эльвина Семенова ғына: "Минең китабым борон-борон заманда түгел, XXI быуатта тип башланыр ине!"- тигән яуабы менән бер төрлөлөктө "боҙҙо". Матурлыҡ конкурстары буйынса тәжрибәле Мәскәү ҡунағы кутюрье Игорь Гуляев ҡабатлау таблицаһы буйынса һәр ҡыҙға айырым һорау бирҙе һәм аҡса һанай белеүҙәрен дә бер юлы тикшерҙе. Беҙҙең ҡыҙҙарҙың 100 долларға 100 долларҙы ҡуша белмәүенә ҡарағанда, улар, күрәһең, һумдар менән генә эш итеп өйрәнгәндер, тигән фекер тыуҙы.

Конкурстың сәхнә биҙәлеше, ҡыҙҙарҙың итәғәтле кейемдәрҙә сығыш яһауы, улар әҙерләнгән арала эстрадабыҙҙың йәш йондоҙҙары сығышы, ойоштороусыларҙың тамашаны милли колорит менән һуғарырға ынтылышы, сараның тик башҡортса ғына алып барылыуы оҙаҡ йылдар көткән ыңғай күренеш булды. Йәш быуындың иғтибарын туған телгә, йолаларыбыҙға, ижади эшмәкәрлеккә ылыҡтырыу маҡсатында 28-се тапҡыр үткәрелгән "Һылыуҡай" конкурсының яйлап булһа ла милли йөҙө формалашып килеүен күрҙек.

Әлбиттә, бик күптәр, хатта ошонда ҡатнашып йөрөгән ҡыҙҙарҙың атаәсәләре лә, матурлыҡ конкурстарында еңеүселәрҙе ни бары тышҡы ҡиәфәткә ҡарап ҡына һайлап алыу яҡлы түгелдәр. Улар менән әңгәмәләшкәндә һәр береһе ҡыҙҙарының аш-һыуға маһирлығы, уҡыуҙа алдынғылығы, йәки ҡул эштәрен яратыуы, музыка ҡоралдарында уйнауы, оҫта бейеүе һәм йырлауы, ярҙамсыл һәм тәрбиәле булыуы тураһында һөйләне. Ә конкурста былар иғтибарҙан ситтә ҡалғандай, ҡыҙҙарҙың күңеле тамашасыларға асылмағандай тойолдо...

Бөтә Рәсәй кимәлендәге "Һылыуҡай" конкурсы һөҙөмтәләренә килгәндә, төп бүләк - "Лада Гранта" автомобиле асҡысын БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ҡулынан Учалы районы һылыуы Ләйсән Шөғәйепова алды. 19 йәшлек ҡыҙ С. Низаметдинов исемендәге Учалы сәнғәт колледжын тамамлап, ҡала филармонияһының "Уралтау" ансамблендә бейей. I урынды - Сибай ҡалаһынан Шәүрә Яхина, II урынды - Ырымбурҙан Линиза Солтанғужина һәм Пермь крайынан Гүзәл Наҙарғолова, III урынды Мәләүез ҡалаһынан Дилә Вәлиева, Көйөргәҙе районынан Розалина Ибраһимова һәм Бөрйәндән Эльвина Семенова яуланы. Башҡа конкурсанттар төрлө номинацияларҙа еңеүсе тип табылды һәм бөтәһе лә ойоштороусыларҙан ҡиммәтле бүләктәр алды.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕ БАЛАҺЫН...

## бүреккә һалһаң да илекмәҫ

Ауырыу - аштан, дау- ҡарындаштан, таҙ - таныштан, ҡутыр - ҡамыштан.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алдаҡтың аяғы ҡыҫҡа ла, ҡулы оҙон шул.

**(Лех Навроцкий).**

Алдаҡтың аяғы ҡыҫҡа ла, йөҙө бик мөләйем бит әле.

**(М. Путинковский).**

Әгәр ҙә ир-егет ҡатын-ҡыҙға бер ваҡытта ла алдамай икән, тимәк, ул ҡатын-ҡыҙҙың тойғоларына төкөрөп ҡарай.

**(Олин Миллер).**

Һөйгәненә "Алдайһың бит!" тип әйтмә, юҡһа, унын дөрөҫтө һөйләй башлауы бар.

**(Иоанна Вилиньская).**

Алдаҡсыға яҡшы хәтер кәрәк.

**(Квинтилиан).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ике юлсы-фәрештә бай бер ғаиләлә төнгөлөккә ҡунырға туҡтаған. Ғаилә хужалары бик үк ҡунаҡсыл булмай һәм юлсы-фәрештәләргә һалҡын ғына бүлмәләренән урын бирә. Йоҡларға ятҡас, фәрештәнең өлкәне бүлмә стенаһында бер тишек күреп ҡала ла, уны һылап ҡуя. Кесе фәрештә унан ниңә былай эшләүен һорай. "Әйберҙәрҙең барыһы ла һин тойғанса булмай" , тип яуап бирә өлкән фәрештә.**

**Иртәгәһенә улар юлға сыға һәм төнгөлөккә ярлы ғына, әммә шул тиклем ҡунаҡсыл хужаларҙың өйөндә туҡтала. Хужалар аҙ ғына булған ризыҡтарынан фәрештәләргә лә өлөш сығара, уларҙы үҙҙәренең түшәгенә йоҡларға һала. Иртән йоҡонан торһалар, өй хужалары илап, ҙур ҡайғыға ҡалып ултыра икән. Сәбәбе - уларҙы ашатҡан да, эсергән дә берҙән-бер һыйырҙары ятып үлгән. Шунда кесе фәрештә өлкәненән: "Ниңә былай килеп сыҡты әле? Беҙ кисә туҡтаған ғаилә бик бай ине, шулай ҙа һин уларға ярҙам иттең. Ә былар бик ярлы булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең менән ризыҡ һәм түшәк бүлеште, ә һин уларҙың берҙән-бер һыйыры ятып үлеүгә юл ҡуйҙың. Ни өсөн?" - тип һораған. "Әйберҙәрҙең барыһы ла һин тойғанса булмай, - тип яуап бирә өлкән фәрештә. - Беҙ бай ғаиләнең теге һалҡын бүлмәһендә булғанда стена артында бик күп алтын һаҡланыуын аңланым һәм шуға ла һаран бай уны тапмаһын өсөн стеналағы тишекте ямап ҡуйҙым. Ә был ғаиләлә йоҡлағанда мин хужаның ҡатыны артынан үлем фәрештәһе килеүен күрҙем дә, уға хужаның һыйырын биреп ебәрҙем. Әйберҙәрҙең барыһы ла һин тойғанса булмай..."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3007
Заказ - 1010/12